ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 ноябрь (ҡырпағай) 2021

№45 (983)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Айырылғанды айыу ашар...



2-3

Туған тел...

бала менән атай-әсәй араһын яҡынайта



8-9

Ауыл туризмы...

тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе таныта



11

Ҡошсолар...

күңелдәренән ҡош осорҙо



12-13

Йәшел дарыухана 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 731 һум 66 тингә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып та бүләк итә ала. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Уткән ай аҙағында илдә Сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу көнө билдәләнде. Был көнгә бәйле ниндәй хәтирәләр беләһегеҙ?

***Гөлсәсәк САЛАМАТОВА, филология фәндәре кандидаты, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Шәхес культы тотош СССР күләмендәге ҙур фажиғә ул. Нахаҡ бәлә яғылып, үлемгә һәм ҡот осҡос төрмә, лагерь шарттарына дусар ителгән миллионлаған золом ҡорбандары хаҡында хәҙер күп китаптар яҙылған, фильмдар төшөрөлгән; тарих үҙе улар алдында аҡланды ла кеүек, әммә был трагедия һәм уның шауҡымы халыҡ хәтеренән бер ҡасан да юйылмаясаҡ. Быуат менән быуат алышынған һайын, ул ҡабат-ҡабат үҙе хаҡында иҫкә төшөрөп торасаҡ.

Мин 1937 йылға тиклем булған, 30-сы йылдар башы тураһында бер нисә мәғлүмәт килтереп китер инем, сөнки ҡайһы берәүҙәр уйлауынса, репрессиялар 1937-1939 йылдарҙа ғына түгел, асылда, 20-се йылдарҙан уҡ күҙәтелә. Мәҫәлән, 1929 йылдың көҙөндә Баймаҡ районының Темәс, Иҫән, Ҡолсора, Таулыҡай, Икенсе Этҡол, Байыш ауылдарында күпләп ҡулға алыуҙар башлана. РФ Федераль именлек хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы архивында 5 томдан торған енәйәт эштәре һаҡлана. Ҡулға алынғандарҙың барыһын да, граждандар һуғышы осоронда Хажиәхмәт Унасов отрядында һуғыштылар һәм шул осорҙан һаҡлап ҡалған ҡоралдарын Ирәндек буйында йәшереп тоталар, совет власына ҡаршы ҡораллы ихтилалға күтәрелергә йыйыналар, тип ғәйепләйҙәр. Асылда, ошо ғәйепләү менән ҡулға алынғандарҙың барыһы ла Баймаҡ районында мәсеттәрҙе күпләп емереүгә ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдергән дини кешеләр була. 58 кеше ҡулға алына һәм улар енәйәт кодексының 58-2, 58-8, 58-10-сы статьялары буйынса хөкөм ителеп, 28 кеше 1930 йылдың 20 майында Өфө төрмәһендә атыла, 23 кеше - 10 йылға, 4 кеше - 5 һәм бер кеше 3 йылға хөкөм ителә, тағы ике кеше "енәйәт эштәрен" тикшереү барған ваҡытта вафат була. Хөкөм ителгән был кешеләрҙең күптәренең фамилиялары миңә таныш, сөнки был фамилияларҙы бөгөн районды сыҡҡан билдәле шәхестәр - ғалимдар, журналистар, табиптар йөрөтә. Был, тимәк, уларҙың хөкөм ителгән яҡындары һәм туғандарының уҡымышлы заттар булыуы хаҡында һөйләй. Ошо ҡулға алынып, хөкөм ителгән һәр кеше хаҡында айырым-айырым күп итеп яҙырға була һәм яҙырға кәрәк тә.

Мин тыуып үҫкән Икенсе Этҡол ауылынан да ошо енәйәт эшенә ике кеше эләгә. Тәүгеһе ул саҡта ауыл Советы рәйесе булып эшләгән Шәһәрғази Ғәбдиев, ул 10 йылға хөкөм ителә һәм Карелияға ебәрелә. Ауыр эштә эшләп, 6 йылдан һуң ғәрипләнеп ҡайта. Шулай ҙа Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, тәүгеләрҙән булып фронтҡа китә. Шундай парадокс: уны үҙ иле хөкөм итте, ә ул яу ябырылыу менән ҡулына ҡорал алып, ошо илде һаҡларға китә. Ысын патриоттар ғына шулай эшләй алалыр. Ә бит бындай шәхестәребеҙ бик күп булған. Икенсе ауылдашым - Мостафа Кәримов. Тирмәнсе була. Беҙҙең ауыл ғына түгел, тирә-яҡтарҙан да халыҡ уның тирмәненә йөрөй. Шул кешене 10 йылға хөкөм итеп, бөтә донъяһын пыран-заран килтереп, шул тирәләге ауыл халҡын тирмәнһеҙ ҡалдырып, Себер оҙаталар. Әйтеүемсә, 30-сы йылдарҙа күберәк дини кешеләрҙе ҡулға алһалар, 1937 йылда юғары белемле партия һәм дәүләт эшмәкәрҙәре, хәрби хеҙмәткәрҙәр, инеллигенция вәкилдәре - яҙыусылар, ғалимдар, табиптар һәм башҡа белгестәр юҡ ителә.

1938 йылдың 10 июлендә Башҡортостанда бер тәүлек эсендә атып үлтерелгән 44 кешенең исемлеген төҙөгәйнем. Был исемлек режиссер Булат Йософовтың "Беренсе Республика " фильмының нигеҙе булып торҙо. Ошо исемлектәге иң йәш кеше ни бары - 24, ә олоһо 52 йәштә була. Улар янып йөрөп эшләгән, ижад иткән, асыштар яһай торған, ғүмерҙәренең сәскә атҡан, илһамлы мәлдәрендә һәләк ителгән. Күпме аҡыл, талант юҡ ителгән! Сәйәси золом ҡорбандары иҫтәлеген йөрәгемә яҡын ҡабул иттем һәм улар хаҡында яңынан-яңы мәғлүмәттәр эҙләүҙе дауам итәм, сөнки быны изге бурысым тип иҫәпләйем. Был хаҡта йәш быуын вәкилдәре - студенттарыма ла йыш һөйләйем. Бөгөнгө йәштәребеҙ хаҡында, улар бик зирәк зиһенле, тип әйтер инем, һәр ваҡиғаны күңелдәре аша үткәрә беләләр. Уларға дөрөҫ йүнәлеш бирергә, тарихыбыҙҙы дөрөҫ аңларға өйрәтергә генә кәрәк.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҮҘ "ЙОРТОМА" ҠАЙТТЫМ

**Ниһайәт, был интернет тамам ялҡытты мине. Уның арҡаһында телевизор менән элек яратып уҡыған гәзит-журналдарымдан айырылдым. Телевизоры ярай инде, уны барыбер ҡарағы килмәй, ә бына гәзит-журналһыҙ күңел ҡорғаҡһыны.**




Телевизорҙы әйтәм, гел бер үк йөҙҙәр, бер үк һүҙҙәр, тигәндәй. Бер ниндәй күңелгә ятышлы тапшырыуҙар юҡ, туҡтауһыҙ йүнһеҙ рекламалар, тоҙһоҙ, бер-берепенә оҡшаш сериалдар йәнгә тейә, етмәһә. Шул уҡ Соловьев та, Малахов. Дөрөҫ, һирәкләп кенә БСТ-ны ҡарап алам былай. Тик барыбер гәзит-журналға етмәй инде. Күрәләтә туған телдәге баҫмаларыбыҙҙан алыҫлашҡаным өсөн үҙемде әрләп бөтөрә алмайым. Уларҙы сайттарынан уҡыйым, имеш. Юҡ шул, күптәр шулай тип үҙҙәрен алдатһа ла, яратҡан гәзит-журналыңды сайттан уҡыу - буш һүҙ ул, барыбер танһыҡты ҡандырмай. Сөнки, беренсенән, сайтҡа бөтөн мәҡәләләр ҙә һалынмай; икенсенән, уҡығаның елгә осоп торғандай: иҫтә лә ҡалмай, төпләмә итеп туплап барырға ла булмай. Ә мин бит гәзитемде ҡулға тотоп, башынан аҙағынаса ала-һала уҡып сығырға ғәҙәтләнгәйнем.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

✓ *Ашарға юҡ, туҡталған станцияларҙа ҡайнамаған, бысраҡ һыу эсеп, кешеләр күпләп дизентериянан ҡырыла башланы. Бер биҙрә һыуға шифалы үләндәр һалып ҡайнатылған һыу эсереп, беҙҙе ҡартатайым ҡотҡарып ҡалған.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# АУЫЛ ХАЛҠЫ ЛА ШАТ

**Көҙгө уңыш йыйылып, уны әүеш-тәүеш итеү эштәренең ҡыҙыу мәле. Һәр кем оҙон, һалҡын ҡышҡа әҙерләнеп, йәшелсә-емешен туплап, һаҡлауға әҙерләп, маҙ килеп йөрөгән саҡтар. Үҙе сәсеп үҫтереүселәрҙең уңышының күләмен ҡарап, ашауҙан артып ҡалырын һатыуға сығарып, әҙме-күпме аҡса эшләп ҡалырға тырышҡан мәл. Ҡалала йәшәһәм дә, ошо көҙгө байлыҡтан мин дә файҙаланып, бер аҙ килем алам йыл һайын.**

Мәләүеҙдә йәшәйем һәм баҡса үҫтермәйем, картуф сәсмәйем. Ләкин ҡышҡылыҡҡа етерлек емеш-еләк, йәшелсә туплайым һәр саҡ. Шулай бер мәл һатып алған йәшелсәләрҙең артыҡ күп булыуын күрҙем дә, подъездағы күршеләргә тәҡдим иттем. Бер сәғәт тигәндә һатып та бөттөм. Әлбиттә, һатып алған хаҡҡа юл сығымдарын, үҙемдең көс түгеүемде лә һалдым. Шулай итеп, артыҡ йәшелсәнән ҡотолоп ҡына ҡалманым, хатта аҡса ла эшләнем. Был, тәбиғи, минең күңелгә хуш килде һәм ошо эшмәкәрлекте юлға һалып алдым да, бына хәҙер 5-се йыл шөғөлләнәм. Уның ниМәһе бар, аҙым һайын емеш-йәшелсә һаталар, тиерһегеҙ. Ләкин бөтә нескәлектәрен белеп эш иткәндә, һатыу ҙа шәп бара, аҡса ла килә.

Шулай итеп, үҙем ҡулланған алымдарҙы яҙып үтәм. Йәшелсә-емештәрҙе, картуфты ҡаланан алыҫта ятҡан ауылдарҙан йыям. Һәр кемдең дә ҡалаға сығарып картуф һатырға мөмкинлеге юҡ, ә кәрәгенән артыҡ уңышты барыбер ҡайҙалыр итергә кәрәк. Шуға күрә, мин уларҙан ҡала янындағы ауылдарҙа һатҡандарҙан айырмалы рәүештә, күпкә осһоҙ хаҡҡа һатып алам. Шулай уҡ ҡулаҡсаға ғына түгел, ә башҡа төрлө аҙыҡ-түлеккә, хужалыҡ тауарҙарына, һабын һәм башҡа ошондай әйберҙәргә алыштырам. Уларҙы мин күмәртәләп һатып алғанға күрә, осһоҙ килеп сыға. Бер ҡасан да бер генә хужалыҡтан алмайым, ә төрләндереп йыям һәм уларҙы аралаштырып һатам. Көҙгө баҙарҙа һатыу итеүҙән тыш, интернет аша, күрше-күләнгә әйтеп, алдан заказ йыям һәм өйҙәренә тиклем алып барам.

Гараждағы мөгәрәпте йылытып, йәшелсә һаҡларлыҡ итеп эшләп алдым да, шуны көҙөн тултырып ҡуйып, ҡыш буйы һатыу итәм. Ҡыш бауыры оҙон, һәр кемдең дә тоҡлап һаҡларлыҡ урыны юҡ, шуға күрә әҙләп һатып ала. Ә магазиндағы әллә нимәләр менән эшкәртелгән йәшелсәгә ҡарағанда, ауылдан килтерелгәнде ихлас һатып алалар. Тәбиғи, ҡыш көнө хаҡтар арта. Мәҫәлән, әгәр ҙә бөгөн картуфтың бер биҙрәһен 25-30 һумға һатып алһам, ҡышын уның хаҡы 50 һум булыуы мөмкин. Хаҡты магазин, баҙарҙыҡы менән сағыштырам да, 1-2 һумға арзаныраҡ һатам. Әллә ни ҙур айырма юҡ кеүек, ләкин халыҡ 50 тин булһа ла осһоҙораҡты эҙләй.

Йәшелсә миҙгеле тынғандан һуң, ҡалала ҡаҙға заказдар йыям да, тағы ла ауылда күптән танышып алған хужаларға шылтыратам. Килешелгән көнгә улар әҙерләп ҡуя, мин барып алам да, һәр береһенә 200-250 һум өҫтәп, таратып сығам. Әгәр ауылдарҙа күмәртәләп, тимәк, осһоҙораҡҡа алып, ҡалала ҡыйбатайтып һатыуымды иҫәпкә алғанда, килем арыу ғына була. Ҡаҙ артынан барғанда машинамды бушҡа ҡыумайым, малға ашатырға ем кеүек нәмәләр алып барам. Шулай уҡ башҡа төрлө заказдарҙы ла үтәргә тырышам. Мин дә килемле, ауыл халҡы ла шат. Көҙөн бигерәк тә резина итектәр, кәртәгә кейергә бирсәткәләр, бийма, сөй-ҡаҙаҡ, көрәк һәм һәнәк кеүек әйберҙәр эҫе бөйөрөк кеүек үтә.

Бына ошондай ябай, ләкин эшмәкәрлекте килемле итерлек алымдар ҡулланып эшләйем. Бәлки, берәйһенең күҙенә салыныр ҙа, әҙме-күпме аҡса эшләргә ярҙам булыр. Шулай ҙа артыҡ шашып китеү, ауылда йәшәүселәрҙе талау ярамаҫ, һәр нәмәлә сама булырға тейеш. Уларҙың ҡул көсөн артыҡ арзанайтыу килешмәгән эш икәнен онотмайыҡ, йәмәғәт.

**Рифҡәт СИРУСИН.**

АБВ



**2005 йылдан башлап 4 ноябрь Рәсәйҙә Халыҡ берҙәмлеге көнө булараҡ билдәләнә. Күптәр был датаны элекке Бөйөк Октябрь революцияһы көнө уңайынан барлыҡҡа килгән, шуның урынына ойошторолған байрам тип аңлатырға тырышһа, ысынында, был көн 1612 йылда Кузьма Минин менән Дмитрий Пожарский етәкселегендәге халыҡ ополчениеһының Кремлде поляктарҙан азат итеүенә бәйле шанлы ваҡиғалар айҡанлы билдәләнә. Ошо байрам уңайынан халыҡ берҙәмлеге, ғөмүмән, берҙәмлек хаҡында бер нисә фекеремде белдермәксемен.**

# АЙЫРЫЛҒАНДЫ АЙЫУ АШАР...

А

Бер берәмек!
Кемгә икән хәжәт?
Берҙең тауышы
Сыйылдауҙай мәҙәк.
Кем ишетер уны?-
Ҡатынымы!
Баҙарҙамы?...

Владимир Маяковскийҙың бер поэмаһында ошо юлдар бар. XX быуатта Рәсәйҙә башланған оло үҙгәрештәрҙе нисек кенә онотторға, инҡар итергә теләһәк тә, уларҙың халыҡтар берҙәмлеге һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡанын бер нисек тә инҡар итә алмайбыҙ. Халыҡтар берҙәмлеге булмаһа, ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында Рәсәй артта ҡалған аграр илдән ҡеүәтле индустриаль дәүләткә әүерелә алыр инеме? Берләшмәһәк, Гитлер фашизмына ҡаршы тора алыр инекме? Һуғыш емереклектәренән илебеҙҙе ҡыҫҡа ваҡыт эсендә аяҡҡа баҫтырып, Йыһанды яулай алыр инекме? Шуға күрә 4 ноябрь байрамы 1612 йылғы ваҡиғалар нигеҙендә барлыҡҡа килһә лә, асылда, ул илебеҙ халыҡтарының йәшәү рәүешен күрһәтеүсе оло сара.

Б

4 ноябрҙә үткән Халыҡтар берҙәмлеге көнө башҡорт халҡының да оло байра-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Үткән ай аҙағында илдә Сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу көнө билдәләнде. Был көнгә бәйле ниндәй хәтирәләр беләһегеҙ?***

***Фәһимә СӘҒИТОВА, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Сәйәси золом ғәрәсәте сәйәсәткә бер ниндәй ҡатнашы булмаған беҙҙең ябай ғаиләне лә урап үтмәне. Бөтә "бәлә" ҡартатайымдың үҙ әрһеҙлеге, тырышлығы менән ҙур ғаиләһен аҫрау өсөн хужалығында бер ат менән бер һыйыр тотоуы сәбәпсе булды. Етмәһә, ҡартатайым заманына күрә уҡымышлы, белемсел кеше, ауыл муллаһы булып та торған. "Халыҡ дошманы" тип Себер һөрөү өсөн бына ошолар ҙа "етерлек нигеҙләмә" булған, күрәһең. Ул саҡта кешесә етеш йәшәргә тырышҡандарҙы күрәлмаусанлыҡ та көслө ине, шул арҡала кемдәрҙеңдер баштарын йәзит ошаҡсы һәм донос яҙыусылар ҙа күп "ашаны". Ә бит астан үлмәҫ өсөн бер ат менән бер һыйыр аҫраған ғаиләне урта хәлле тип тә әйтеп булмай хатта. Шуға ҡарамаҫтан, кулак мөһөрө һуғылған башҡа ярайһы хәлле һәм серегән байҙар менән бер рәттән, беҙҙе лә Себер ҡыуҙылар.

Мин ул ваҡытта бәләкәй генә булһам да, ҡайһы бер драматик эпизодтарҙы бөгөнгөләй хәтерләйем. Нышып тултырылған тынсыу вагондарҙа бик оҙаҡ поезд менән барҙыҡ. Ашарға юҡ, туҡталған станцияларҙа ҡайнамаған, бысраҡ һыу эсеп, кешеләр күпләп дизентериянан ҡырыла башланы. Әсәйем һөйләүенсә, бер биҙрә һыуға шифалы үләндәр һалып ҡайнатылған һыу эсереп, беҙҙе ҡартатайым ҡотҡарып ҡалған. Себерҙәге беҙгә тәғәйенләнгән урынға барып төшкәс, бер аҙ ваҡыт землянкала йәшәгәнебеҙ хәтерҙә, аҙаҡ өй һалып индек, атайымды ошонда ойошторолған колхоздың рәйесе итеп һайланылар. Ҡарайбыҙ, бында кешеләр колхозда ла эшләй, шәхси хужалыҡтарында ла иркенлектә йәшәй, тип һөйләй торғайны әсәйем. Беҙҙең унған ғаилә лә тиҙ үк мандып китә: 3 һыйыр, башҡа мал аҫрайбыҙ, умарта тотабыҙ. Яҡындарымдың: "Ниңә беҙҙе бында элегерәк үк ебәрмәнеләр икән?" - тип мәрәкәләшкәндәре иҫемдә. Бының менән шуны әйтергә итәм: әлбиттә, тыуған ерҙәренән һөрөлөп килгән кешеләргә Себер шарттары еңелдән бирелмәне, көнкүреш-йәшәйештәрендә лә, "халыҡ дошманы, кулак" ҡушаматтары йөрөтөүҙән психологик кисерештәр йәһәтенән дә... Ләкин үҙ ғәйептәре юҡлығын белеү кешеләргә бирешмәҫкә, ҡасан да булһа ҡанһыҙ власть башбаштаҡлығына сик ҡуйылырына ышаныс менән йәшәргә, сәмләнеп эшләргә көс бирҙе. Тырыш ғаиләләр бында ла юғалып ҡалманы, етеш, матур итеп донъя ҡорҙолар һәм яңы көн тыуырын көттөләр. Һәм ул көн килде. Сталин үлеп, Берия һәм уның әпкәләйҙәре ҡулға алынып, тейешле яҙаһын алғас, башҡалар кеүек үк, беҙ ҙә ғаиләбеҙ менән Башҡортостанға әйләнеп ҡайттыҡ.

"Поселение"ға ҡыуылғандар үҙ тырышлыҡтары менән һәүетемсә йәшәп киткән хәлдә лә, Себер лагерҙарына, каторгаларға ебәрелгәндәрҙең хәле ифрат та хөрт була, әлбиттә. Алыҫ Көнсығышта, Колымала, Заполярьела, Карелияла, Себер тайгаларында урман ҡырҡыу, ағас эшкәртеү, төҙөлөш, карьерҙа таш соҡоу, алтын, уран ҡаҙылмалары сығарыу кеүек ауыр ҡул хеҙмәте, аслыҡ, сир, ҡаты яҙалау саралары арҡаһында 2 миллионға яҡын бер ғәйепһеҙ кешеләр үлемесле лагерҙарҙа баштарын һала. Был хаҡта күп яҙылды, китаптар баҫылып сыҡты, кинофильмдар төшөрөлдө. Айырыуса сәйәси тотҡон мөһөрө һуғылған кешеләргә төшә төп ауырлыҡ. Асылда иһә, тап ана шулар совет власына бирелеп хеҙмәт иткән урта звено партия һәм совет төҙөлөшө хеҙмәткәрҙәре, интеллигенция вәкилдәре - илебеҙҙең патриоттары була ла инде. Сталиндың шәхес культы илебеҙ тарихындағы иң аяуһыҙ, ғибрәтле һабаҡтыр. Ундай аҡылһыҙлыҡҡа башҡаса бер заманда ла юл ҡуйылырға тейеш түгел.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров эш сәфәре менән Туймазы ҡалаһында булды. Ул инфекция дауаханаһын төҙөү биләмәһен ҡараны һәм ойоштороу эштәренә бәйле кәңәшмә үткәрҙе. Андрей Назаров төҙөлөш майҙансығының тулыһынса әҙер булыуын һәм уның уңайлы урында һайланыуын билдәләне. Туймазы, Октябрьский һәм Бәләбәй ҡалаларындағы дауаханаларға ҙур көсөргәнешлек төшә. Шуға ла ковид-госпиталь һалыу мөһим, тип белдерҙе ул.

✓"Беҙҙең хәстәрлек" ирекмәндәр үҙәге былтыр мартта ойошторолдо. Ул 25 ойошманы берләштерә. Үҙәк медицина хеҙмәткәрҙәренә лә ярҙам итә. Мәҫәлән, "Хәстәрлек. Такси" акцияһы барышында ирекмәндәр табиптарҙы ковид-госпиталгә эшкә алып барыуҙы ойоштора. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай вице-спикеры, "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы етәксеһе Рөстәм Ишмөхәмәтов әйтеүенсә, ирекмәндәр хәрәкәтен киңәйтеү мөһим. Коронавирус инфекцияһы таралған мәлдә волонтерҙарҙың эше айырыуса әһәмиәткә эйә, ти ул. Ирекмәндәр менән бәйләнеш телефоны: 8-800-201-89-03. Шылтыратыуҙар иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем ҡабул ителә.

✓Башҡортостанда йәмәғәт урындарына барғанда ПЦР-тестарҙы күрһәтеү ғәмәлдән сығарылды. 27 октябрҙән республикала ковидҡа ҡаршы указға ПЦР-тестарға ҡағылышлы үҙгәрештәр көсөнә инде. Сауҙа үҙәктәренә, матурлыҡ салондарына, бассейндарға, фитнес-үҙәктәргә, музейҙарға, күргәҙмә залдарына, китапханаларға ковидтан прививка тураһында сертификат йәки ярты йыл эсендә коронавирус менән сирләү хаҡында белешмә менән генә инергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта пациенттарҙы дауаханаға һалғанда ПЦР-тест үтеү тураһында белешмә ғәмәлдә була.

✓Коронавирусҡа бәйле илдә эпидемиологик хәл киҫкен булыу сәбәпле, 30 октябрҙән 7 ноябргә тиклем Рәсәйҙә ял иғлан ителде. Оҙайлы ялдар барышында зыян күргән бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа, рәсми рәүештә уларға эшкә урынлашҡан һәр хеҙмәткәргә федераль эш хаҡы түләүҙең минималь күләме буйынса ярҙам күрһәтеләсәк. Беҙҙең илдә был сумма - 12 мең 792 һум. Матди ярҙам алыу өсөн Федераль һалым хеҙмәтенә шәхси кабинет аша ғариза бирергә кәрәк. Документтар 1 ноябрҙән 15 декабргә тиклем ҡабул ителә. Түләүҙәр 15 ноябрҙән башлана. Бынан тыш, зыян күргән эшҡыуарҙар льготалы кредит юллай ала.



мы. 2007 йылда Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығын билдәләгән сараға Өфөгә килгән Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙенең сығышында шулай тигәйне: "Башҡорт халҡы һәр ваҡыт Рәсәй сиктәрен намыҫ менән ҡаһармандарса һаҡланы. Бының сағыу бер миҫалы - ул 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт полктарының ҡатнашыуы. Әйткәндәй, ул саҡта Башҡортостан атҡа атланырға һәләтле ир-аттың барыһына ла ҡорал тотторҙо һәм фәҡәт кенәз Ҡудашев отряды составындағы башҡорт һыбайлылары Кремлде шартлатыуҙан һаҡлап алып ҡалды.

Тарихтан билдәле булыуынса, башҡорт яугирҙары Минин һәм Пожарскийҙың данлыҡлы ополчениеһында, Петр Беренсенең Азов походында оло батырлыҡ күрһәтте, шулай уҡ Башҡортостан халҡы Бөйөк Ватан һуғышы бәрелештәрендә һүнмәҫ дан ҡаҙанды..."

Ырыу-ҡәбиләләр берләшһә - халыҡ, халыҡтар берләшһә - дәүләт барлыҡҡа килә. Тарҡау монгол ырыу-ҡәбиләләрен Темуджин (Сыңғыҙхан) бер ҡулға, "меңғулға" (монголға) туплаһа, Усман Ғази төркмән ырыу-ҡәбиләләрен бергә туплап, боронғо Византия дәүләте биләмәһендә Ғосман дәүләтен (хәҙерге Төркиә) төҙөй, Уралдағы баш ҡорға (башҡорт) беҙ тупланғанбыҙ. "Береккән өйөрҙө бүре алмай", "Берҙәмлектә - көс", "Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар" ти халыҡ мәҡәле.

Тимәк, быйылғы 4 ноябрҙә үткән байрам бигерәк тә көнүҙәк, тап ошо көндәрҙә илебеҙҙә халыҡ иҫәбен алыу бара. Был факт та беҙҙе берҙәмлеккә, бер ҡул булып ошо мөһим кампанияла ҡатнашырға, ҡатнашмай ҡалмаҫҡа, иҫәпле лә, һанлы ла булырға саҡыра.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Үткән ай аҙағында илдә Сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу көнө билдәләнде. Был көнгә бәйле ниндәй хәтирәләр беләһегеҙ?

***Рафиҡ АЛЛАБИРҘИН, тарих уҡытыусыһы:*** Тарих - ул иң тәүҙә мәғлүмәт, тип ҡарайым мин. Сөнки, әгәр дәрестә балаларға теге йәки был теманы үткәндә материалды тейешле факттар менән тулыландырмаһаң, ваҡиғаларҙы ҡоро тасуирлап, һөйләп сығыуҙан ғына был уҡыусыны ҡыҙыҡһындырмаясаҡ. Электән шулай өйрәнгәнмен: яңы теманы үтер алдынан мин ошо хаҡта дәреслектәрҙә булмаған йә булһа ла етерлек дәрәжәлә яҡтыртылмаған факттарҙы эҙләйем. Элегерәк китапханаларҙа, архивтарҙа ултырырға тура килә ине, хәҙер был йәһәттән интернет ярҙам итә.

Әле бына һеҙҙең һорау буйынса ла интернетта эҙләнеп, ошоға тиклем киң йәмәғәтселеккә бигүк билдәле булмаған ҡайһы бер мәғлүмәттәргә тап булдым. Власть башында 30 йылдан ашыу ултырған диктатор тарафынан илебеҙ тарихының тыныс осоронда ҡылынған иң ҡанлы һәм аяуһыҙ был фажиғә - сәйәси золомдо төрлө дәреслек авторҙары төрлө кимәлдә яҡтырта, ә шулай ҙа властың бөтөн яуызлыҡтарын да уҡыу дәреслектәрендә яҙып бөтөрөрлөк түгел, әлбиттә. Шуға ла өҫтәмә материалдар эҙләү уҡытыусы иңенә төшә һәм был беҙҙең үҙебеҙ өсөн дә ғибрәтле - күп нәмәләргә икенсе күҙлектән ҡарарға өйрәтә.

Бына, мәҫәлән, календарҙа Золом ҡорбандарын иҫкә алыу көнөн (30 октябрь) билдәләүҙең үҙ тарихы барлығы күптәргә билдәле лә түгелдер, моғайын. РСФСР Юғары Советының был туралағы 1991 йылдың 18 октябрендәге Ҡарары 1974 йылдың 30 октябрендә Мордовия һәм Пермь төрмәләрендәге сәйәси тотҡондарға ҡарата сәйәси золом күренештәренең дауам итеүенә һәм төрмәләрҙә, лагерҙарҙа тотҡондарға ҡарата аяуһыҙ ҡаты мөнәсәбәткә ҡаршы аслыҡ иғлан итеү көнөнә нигеҙләнгән. Ә инде 1987 йылдан башлап террор күренештәренә ҡаршы төрлө ҡалаларҙа демонстрация һәм митингылар үткәрелә башлай. Был, тимәк, кеше хоҡуҡтарын ирекһеҙләү, "ҡул ҡайырыу"ҙар һәм язалауҙар шәхес культынан һуң да урыны менән дауам итә, тигән һүҙ. Ғөмүмән, илдәге тоталитар режим ҡорбандарының иҫәбе-һаны юҡ, уның аныҡ ҡына рәсми иҫәбе лә юҡ, тиҙәр. Һаҡланған документтарҙан сығып, 1921-1953 йылдар буйына 4,6 млн кеше репрессия ҡорбаны булған.

Ошоға тиклем халыҡ араһында ғәйепһеҙ кешеләрҙең ҡулға алынып, төрмәләргә ябылыуы, күптәрен атып үлтереүҙәре хаҡында Сталин белмәгән, имеш, тигән миф, әкиәт йәшәп килде. Былтыр "Коммерсант" гәзитендә Иосиф Сталин үҙенең ҡултамғаһын ҡуйып, "за" тип хуплап, рөхсәт биргән ҡот осҡос документтар баҫылып сыҡты. Бына шуларҙың береһе: *"ВКП(б) секретары ип.Сталинға. НКВД-ның тикшереү органдары кулактар һәм советтарға ҡаршы элементтар һаны етерлек кимәлдә булмау сәбәпле, был ике категория буйынса лимитты 1800 һәм 3300 кешегә арттырыуҙы һорай. Дағстан обкомы секретары Самурский".*

*2-се документ: "Ип.Сталинға. Ип.Микоян Әрмәнстанды советтарға ҡаршы элементтарҙан таҙартыу өсөн өҫтәмә рәүештә тағы ла 700 кешене атырға рөхсәт һорай. Эске эштәр наркомы Ежов. 23 сентябрь 1938 йыл".* Тура-нан-тура Сталин исеменә "ҡаты сер " грифы һуғылған бындай хаттар илдең бөтөн төбәктәренән дә килгән һәм "халыҡтар атаһы" уларҙың бөтәһенә лә ризалыҡ биреп, ҡултамғаларын ҡуйған. Был документтарҙың күбеһе ГУЛАГ тарихы музейында һаҡлана. Атып үлтерергә хөкөм ителгәндәр исемлектәренә иң күп ҡул ҡуйыусылар Сталин (357 исемлек) менән В.Молотов (372) булған, уларҙан ҡала И.Каганович (188), К.Ворошилов (185), А.Жданов (176), А.Микоян (8) һәм аҙаҡ үҙе лә атып үлтерелгән С.Косиор (Украина етәксеһе) 5 исемлеккә рөхсәт биреп ҡул ҡуйған.

Сәйәси золом ҡорбандары датаһы бындай фажиғә башҡа бер ҡасан да тормошобоҙҙа ҡабатланмаһын, халыҡтар уның ни икәнен белһендәр һәм уға юл ҡуймаһындар өсөн булдырылған, юғиһә, теләһә ниндәй власть та кеше ихтыярын һындырыу, буйһондороу һәм, ғөмүмән, власҡа бер ниндәй ҡаршылыҡ белдермәһендәр өсөн ошондай кешелекһеҙ яза ысулын теге йәки был кимәлдә ҡулланыуы ихтимал. Был йәһәттән айырым миҫалдарҙы бик күп килтерергә булыр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## БЫНАҒАЙЫШ!



# КҮСЕП КИТЕРГӘМЕ ИНДЕ?

**Башланды… Коронавирустан да дер ҡалтырап, депрессияла йәшәүсе халыҡтың нервыларын әле килеп мәңге туймаҫ "Теплосбыт" филиалдары ҡапшай ҙа башланы: хаҡтар тағы ла артасаҡ, тип һөйөнсөләй улар.**

Йылылыҡ ресурсы хужаларына был ҙур һөйөнөс, әлбиттә, әйтерең бармы, ә халыҡ өҫтөнә көйөнөс артынан көйөнөс яуып ҡына тора. Йә күҙ терәп торған ризыҡтарына хаҡ арта, йә коммуналь хеҙмәттәргә. Әле ҙур хәбәр итеп, һүҙ юҡта һүҙ булһын, тигәндәй, Башҡортостанда йылылыҡ өсөн хаҡтарҙың ни өсөн ҡабара барыуының сәбәптәрен аңлаталар. Тарифтар буйынса БР Дәүләт комитеты ла "Теплосбыт" көйөнә көйләнгән, ахыры. Был ведомство хужаһы С.Бурдюк тигән ханым аңлатма биреүенсә, илдең башҡа эре ҡалаларына ҡарағанда, Өфөлә йылылыҡ тарифының юғары булыуы йылылыҡ сығанаҡтары һанына бәйле, имеш. Мәҫәлән, ти ул, Ҡаҙан ҡалаһында йылылыҡ сығанаҡтары һаны ни бары 45 процент тәшкил итһә, Өфөлә ул - 91 процент. Үҙәк йылылыҡ пункттары тариф иҫәбенә "аҫрала" ти ул, ә улар Ҡаҙанда - 125, Өфөлә - 298. Был ғына ла етмәй әле аҡланырлыҡ сәбәп өсөн, өҫтәүенә, тағы бер сәбәп килтерелә: йылылыҡ селтәрҙәре оҙонлоғо ла халыҡ кеҫәһе яуы икән дә. Бурдюк нишләптер тағы ла Ҡаҙан өлгөһөн телгә ала: унда бына әлеге оҙонлоҡ һис тә оҙон түгел - 579 км ғына икән, ә Өфөлә - 1063,8 км , йәғни Ҡаҙанға ҡарағанда 83 процентҡа күберәк! Беҙгә нимә, хәҙер Ҡаҙанға күсеп китергәме инде?

Дөрөҫөн әйткәндә, ҡулланыусыны хаҡтар артыу сәбәптәре ҡыҙыҡһындырмай ҙа, уның былай ҙа ҡайғыһы баштан ашҡан. Был хаҡта ресурс хужаларының үҙҙәренең башы ауыртһын. Ә инде законһыҙ рәүештә тарифтарҙы икеләтә-бишләтә арттырып, халыҡты талау юлы менән генә хәлдән сығырға өмөт итәләр һәм эште башҡаса цивилизацияға ярашлы ойоштора белмәйҙәр икән, компанияны дәүләт ҡарамағына тапшырһындар, банкротлыҡ иғлан итһендәр. Халыҡтың аҡтыҡ аҡсаһын ҡайырып алып, кем дә эш күрһәтә ала. "Теплосбыт" филиалы "БашРТС" директоры И.Попова ла, йылдағыса, үҙ йырын көйләй. Бурдюк ханымдың һүҙҙәрен ҡеүәтләп, ул әле октябрҙә үк ҡулланыусынан аҡса ҡайырмаҡсы. Йәнәһе лә, быйыл октябрь былтырғыға ҡарағанда "чуть-чуть" һалҡын булды, имеш...Ә фатирҙарҙағы батареялар бит, киреһенсә, "чуть-чуть" йылымыс булманымы ни, Попова ханым?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ауыл хужалығы министрлығы "Рәсәй тәмдәре" конкурсында Башҡортостан брендтары өсөн тауыш бирергә саҡырҙы. "Халыҡ тауыш биреүе" этабында ҡатнашыу өсөн бренд 1 меңдән күберәк тауыш йыйырға тейеш. Конкурста бөтәһе 15 бренд ҡатнаша. Әлеге ваҡытта "Башҡорт өсмөйөшө" 800-гә яҡын тауыш йыйған, артабан бал, ҡаҙ килә. Тауыш биреү 7 ноябргә тиклем бара. Һәр төбәк вәкиле яратҡан өс ризығы өсөн тауыш бирергә мөмкин. Бының өсөн конкурстың сайтына инеп, исемлектән төбәкте һәм брендты һайларға кәрәк.

✓30 октябрҙән 8 ноябргә тиклем Төркиәлә "Евразия королеваһы-2021" халыҡ-ара гүзәллек конкурсы уҙғарыла. Унда Евразияның төрлө илдәренән һылыу ҡыҙҙар ҡатнаша. Конкурста фото һәм видео-сессия, хәйриә проекттары, экскурсиялар, таланттар шоуы, бикини шоуы ойоштoрола. Башҡортостандан "Мисс Республика-2020" төбәк матурлыҡ конкурсы еңеүсеһе Альбина Шәйхелисламова ҡатнаша. Альбинаға 22 йәш, Башҡорт дәүләт медицина университетында уҡый, ковид-госпиталдә шәфҡәт туташы булып эшләй.

✓Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә ҡайһы бер категориялар өсөн коронавирустан мотлаҡ вакцинация индерелде. Был хаҡта Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попова хәбәр итте. Мотлаҡ вакцинация уҡытыусыларға, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренә, табиптарға, сауҙа, дөйөм туҡланыу, транспорт өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә ҡағыла. Бынан тыш, хеҙмәткә алынырға тейешле граждандарға, студенттарға һәм 60 йәштән өлкәндәргә коронавирустан прививка эшләйҙәр. Роспотребнадзор етәксеһе һүҙҙәренсә, халыҡтың 60 проценттан күберәгенә хәүефле инфекциянан прививка яһалған илдәрҙә сирҙең интенсив күрһәткесе йәйгеһе менән сағыштырғанда түбәнерәк.

✓Башҡортостанда ғына 1,157 миллион пенсионер йәшәй, уларҙың 142 меңе 80 йәште уҙған, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының республика буйынса бүлексәһенән. Белдереүҙәренсә, 80 йәше тулған пенсионерҙар арттырылған пенсия алыу хоҡуғына эйә. 6044,48 һум күләмендәге ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһына билдәләнгән түләү 80 йәшкә еткәс икеләтә артып, 12088,96 һум була. Рәсәй Президенты указына ярашлы 80-нен тултырған пенсионерҙарҙы ҡарағандарға ай һайын 1380 һум аҡса алыу хоҡуғы бирелә.

✓ *Госпиталде квалификациялы кадрҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһен дә хәл итеү мөһим. Бының өсөн Сибай медколледжын модернизациялау һәм студенттар һанын арттырыу планлаштырыла.*



ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫРТЫЛДЫ

✓ **Башҡортостан Республикаһының яңыртылған Конституцияһының тексы башҡорт һәм рус телдәрендә баҫылды.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай сайтында республика Конституцияһының тулы тексы рус һәм башҡорт телдәрендә донъя күрҙе. "Башҡортостан парламенты республикабыҙҙың Төп Законына үҙгәрештәр индереү буйынса ҙур эш башҡарҙы, - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Башҡортостан Республикаһы Конституцияһында Рәсәй Федерацияһының яңыртылған Конституцияһының тезистары сағылыш тапты һәм үҫеш алды. Улар араһында - социаль гарантияларҙы нығытҡан, илһөйәрлек тәрбиәләүгә, традицион ғаилә ҡиммәттәрен, халыҡтарҙың мәҙәни үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән әһәмиәтле положениелар. Конституция - мөһим норматив документ, барлыҡ хоҡуҡ системаһының нигеҙе булып тора. Бер закон да, бер ҡарар йәки бойороҡ та Конституцияға ҡаршы килә алмай. Ике дәүләт телендәге документ Дәүләт Йыйылышы сайтында баҫылған. Башҡорт теленә тәржемә ителгән төп закон тәү сиратта бөтә кимәлдәге депутаттар, милли матбуғат журналистары, уҡытыу башҡорт телендә алып барылған уҡыу йорттары уҡытыусылары, уҡыусылары өсөн кәрәк".

✓ **Рәсәйҙең Олимпия комитеты 2022 йылда Пекинда үтәсәк Ҡышҡы Олимпия уйындарына йыйылма командаға кандидаттар исемлеген билдәләгән.** Унда биатлон, бобслей, скелетон, тау саңғыһы, керлинг, конькиҙа йүгереү, саңғы икеалышы, саңғыла уҙышыу, саңғы менән трамплиндан һикереү, сана спорты, сноуборд, фигуралы шыуыу, фристайл, хоккей, шорт-трек буйынса барлығы 599 спортсы ингән. Башҡортостандан 26 спортсы бар. Улар: Антон Бабиков менән Эдуард Латыпов (биатлон), Юлия Беломестных, Александра Тарасова, Ростислав Гайтюкевич, Георгий Кузьменко, Александр Третьяков, Ильвир Хузин (бобслей), Эрнест Яхин (саңғы икеалышы), Елизавета Сәлихова (сноуборд), Виктор Лобас (конькиҙа йүгереү), Мария Баталова, Дарья Белоглазова, Вероника Коржакова, Полина Лучникова, Илона Маркова, Мария Печникова, Анна Пругова, Елизавета Роднова, Мария Сорокина, Ольга Сосина, Татьяна Шибанова, Михаил Науменков (хоккей). Анастасия Мигунова, Семен Елистратов, Лим Кәбиров (шорт-трек). Пекин Олимпиадаһы 2022 йылдың 4 - 20 февралендә үтәсәк. Спорт арбитраж суды ҡарары буйынса Рәсәй йыйылма командаһы милли флаг һәм гимнһыҙ сығыш яһаясаҡ.

✓ **Дәүләт Йыйылышы депутаттары республикала ауыл туризмын үҫтереүгә йүнәлтелгән закон проектын ҡарарға ниәтләй.** Федераль закон билдәләүенсә, ауыл биләмәләрендә, 30 меңгә тиклем кеше йәшәүсе бәләкәй ҡалаларҙа ауыл туризмын ойоштороу ял итеү, быңдағы традицион йәшәү тәртибе менән танышыу, матди файҙа алыуҙы түгел, ә бында ваҡытлыса булыу һәм урынлашыуҙы, ауыл хужалығы эштәрендә ҡатнашыуҙы, буш ваҡытты ойоштороуҙы, экскурсиялар һәм башҡа хеҙмәттәр менән файҙаланыуҙы күҙҙә тота. Парламент спикеры Константин Толкачев әйтеүенсә, ауыл туризмын үҫтереү дөйөм донъя кимәлендә йүнәлеш алды һәм был ауылдар менән бәләкәй ҡалаларға килем сығанағы булып та хеҙмәт итә. "Коронавирус пандемияһы ауыл туризмы хеҙмәттәренә ихтыяж тыуҙырҙы, - ти Константин Толкачев. - Был аңлашыла ла: берҙән, ул арзанға төшһә, икенсенән, бында халыҡ мыжғып тормай. Шунлыҡтан, вирус йоҡтороу ихтималлығы ла әҙ. Туризм буйынса Бөтөн донъя ойошмаһы баһалауынса, һуңғы бер нисә йылда ауыл туризмы донъя иктисадының иң шәп үҫешеүсе тармаҡтары иҫәбенә инде. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, был ауыл ерендә ял итеүҙең теләгән бер төрө - гастрономик, ваҡиғаларға нигеҙләнгән, этнографик туризм". Был төр туризмды үҫтереү ауылдарҙың һәм бәләкәй ҡалаларҙың милли-мәҙәни үҙенсәлектәрен һаҡлауға ла булышлыҡ итә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СИБАЙҘА ТӨҘӨЛӘ



**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Сибайҙа инфекция госпитале төҙөләсәк майҙансыҡты ҡараны.**

Уны ике ай эсендә төҙөргә планлаштырыла. Андрей Назаров ни өсөн Сибай һайланыуын аңлатып үтте: ҡала Өфөнән йыраҡ урынлашҡан, шуға бәйле Урал аръяғы халҡының күбеһе баш ҡаланың һаулыҡ һаҡлау инфраструктураһын файҙалана алмай. Инфекция госпитален төҙөү юлға ваҡыт әрәм итмәй, пациенттарҙы үҙендә дауалау мәсьәләһен хәл итәсәк. Ул тулыһынса заманса техника менән йыһазландырыласаҡ. Сифатлы медицина хеҙмәтләндереүе өсөн бөтәһе лә ойоштороласаҡ.

Премьер-министр әйтеүенсә, һайланған майҙансыҡ ике критерийға тура килә. Беренсенән, ул тиҙ төҙөлөш өсөн әҙер. Участкала бөтә инженер-коммуникациялары бар, йәки яҡын ерҙә урынлашҡан. Икенсенән, сибайҙарҙан тыш, Урал аръяғының башҡа райондарынан да дауаланырға килә аласаҡтар. Госпиталде квалификациялы кадрҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһен дә хәл итеү мөһим. Бының өсөн Сибай медколледжын модернизациялау һәм студенттар һанын арттырыу планлаштырыла. Бынан алда төҙөлгән госпиталдәрҙәге кеүек, ятаҡхана ла була. Ул белгестәргә ситтән килеп эшләргә булышлыҡ итәсәк. Бында йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа тыуҙырыласаҡ. Госпиталь Өфө районы Зубовола һәм Стәрлетамаҡта кеүек, ҡурай формаһында төҙөләсәк. Госпиталгә дүрт бүлексә (40 бокс), экспресс-лаборатория, бер реанимация һәм интенсив терапия (10 бокс), ҡабул итеү, патологоанатомия бүлексәләре инә. Бынан тыш, уны медицина газы станцияһы менән йыһазландырасаҡтар.

# ЭШСЕ КАДРҘАРЫ ЕТМӘЙ



**Төп шарт - педагогтар айырым эш биреүсе талап иткән белгестәрҙе әҙерләргә тейеш. "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында урта һөнәри белем биреү өлкәһендәге хәлдәр тураһында һөйләшеү уҙҙы. Сарала Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин, республика колледждары етәкселәре, эш биреүсе компания вәкилдәре булды.**

Айбулат Хажин республикалағы урта һөнәри белем биреүҙең төп проблемаларын һанап уҙҙы. Беренсенән, матди-техник базаның наҡыҫ булыуы - ул айырыуса оҫтаханалар һәм лабораторияларҙың ҡорамалдарына ҡағыла. Был йүнәлештә һиҙелерлек аҙымдар ҙа бар: республикала 67 оҫтахана WorldSkills донъя стандарттарына ярашлы йыһазландырылған, тағы 42 оҫтаханаға ҡорамалдар өсөн конкурста еңеү яуланған. Матди базаны модернизациялауҙа колледждарҙың сығарылыш уҡыусыларында мохтажлыҡ кисергән эре предприятиелар ярҙам итә.

Икенсе проблема - урта һөнәри белем биреү өлкәһендә эшләгән кадрҙарҙың ҡартайыуы. Был айырыуса ауылдағы уҡыу йорттарында күренә. Эш хаҡының түбән булыуы ла бәкәлгә һуға. Был йәш белгестәрҙең системала нығынып китеүенә ирек бирмәй. Ҡайһы бер колледждар кадрҙарҙы үҙҙәре әҙерләргә тырыша - улар иң яҡшы уҡыусыларҙы уҡытыусы булырға ҡыҙыҡһындыра.

Проблеманы хәл итеүҙә эш биреүселәр ҡатнашырға әҙер. "ОДК-УМПО" ПАО-һы идарасы директор урынбаҫары - персонал буйынса директор Николай Лютов белдереүенсә, предприятие маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡырға ингән колледж студенттарына стипендия түләргә, сифатлы эш күрһәткән уҡытыусыларға предприятиеның махсус түләүе аша эш хаҡтарын икеләтә арттырырға вәғәҙәләй. УМПО-ға эшкә урынлашҡан хеҙмәткәрҙәрҙең 75 проценты урта һөнәри белем алған. Уларға заманса ҡатмарлы ҡорамал менән эшләргә тура киләсәк, шуға күрә лә предприятие кадрҙарҙы әҙерләүгә юғары талаптар ҡуя.

# ҮҘМӘШҒҮЛЛЕК АРТА БАРА



**Башҡортостан Республикаһында ошо йылдың 17 октябренә үҙмәшғүллек менән шөғөлләнеүсе 64,7 млн һалым түләүсе һөнәри килеменән һалым түләй. Былтырғыға ҡарағанда бындай кешеләр өс тапҡырға артты (2020 йылдың 9 айында улар бөтәһе 22 мең ине).**

Үҙмәшғүлдәр тип шартлы рәүештә үҙҙәренең һөнәри килеменән һалым түләүселәргә әйтәләр. Был физик шәхестәр килеменән - 4 процент, юридик шәхестәр һәм шәхси эшҡыуарҙар килеменән 6 процент ташламаны ҡулланған махсус һалым тәртибе. "2021 йылдың 9 айында Башҡортостан Республикаһының тупланма бюджетына 108,9 млн һум, планда ҡаралғандан 3,8 процентҡа күберәк, һалым аҡсаһы килде",- ти БР финанс министры Лира Игдисамова. Һөнәри килемдәренән һалым түләүселәрҙең дөйөм килеме 8,3 млн һум тәшкил итте, уларға бөтәһе 14,5 миллиондан ашыу чек бирелгән, бер чекта - уртаса 570 һум. Һөнәри килеменән һалымды хеҙмәт килешеүе нигеҙендә эшсе көс ялламаған, үҙ алдына эшләүсе йәки үҙе етештергән тауарын һатыусы түләй. Уның, мәҫәлән, тырнаҡ биҙәү оҫтаһы, водитель, репетитор, няня, сантехник, тәржемәсе, дизайнер, тегенсе, юрист йә күмәк саралар ойоштороусы булып эшләүе ихтимал. Рәсми рәүештә үҙмәшғүл булып эшләү һәм һөнәри килеменән һалым түләү өсөн "Минең һалым" ҡушымтаһында йәки Дәүләт хеҙмәттәре шәхси кабинетында теркәлергә кәрәк.

Белешмә: 2018 йылдың 27 ноябрендәге 422-ФЗ һанлы "Һөнәри килемдән һалым" махсус һалым режимы булдырыу буйынса тәжрибә тураһында" Федераль законға ярашлы, 2020 йылдың 1 гинуарынан Башҡортостан Республикаһы үҙ территорияһында килемдән һалым индереү тәжрибәһенә ҡушылды. Рәсәйҙә үҙмәшғүлдәр һаны 3 миллиондан артып китте. Әлеге ташламалы һалым индерелеү осоронда улар 618 млрд һум аҡса эшләне. Был тәжрибә 2019 йыл башланғайны, әле көн һайын үҙмәшғүлдәр сифатында 5800-ләп кеше теркәлә. Бөгөн ташламалы һалым режимы бөтә ил буйынса ғәмәлдә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров "Зубово Лайф" торлаҡ комплексы майҙансығында Төҙөүселәр ассоциацияһының кусмә ултырышында ҡатнашты. Кәңәшмә барышында биләмәләрҙе комплекслы үҫтереү механизмдары, аҙ ҡатлы торлаҡ төҙөлөшө өсөн кредит ресурстарын файҙаланыу, төҙөүсенең инженерлыҡ селтәрҙәренә тоташтырыуға сығымдарҙы оптималләштереү тураһында фекер алыштылар. "Аҙ ҡатлы төҙөлөш перспективалы, етәкселек был йүнәлештә эшләгән төҙөүселәргә ярҙам итергә, өҫтәмә ярҙам саралары менән стимуллаштырырға әҙер", - тип белдерҙе Андрей Назаров. Беҙҙең республикала аҙ ҡатлы төҙөлөш күләме 7 процент тәшкил итә.

✓Өфөлә ололар өсөн коронавирустан вакциналау пункты асылды. Прививка пунктына 65 йәштән өлкәндәр мөрәжәғәт итә ала. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Беҙҙең хәстәрлек" проекты сиктәрендә булдырылған был пункт Коммунистик урамы 39-сы йорт адресы буйынса "Өсөнсө быуын халыҡ университеты" бинаһында урынлашҡан. Сәйәси фирҡәнең төбәк бүлексәһе башҡарма комитеты етәксеһе Рөстәм Әхмәҙинуров әйтеүенсә, вакциналау пункты Өләсәйҙәр һәм олатайҙар көнөндә ололар өсөн ҙур бүләк булды.

✓Һуңғы ваҡытта коронавирусҡа ҡаршы вакцинация тураһында ялған сертификаттар һатыу осраҡтары йышайҙы. COVID-19-ға ҡаршы прививка яһатыу тураһында сертификат рәсми документ булып тора, ялған сертификат өсөн Рәсәй Енәйәт кодексының 327-се статьяһы буйынса енәйәт яуаплылығы ҡарала. Ғәйепләнә ике йылға иркенән мәхрүм итеүҙәре йә иһә ике йылға мәжбүри эшкә йәлеп итеүҙәре мөмкин. Ялған сертификатты ҡулланған өсөн дә енәйәт яуаплылығына тарттырыуҙары ихтимал. Уны һатып алып, ойошмаға күрһәткән кешегә 80 мең һумға тиклем штраф һалыу, йәки 480 сәғәткә тиклем мәжбүри эштәр, йә иһә ике йылға тиклем холоҡ төҙәтеү эштәре, йәки бер йылға иректән мәхрүм итеү ҡарала.

✓Өфөнөң бер нисә автобус маршрутында билет хаҡтары үҙгәрҙе. Үҙгәрештәр 209-сы, 228-се, 235-се, 243-сө, 249-сы, 266-сы, 55с маршруттарына ҡағыла. 209, 229, 235, 243, 55с маршруттарында билет хаҡы - 35 һум, 221-се һәм 266-сы маршруттарҙа - 30 һум, 249-сы һәм 228-се маршруттарҙа - 30 һум, "Алға" картаһы буйынса 25 һум буласаҡ.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Башҡорт булып яҙылып, һеҙ туған телдең, мәҙәниәттең һәм йолаларҙың үсешенә үҙ өлөшөгөҙҙө индерәһегеҙ. Башҡорт теле - ул әсә теле, уны ниндәй кимәлдә белһәгеҙ ҙә туған телем тип билдәләргә кәрәк.*



*КӨНАУАЗ*

# БЕРҘӘМЛЕКТӘ ҠУШ БУЛЫУ -

## һәр кем бурысы

**Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы 14 ноябргә тиклем дауам итә. Был сара буйынса бер нисә һорауға РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира АЙЫТҠОЛОВА яуап бирә.**



**➔ Эльвира Ринат ҡыҙы, тағы бер тапҡыр халыҡ иҫәбен алыуҙың төп маҡсатын атап үтәйек әле…**

- Халыҡ иҫәбен алыуҙы "илдең фотоһүрәте" тип атарға мөмкин. Был сарала ҡатнашыусыларҙың яуаптары нигеҙендә илебеҙҙә кемдәр йәшәгәне, уларҙың нисбәте, йәшәү кимәле күҙ алдына баҫа. Иҫәп алыу анкетаһындағы бөтә һорауҙар ябай һәм аңлайышлы. Ошо социаль-иҡтисади параметрҙар нигеҙендә һуңынан дәүләт кимәлендә ҡарарҙар ҡабул ителәсәк. Беҙҙең республикала халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре ауылдарҙы һәм моноҡалаларҙы үҫтереү, мәшғүллек мәсьәләләрен хәл итеү өсөн дә мөһим. Был сараны алдағы ун йыллыҡты планлаштырыу тип атарға мөмкин булыр ине. Шуға күрә лә халыҡ иҫәбен алыуҙа мотлаҡ ҡатнашырға һәм һорауҙарға теүәл яуап бирергә кәрәк.

**➔ Тимәк, Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре илдең социаль-иҡтисади сәйәсәтен формалаштыра?**

- Әлбиттә. Тап йәниҫәп һөҙөмтәләре буйынса халыҡты социаль яҡлау программалары ҡабул ителә, илдең стратегик үҫеш планы төҙөлә. Бер генә миҫал: тап 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәһендә, демографик көрсөк проблемаһын хәл итеү маҡсатында беҙҙең илдә "Әсәлек капиталы" программаһы ҡабул ителде. Башҡортостанда ЭКО процедураһына субсидиялар, ике йәки өс игеҙ бала тыуғанда түләүҙәр, һалым льготалары кеүек республика һәм муниципаль программалар эшләп килә. Халыҡ иҫәбен алыу шулай уҡ пенсияларҙы, балалар пособиеларын иҫәпләү, күп балалы ғаиләләрҙе яҡлау саралары өсөн дә кәрәк. Был юлы ла эшләп килгән программаларға көн талабына ярашлы төҙәтмәләр индереләсәк, яңылары ҡабул ителәсәк. Илдең демографик портреты бизнес өсөн дә бик мөһим.

**➔ Ә һорауҙарҙың йөкмәткеһе нимәһе менән айырыла?**

- Һорауҙар - ҡәҙимге , улар бер кампанияла ла артыҡ айырылмай. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе булараҡ, милләткә ҡағылышлы һорауҙарға айырыуса иғтибар итергә теләйем. Халыҡ иҫәбен алыу биттәрендә бындай һорауҙар икәү, улар үткән кампанияла ла булғайны. Тәүгеһе: "Һеҙ ниндәй милләттән? " Әлбиттә, күптәрҙең был һорауға яуабы әҙер. Мәҫәлән, минең ғаиләмдә - барыһы ла башҡорттар һәм улар башҡорт тип яҙыла. Милләткә ҡағылышлы икенсе һорау иһә былай яңғырай: "Һеҙ ниндәй телде туған тел тип иҫәпләйһегеҙ?" Миҫал өсөн, 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа башҡорт тип яҙылған кешеләрҙең 75 проценты ғына башҡорт телен туған тел тип билдәләгән. Был нимә менән бәйле һуң? Ҡайһы берәүҙәр туған телде көндәлек аралашыу сараһы тип аңлай һәм телде насырараҡ белгән йәки бөтөнләй белмәгән башҡорттар туған тел тип башҡа телдәрҙе күрһәтә. Ә бит уйлап ҡараһаң, был төшөнсәнең тамырында "туған" һүҙе ята. Һинең яҡындарыңдың, ата-бабаларыңдың теле ниндәй булған? Ниндәй һөйләш һине тамырҙарың менән бәйләп тора? Был - һинең атай-әсәйеңдең, олатайҙарыңдың теле, тимәк, был - туған телең. Был тема һәр кем өсөн мөһим, сөнки беҙгә илдә нисә милләт йәшәгәнен, уларҙың һанын белеү мөһим. Милли мәктәптәрҙең, әсбаптарҙың нисбәте, туған телдәрҙе уҡытасаҡ педагогтарҙың һаны - былар барыһы ла халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренә бәйле, шуға ла һорауҙарға мөмкин тиклем теүәл яуап бирергә кәрәк. Бер үк ваҡытта ошо мәғлүмәттәр - халыҡтың социаль-демографик портреты ла. Теге йәки был милләт вәкилдәренең һаны тураһында мәғлүмәт уның көмәү йәки үҫеш динамикаһын белеү, яҡлау сараларын күреү өсөн дә кәрәк. Шуға күрә лә мин барығыҙҙы ла халыҡ иҫәбен алыуҙа әүҙем ҡатнашырға саҡырам, һуңынан шундай мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырҙыҡ, үҙ һүҙебеҙҙе әйтә алманыҡ, тип үкенерлек булмаһын.

**➔ Халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре артабан ҡайҙа китә һәм улар кемгә, нимә өсөн кәрәк?**

- Иҫәп алыу мәғлүмәттәре төрлө сығанаҡтарҙан Статистика буйынса дәүләт комитетында йыйыла. Ҡатнашыусыларҙың исем-шәрифтәре күрһәтелмәй. Улар ил, төбәк кимәлендәге ҡарарҙар өсөн нигеҙ булып торасаҡ. Был мәғлүмәттәр тәү сиратта үҙебеҙ өсөн кәрәк.

**➔ "Ни өсөн башҡорт булып яҙылырға?" тигән һорауға һеҙҙең яуап?**

- Милли состав һәм телдәр тураһындағы мәғлүмәттәр илдең этномәҙәни һәм телдәр төрлөлөгөн һаҡлау өсөн нигеҙ буласаҡ. Мәғариф, милли мәҙәниәт, кино, матбуғаттың үҫеше, байрамдарҙы ойоштороу кеүек ғәмәлдәр ҙә милләттең иҫәбенә ҡарап хәл ителә. Йәғни, башҡорт булып яҙылып, һеҙ туған телдең, мәҙәниәттең һәм йолаларҙың үсешенә үҙ өлөшөгөҙҙө индерәһегеҙ. Башҡорт теле - ул әсә теле, бишек теле, уны ниндәй кимәлдә белһәгеҙ ҙә, хатта һөйләшмәһәгеҙ ҙә, туған телем тип билдәләргә кәрәк.

Башҡорттар Рәсәй халыҡтары араһында лайыҡлы урынды алып тора. Бынан алдағы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса башҡорттар иҫәбе буйынса Рәсәй халыҡтары араһында дүртенсе урынды биләй. Кемдәндер һүлпәнлеге йәки дәртһеҙлеге арҡаһында иҫәп күрһәткестәре дөрөҫ булмауы ихтимал. Шуға күрә барығыҙҙы ла Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа әүҙем ҡатнашырға саҡырам. Кампания тамамланыуға бер аҙна ғына ҡалды. Әүҙем, булайыҡ, берҙәм булайыҡ!

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА...

**Өфөнөң балалар баҡсаһында ата-әсә түләүе арта. Хәҙер балалар баҡсаһындағы бер көн өсөн 151 һум түләргә кәрәк.**

2021 йылдың 1 ноябренән Өфөнөң балалар баҡсаларында ата-әсә түләүе күләме 25 һумға арттырыла. Хәҙер ул 151 һум була. Балалар баҡсаһына 21 көн йөрөгән өсөн түләү 3171 һумға барып баҫа. Был турала Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Ата-әсәләргә иһә ата-әсә түләүенә компенсация бирелә. Бер балаға 20 процент - 349,83 һум, икенсеһенә - 50 процент - 874,58 һум, өсөнсөһөнә һәм артабанғыларына 70 процент - 1224, 41 һум була. Инвалид балаларҙың ата-әсәләре, етем балаларҙың законлы вәкилдәре ата-әсә түләүенән азат ителә. Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә, инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә 50 процент күләмендә льгота бирелә. Менюҙа хаҡ айырмаһына үҙгәрештәр индерелергә тейеш. Өҫтәмә рәүештә компот, кеүәҫ, һыттар, емеш-еләк индерелә - аҙнаһына ике тапҡырҙан да кәм түгел. "Ата-әсә түләүен арттырыу төп тукланыу продукттарына хаҡтарҙың 2017 йыл менән сағыштырғанда уртаса 40,5 процентҡа күтәрелеүенә бәйле. Балаларҙы ҡараған өсөн хаҡ күләме 2017 йылдан бирле арттырылманы", - тип хәбәр иттеләр Өфө мэрияһынан.

# БҮЛӘКЛЕ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

**1 ноябрҙән 31 декабргә тиклем Өфөнөң сауҙа үҙәктәре прививка эшләткән граждандарҙы өҫтәмә дәртләндереү өсөн "Беҙ бергә" тигән акция ойоштора, тип хәбәр итте Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте.**

"Бындай программа республика халҡына вакцина яһатыуға өҫтәмә мотивация булдырыу өсөн уҙғарыла. Сауҙа тармағының ситтә ҡалмайынса, ошондай башлангыс менән сығыуы бик ҡыуаныслы", - тип билдәләне республиканың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев. Проектты ойоштороусылар: "МЕГА Өфө", "Планета", "Кунаҡһарай", "Галерея ART", "СемьЯ", "Үҙәк", "Ирәмәл", "Простор", "Өфө" универмагы. Акция www.Вместе-Уфа.рф порталы аша ғәмәлгә ашырыла, унда бөтә ташламаларҙың тәҡдимдәре урынлаштырыла. Ташламалар алыу һәм бүләк уйнатыуҙа ҡатнашыу өсөн вакцинация үткән кешегә порталда теркәлергә, анкета тултырырға һәм прививка тураһында сертификаттан QR-кодтың үҙенсәлекле сканын индерергә кәрәк. Аҙна һайын теркәлгән ҡатнашыусылар араһында төрлө ҡиммәтле призлар (көнкүреш техникаһы, гаджеттар, 100 мең һумлыҡ бүләк карталары, биш Apple (iPhone 13) смартфоны, көн дә аквапарк, кинотеатр, ресторандарға, сауҙа үҙәктәренә саҡырыу ҡағыҙҙары, шулай уҡ ҡуртымға биреүселәрҙән ташламалар һәм сертификаттар уйнатыла.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Баш өйәнәге

Баш өйәнәге, йәки мигрень менән яфаланғанда халыҡ дауаһының түбәндәге кәңәштәренә ҡолаҡ һалығыҙ:

❖ Ялан туҡранбашы (клевер полевой) төнәтмәһен әҙерләп эсергә мөмкин. Әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ сәскәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Күптәр шифалы ромашкаһың 15-20 грамм сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, сәй кеүек бешереп әҙерләнгән төнәтмә ярҙамында дауалана. Бер стакан төнәтмәне өскә бүлеп, көн дауамында эсергә.

❖ Яңы әрселгән 2 сантиметр диаметрлы лимон ҡабығының эске аҡ ҡатын һыҙырып ташларға. Шунан ҡабыҡты эске яғы менән сикәләргә баҫырға, лейкопластырь ярҙамында йәбештереп ҡуйырға. Бер аҙҙан тире ҡыҙара һәм ҡысыта башлай, әммә баш ауыртыуы баҫыла.

❖ Йыланбашлы үләндең (змееголовник молдавский) 1 ҡалаҡ үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмә һыуынғас, баш өйәнәге тотҡанда көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаны ашарҙан 15 минут алда ҡулланырға.

❖ Мигрень енел формала үтһә, киләһе халыҡ дауаһы ярҙам итә. Боланут, мәтрүшкә һәм бөтнөктө бер тигеҙ алып ҡушырға һәм ваҡларға. Килеп сыҡҡан йыйылманың 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөп алғас, бер юлы эсеп бөтөргә.

## Сәскә дауа

❖ Сәстәр ҡалын һәм яҡшы торошта булһын өсөн, килешһә, дегетле һабын менән йыуыу файҙалы. Аҙағынан матур һоро төҫө һаҡланһын тип, һуған ҡабығы төнәтелгән һыуға бер аҙ ҡына (хна) ҡушып иҙеп, ошо әҫе ҡатышманы сәстәргә һыларға. Ике сәғәт тотҡандан һуң сайҡатырға. Әммә шуны хәтерҙә тотоғоҙ: ҡынанан һуң башҡа төрлө сәс буяуҙарын һаҡ ҡулланырға, улар икенсе төҫ бирергә мөмкин. Баш тиреһен һуған ҡабығы төнәтмәһе менән даими йыуыу сәс ҡойолоуҙан да һаҡлай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

В.С. Сыромятников Художество музейындағы үҙенсәлекле ағас келәле ҡумтаны тасуирлаған: "Был эштең авторында рәссам һәм уйлап табыусы берләшкән... Ҡапҡастың һырт яғында ағастан, елем һәм металл сөйҙәр ҡулланмай эшләнгән үҙенсәлекле бик механизмы урынлашҡан". Ҡумтаның биҙәге бер-береһенә индереп төшөрөлгән тура дүртмөйөштәрҙән ғибәрәт булған.



*Ҡумта. БХМ фондынан*



*Ҡумта. Мәләүез районы, 1978 йыл. Т.К. Сурина фотоһы*

Ағас эшкәртеү промыслалары, башҡа кустарь сәнәғәт тармаҡтары кеүек үк, XX быуаттың икенсе ун йыллығы башында туҡталып ҡала һәм артабан аяҡҡа баҫып китә алмай. Социаль-иҡтисади тетрәнеүҙәр бер-бер артлы килә: 1911 йылғы йот, беренсе донъя һуғышы, Граждандар һуғышы, үҙгәртеп ҡоролоштар. Ауыл хужалығы производствоһын йәмәғәт милкенә әйләндереү индивидуаль ижадсылыҡҡа урын ҡалдырмай. 20-се йылдарҙа ағас әйберҙәр етештереү буйынса кәсепселек ширҡәттәре булған. Көрәгә, иләк, көрәк һәм башҡа киң ҡулланылыш әйберҙәре эшләнгән, әммә сәнғәт күҙлегенән ҡыҙыҡлы булмағандар. Башҡорт ауылдарында байтаҡ ваҡыт һауыт-һаба, эйәр, кәмә, йорт йыһазы оҫталары йәшәгән. Әммә улар күпселек үҙҙәре өсөн генә эшләгән. Яйлап ағас һырлау традициялары юғала бара.

Ҡыҙғанысҡа күрә, XX быуаттың 60-сы йылдарында Бөрө ҡалаһында ағас сувенирҙар һәм уйынсыҡтар фабрикаһы асып, Өфөлә "Ағиҙел" производство берекмәһе ярҙамында художестволы ағас эшкәртеүҙе тергеҙергә маташыу уңышһыҙлыҡҡа осраны. Профессиональ рәссамдар эшләгән әйберҙәр стиле буйынса ысын халыҡ традицияларынан алыҫ тора.

Шул уҡ ваҡытта ағас һырлау менән мауыҡҡан кешеләр килеп сыҡҡылай. Улар уйын ҡоралдары - ҡурай һәм ҡумыҙ һауыттары, биҙәкле мандолина һәм гармундар, шахмат фигуралары, балалар уйынсыҡтары, бәүелсәк аттар, ысынға оҡшаш өйрәктәр, ултыртмалы ҡорҙар кеүек үҙенсәлекле әйберҙәр эшләй. Он һауыттары, ағас һоҫҡо, май яҙғыс, көбөләрҙе уйып яһай. Балаларға сәңгелдәк, башҡа мебель эшләйҙәр. Әммә кәрәкле тәжрибә һәм халыҡ сәнғәтен яҡшы белмәүҙәре ағасты художестволы эшкәртеүгә бәйле кәсептәрҙе үҫтереүгә ҡамасаулай.

*Һырлы ҡош (урыҫ кәсептәренә оҡшатып эшләнгән). Оҫтаһы Ш. Йәнсурин, Күгәрсен районы Үрге Санъяп ауылы, 1970 йыл. Автор фотоһы*



**Светлана ШИТОВА.**

**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

КЛАСС СӘҒӘТЕ

# ТОРМОШ - УЛ ТЕАТР

**Бынан күп йылдар элек, колхоз-совхоздар әле тере саҡта, урам буйлап үтеп барһам, текмә буйындағы эскәмйәлә бер ағай ултыра. Уны тышта шулай буш ултырғанын тәүгә күреүем. Көнө-төнө колхоз эшенән бушамай, пенсияға сыҡҡан ваҡыты ине. Һаулыҡ һораштым, хәл-әхүәлен белештем.**

**- Бына, улым, әбей менән талашып сығып ултырҙым әле, - ти был.**

**- Нимә булды? - тим.**

**- Ышанаһыңмы-юҡмы, йыуынғыстың бысраҡ һыуын сығарып түк, тейсе...**



Әйтәм бит, был һөйләшеүгә арыуыҡ ваҡыт үткән. Ул саҡта был диалогҡа артыҡ иғтибар итмәгәнмен, әле бына көлкө лә килә, һорауҙар ҙа тыуа. Тимәк, шул ваҡытта уға алтмышы тулып үткән булған. Егерме йәшендә өйләнгән хәлдә лә, баяғы мыжыҡ әбейе менән кәмендә ҡырҡ йылдан ашыу йәшәйҙәр, тип аңларға кәрәк. Ярай, ниндәй яҙығы бар, ире ялға сыҡҡас, элек үҙе башҡарған эште бабайына ҡушҡандыр инде. Яҙығы юҡ та ул, тик бына шул алты тиҫтәне үткән ир кешенең бәләкәй бала-саға кеүек үсегеп ултырыуы аптырата. Ҡайҙан килә ул оло кешегә лә балаларса ҡыланыу? Улай тиһәң, иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, бәләкәй генә бала ла ваҡыты-ваҡыты менән оло кешене лә аптыратып, ололарса һөйләшә башлай бит. Эйе, бер ҡатлы түгел беҙ! Фрейд билдәләүенсә, шәхес концепцияһы либидо, эго, супер-эгонан торған һымаҡ, һәр кешенең өс төрлө холоҡ торошо бар.

Баяғы бабай миҫалындағы балалыҡ холҡо кешегә ологайғас та эйәреп йөрөй. Ололарса һөйләшкән балаға ла аптырарға ярамай. Һәр кемдә атай-әсәйҙәргә хас булған һыҙаттарҙы ла һиҙемләргә була. Кешеләр үҙ-ара аралашҡан ваҡытта үҙенә кәрәкле торошто (позицияны) һайлай. Махсус рәүештә, туҡта, балаларса йә ололарса һөйләшәйем, тип уйламай ул, был торош үҙенәнүҙе, аңһыҙ рәүештә килеп сыға. Нисек кенә ҡыҙыҡ тойолмаһын, һүҙҙәр аралашҡан ваҡытта беренсе урында тормай. Әлбиттә, һүҙҙәрһеҙ булмай. Дөрөҫ аңлағыҙ, шул һүҙҙәрҙе нисек итеп, ниндәй торошта әйтәһең, шул мөһим. Бер үк мәғлүмәтте, бер үк фекерҙе йә балаларса, йә ололарса, йә булмаһа, ата-әсәгә хас интонация менән әйткәнебеҙҙе үҙебеҙ ҙә һиҙмәй ҡалабыҙ. Диалог ваҡытында өс торошта ғы ике кеше һөйләшкәнен күҙ алдына килтерһәк, әңгәмәлә алтау ҡатнашҡан һымаҡ була. Мәҫәлән, мәктәптә бер уҡыусы икенсеһен: "Әйҙә, алтынсы дәрестән ҡасайыҡ", - тип ҡоторта икән, икенсеһе: "Әйҙә!", - тип яуап бирһә, улар икеһе лә бала торошонда аралаша. Дәрестән ҡасасаҡ улар. Ә инде икенсеһе: "Юҡ, ярамай, дәрестән ҡасыу тәртип боҙоуға инә", - һымағыраҡ яуап бирһә, диалогта ҡатнашыусыларҙың аралашыу торошо тап килмәй, сөнки икенсе бала ололарса яуап бирҙе бит. Дәрестән ҡасыуҙары икеле. Ә инде икенсе бала: "Йәлләйем мин һине, бәлки, асыҡҡанһыңдыр, мә, ошоно аша", - тип яуап бирһә, ул ата-әсәләрсә ҡурсалап, йәлләп яуап бирҙе булып сыға. Был осраҡта ла был икәүҙең аралашыу торошо тап килмәй.

Һәр тороштоң үҙенә генә хас һыҙаттары бар. Мәҫәлән, балалыҡ торошона нисек булһа ла теләктәрҙе тормошҡа ашырыу хас. Һә тигәнсә тоҡана, һә тигәнсә һүнеп тә ҡуя. Ата-әсәләрсә торошҡа иң тәүҙә ҡурсалау, йәлләү мөһим, өйрәтеү, тыйыу - уларҙың булмышы. Ололарса мөғәмәлә килешеп эшләүҙе ярата. Маҡсат ҡуйып, һөҙөмтәгә ирешеү беренсе урында тора. Шуға күрә ике кеше үҙ-ара һөйләшкәндә диалогтың тышҡы һәм эске яғын һиҙемләргә кәрәк. "Тыныс ҡына һөйләшеп тора инек, ҡапыл иланы ла ебәрҙе", тибеҙ аптырап ҡай саҡта. Тыштан тыныс булғандыр ҙа ул, беҙгә аңлайышһыҙ эстәге торошо иларға мәжбүр иткән.

Аралашҡан ваҡытта әңгәмәселәр ҡай саҡ уйҙарын бер-береһенә туранан-тура әйтмәй, эскә йәшерә. Шулай булһа ла, улар бер-береһен яҡшы аңлай, тик был турала ҡыҫҡырып әйтмәйҙәр. Мәҫәлән, егет ҡыҙҙы оҙатып килде, ти. Ҡыҙ уны сәй эсергә саҡырҙы. Ни өсөн икәнен улар шундуҡ аңлай. Ҡыҙ: "Һин миңә оҡшайһың", - тип урам яңғыратып ҡысҡырып тора алмай ҙа баһа! Егет ризалашты. "Һин дә миңә оҡшайһың", булды инде, йәнәһе. Психологияла ул йәшерен транзакция тип атала.

Был өс торош беҙҙе ғүмеребеҙ буйына оҙатып йөрөй. Йөрөһөн. Бер ҡатлы булһаҡ, йәшәүҙең ҡыҙығы ла ҡалмаҫ ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өс ҡатлы булғас, тороштар араһында тигеҙлек булмағас, уйнайбыҙ инде оҫталығыбыҙ еткәнсе. "Тормош - ул театр, ә кешеләр унда актерҙар", тип бушҡа әйтмәгәндер Уильям Шекспир. Әйткәндәй, был рубрикала яҙғандарымды мәктәптә эшләгән осорҙа уҡыусыларға һөйләй торғайным. Аңлайҙар ине. Һеҙҙән дә шуны өмөт итәм.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҮҘ "ЙОРТОМА" ҠАЙТТЫМ

**(Башы 1-се биттә).**

Әйтеүемсә, интернет ялҡытты, хәҙер смартфонды мин һауа торошон ҡарап алыу һәм көн яңылыҡтарына күҙ йүгертеп сығыу өсөн генә ҡабыҙам. Элеккеләй, төн йоҡоларымды ҡалдырып, бәйләнештә лә ултырмайым, сөнки күпселек көнкүреш һәм ғаилә проблемаларын уҡый барып, гел ҡатын-ҡыҙарҙан торған төркөмдәштәрҙең нимә тип әйтерҙәрен алдан белеп торам. Комменттарҙа йыш ҡына бәхәс, талаш ҡуба, ғәйбәт китә, хатта һүгенеүҙән дә тартынып тормай ҡай берәүҙәр. Фейк хәбәрҙәр ҙә ялҡытты. Смартфон һатып алырҙан элек йәнгә тыныс ине, иҫке булһа ла, төймәле бәләкәй генә телефонымды фәҡәт шылтыратыу өсөн тотондом һәм күп йылдар инде "Киске Өфө" гәзите менән "Ағиҙел" журналын алдырып, яратып уҡый торғайным. Иҫке ғәҙәт үҙенекен итте, түҙмәнем: почтаға барып, Путин аҡсаһынан арттырып, сентябрь урталарында уҡ ошо йылдың ҡалған өс айына һәм киләһе йылдың тәүге ярты йыллығына " Киске Өфө" гәзите менән "Ағиҙел" журналына яҙылып ҡайттым.

Үҙ телебеҙҙәге яҙма баҫмаларға етмәй инде, шуны аңланым. "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәләләр тәрбиәүи йәһәттән фәһемле лә, ғибрәтле лә. Тема төрлөлөгө, файҙалы мәғлүмәттәре заман проблемалары менән хәбәрҙар булырға ярҙам итә, рухиәтебеҙҙе байыта, милләтем менән бәйләнеште нығыта, юғиһә интернет селтәренең рухыма ят виртуаль донъяһы тотҡононда аҙашып йөрөгәндәй хис итә инем үҙемдә. Әсә телемдәге матбуғатҡа яҙылып, әйтерһең дә, үҙ йортома ҡайтып ингәндәй булдым.

**Мәғәфүрә ИШКИЛДИНА, хеҙмәт ветераны.**



"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

10

Туған телем!

6-12 ноябрь (ҡырпағай) 2021 йыл

№45 (983)

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# КҮП ТЕЛДӘР ӨЙРӘНЕҮ...



**Рәсәйҙә милли аҙсылыҡты тәшкил иткән халыҡтар күптән инде ике теллелеккә эйә, һәм күп милләтле Рәсәйҙә күп теллелекте үҫтереү өсөн донъяның башҡа илдәрендә күҙ алдына ла килтерә алмаҫлыҡ ыңғай шарттар бар. Уларҙы ҡулланмау, хатта махсус ҡаршылыҡ күрһәтеү иң элек берҙән-бер рус теле менән генә хушһынған ҡәүемдәр өсөн уғата зыянлы.**

Ғөмүмән, рус халҡының бер телле генә булып ҡалыуы ошо оло һәм бөйөк ҡәүемдең илаһи-ижади потенциалының тулыраҡ һәм киңерәк асылыуына аяуһыҙ тотҡарлыҡ итә. Бөйөк рус ғалимдары, яҙыусылары, сәнғәт эшмәкәрҙәренең бер нисә донъя телдәрен бала саҡтан уҡ өйрәнеүен онотоп барабыҙ түгелме һуң? XIX быуатҡа ҡараған рус әҙәбиәте әҫәрҙәренән рус дворяндары ғаиләләрендә балаларға француз йәки немец телдәрен өйрәтеү өсөн махсус гувернерҙар тотолоуын, ә лицей һәм гимназияларҙың уҡыу пландарынан рус теленән башҡа, грек, латин, немец йәиһә француз телдәренең мотлаҡ уҡытыла торған предметтар булыуын беләбеҙ.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ телдәрҙе бары аралашыу сараһы ғына, тип ҡарай башланыҡ, ә һәр халыҡ теле төбөндә ятҡан бөтмәҫ-төкәнмәҫ рухи байлыҡтарҙы барлау хаҡында уйлап та бирмәйбеҙ. XIX быуатта йәшәгән һәм ижад иткән күренекле рус мәғрифәтсеһе, педагогик һәм психологик әҫәрҙәре менән бар донъяға билдәле булған К. Д. Ушинскийҙың ошо хаҡта әйткәне образлы ла, фәһемле лә: "Халыҡ теле - уның рухи тормошоноң иң гүзәл, бер ҡасан да шиңмәй торған, мәңге яңынан сәскә атыусы гөлө". Әлбиттә, баҡсаны төрлө матур гөл-сәскәләр биҙәгән кеүек, Рәсәйҙең рухи донъяһын да йөҙәрләгән халыҡ телдәре байытып тора. Ошо телдәрҙе ҡоротоуға булышлыҡ итеү донъябыҙҙы йәмләп торған халыҡтар гөлләмәһенең рухи тамырҙарын ҡоротоу түгелме ни?

Психологтар белдереүенсә, кеше мейеһенең мөмкинлектәре икһеҙ-сикһеҙ, әммә беҙ уның бик аҙ ғына өлөшөн файҙаланабыҙ. Беҙҙең тәбиғи ҡыҙыҡһыныуыбыҙҙан яҙыуыбыҙ, донъя серҙәренә битараф булыуыбыҙ, башлыса, ғүмеребеҙ буйына матди байлыҡ артынан ҡыуыуыбыҙ, башҡа халыҡтарға өҫтәнерәк ҡарауыбыҙ, бөгөн төрлө милләттәргә айырылышҡан булыуыбыҙ арҡаһында боронғо ҡанҡәрҙәшлегебеҙҙе таныրға теләмәүебеҙ, һуңғы сиктә ялҡаулығыбыҙ рухи йәшәйештең яңынан-яңы асыш-ҡыуаныстарынан мәхрүм итә. Был асыштарға тиҙерәк юлығайым, тиһәң, телдәрҙе күберәк өйрәнеү һәм белеү фарыз. XVIII быуатта үҙенең азат һәм ҡыйыу фекерләүе менән бар донъяға билдәле булған француз философ-мәғрифәтсеһе, яҙыусы һәм тарихсы Вольтер күп теллелекте донъяны танып белеү асҡысына тиңләй: "Күп телдәрҙе белеү - бер үк йоҙаҡ өсөн күп асҡыстарың булыу". Бөйөк немец шағиры Иоганн Вольфганг Гете ла башҡа телдәрҙе белеүҙе хуп күргән: "Кем сит телдәрҙе белмәй, шул кеше үҙ теле хаҡында ла бер ни ҙә белмәй".

Балаларҙы мәктәпкәсә йәштән шашка һәм шахмат уйнарға өйрәтһәң, уларҙың фекерләү ҡеүәһе тиҙерәк үҫешеүе хаҡында белмәгән кеше юҡтыр. Был осраҡта бала мейеһендә ошо уйын логикаһы менән бәйле нейрон бәйләнештәр системаһы барлыҡҡа килә, уны өр-яңы код-символдар эшмәкәрлеге тәьмин итә. Һәр яңы телде өйрәнеү ғәмәлдә ошондай уҡ тел коды, тел символдары системаһын барлыҡҡа килтерә. Яңы телде аңлап һәм теләп өйрәнеүсе уҡыусының интеллектуаль кимәле лә бермә-бер юғарыраҡ буласаҡ. Кем ошо психологик хәҡиҡәтте аңларға теләмәй, шул кеше балаһының шәхес буларaҡ үҫеш юлындағы яңы мөмкинлектән үҙ теләге менән ваз кисә, тигән һүҙ был.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

УЙЛЫҒА - УЙ

**Уҡыу йылы башында башланғыс кластан уҡ рус телендә уҡытыуға күсергә тип ғариза яҙған бер төркөм атай-әсәйҙәр менән осрашырға тура килде. Боронғо сәсәндәр, илем-көнөм, телем-яҙмышым тип яуға сапҡан халыҡ батырҙары биргән тарихи ауыл был. Шуның өсөн дә мәктәп ишеген асып, атай-әсәйҙәрҙең үҙҙәре менән осрашмайынса, улар фекерен белмәйенсә, был хәбәргә ышанманым.**

# КҮРЕНМӘГӘН ЯУ,

## йәки кеше аңында барған көрәш

Халҡының киләсәге, балаларының яҙмышы, милләт яҙмышы ергә, телгә, йолаларға бәйле икәнлеген яҡшы аңлаған, ошо ҡиммәттәргә хәүеф янай башлағас, үҙҙәрен аямай яу башлаған батырҙарҙың ҡан хәтере һаҡланманымы икән ни был ауылда? Әллә был батырҙарҙы язалаған саҡта, рухтарын һындырғандар ҙа, ҡурҡытылған ауыл халҡы быуаттар буйы дер ҡалтырап йәшәйме? Улай тиһәң, ауыл бөгөнгө көнгә тиклем тарҡалмай йәшәгәс, тимәк, һаҡланған ул рух! Тик ни эшләп, балаларыбыҙ имтихан тапшыра алмаясаҡ, тигән шөбһә менән башланғыс кластан уҡ рус телендә уҡытыуҙы өҫтөн күреп, ғариза яҙғандар? Әммә халыҡты фәҡәт туған тел һәм традиция нигеҙендә генә йәшәтеп булғанлығын аңлап шаң ҡағыусы уҙаман бында япа-яңғыҙ булып сыҡты. Уның фекерҙәштәре, рухташтары килмәгәйнеме йыйылышҡа, билдәһеҙ. Күпселек, ғәҙәттәгесә, әсәйҙәр һәм дәреслектәрҙең (математика, биология) насар тәржемә ителеүенә зарланған уҡытыусылар "әжәл дарыуы"ндай күреп рус телендә уҡытыуҙы яҡлап, яуға ташланған яугирҙар кеүек һүҙҙәрен бирмәне, беренсе кластан уҡ математиканы рус телендә уҡытырға кәрәк, тигән ғаризаларын байраҡ күтәреп барған кеүек ялпылдата-ялпылдата, үҙ фекерҙәрен ҡабатланы.



- Беҙ бит тотош рус телендә уҡытыуға күсмәйәсәкбеҙ, өйҙә һөйләшеү, мәктәптә тәрбиә эштәре туған телдә алып барыласаҡ, - тине уҡытыусылар.

- Математика рус телендә була икән, тимәк, өйгә эште аңлатыу өсөн, бала менән рус теленә күсә башлаясаҡһығыҙ. Көндәлектәрҙә, дәфтәрҙәрҙә рус телендә яҙыласаҡ. Әсәй йәки атай кеше бала менән бер генә тапҡыр рус телендә һөйләштеме, былдай аралашыу ғәҙәткә әйләнеп китә, айырып алыу ҡыйын була, хатта мөмкин дә булмай. Унан һуң хәҙер ерҙәр, өйҙәр иркен һатыла башлай, бында уҡытыу рус телендә тип, башҡа милләт вәкилдәре күсеп килә башлаясаҡ. Тирә-яҡҡа күҙ һалығыҙ, бихисап бит ҡатнаш ауылдар хәҙер. Уйлағыҙ! - тип, аңлатып ҡараным. "Юҡ"тан башҡаны ишетмәнем.

Бынан һуң башланғыс кластарҙа башҡортса уҡытылған ҡала мәктәптәрендә лә, ауыл мәктәптәрендә лә булдым, һораштым, белештем.

- Башҡортса уҡытабыҙ. Ауырыраҡ тәржемә ителгән биремдәрҙе, мәсьәләләрҙе ябайлаштырып аңлатабыҙ. Бала башланғыс кластарҙа төшөнсәләрҙе мотлаҡ туған телендә алырға тейеш. Математиканы башҡортса уҡыһалар ҙа уҡыусыларыбыҙ техник вуздарҙа уҡыйҙарсы, Мәскәү, Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарында белем алалар, - тинеләр бер башҡорт ауылындағы мәктәп уҡытыусылары.

- Дәреслек мәсьәләһе хәл ителер ул. Ә бына баланың туған телдә аралашыуын бер тапҡыр ысҡындырһаҡ, милләтебеҙ бәкәленә һуғыуыбыҙ көн кеүек асыҡ. Беҙҙең уҡытыусылар ҙа, хатта балаларын был мәктәптә уҡытыусы атай-әсәйҙәр ҙә быны яҡшы аңлай. Уҡытыусылар дәрескә ике телдәге дәреслектәрҙе лә алып килә. Ҡала балаларының күбеһе рус телле, шуның өсөн башҡорт теленә күсеү аҡрынлап алып барыла. Атай-әсәйҙәр туған телдең рухи тәрбиәлә төп таяныс икәнлеген яҡшы аңлай. Рухи тәрбиә менән белем йәнәш барырға тейеш, шунһыҙ бала тулы ҡанлы гражданин булмаясаҡ, - тине Мөхәммәт Исҡужин исемендәге 13-сө ҡала башҡорт мәктәбе директоры Әнисә Түләгәнова.

Мин бер ниндәй һығымта яһарға ла йыйынмайым. Әммә бөгөн, бөтөн ерҙә, радио-телевидение, интернет, хатта ус аяһындай кәрәҙле телефон, уйынсыҡтар рус телендә "һөйләшеп" торған саҡта, ниндәй генә предмет терминдарын булһа ла рус теленә ауҙарыу өсөн бөтөн мөмкинлектәр булған заманда (компьютер янына ултырып бер төймәгә баҫыу етә), имтихан бирә алмай ҡалыу хәүефе бармы? Донъя халыҡтары инглиз теленә күсә, ҡытай телен ныҡлап өйрәнеү башланды, әллә бер юлы ошо телдәрҙә уҡытыуға күсәйек тә ҡуяйыҡмы?

Фекер алышайыҡ, туғандар!

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# "АЛСАЙЫП НИ"

Беҙҙең Хәйбулла яҡтарында һөйләштә **"алсайып"** тигән һүҙ ҡулланалар. Мәҫәлән, бер апайҙың биш ҡыҙы бар, бишенсеһен кейәүгә биргән сағында: "Әй, Аллам, ҡыҙҙы кейәүгә биргән һайын урамда алсайып ятаһың бит," - тигәне хәтерҙә. Алсайып ятаһың, йәғни ал байраҡ кеүек әллә ҡайҙан иғтибарҙы йәлеп итәһең. Ауылдағы кеше тикшерергә яратыусыларҙың булған-булмаған ҡылыҡ, ҡырын-мырын эштәр, ҡыҙҙарындың холоҡ-тәртиптәре тураһында тел сарлауына ҡарата әйтелгәндер инде. Йә булмаһа, "Кит, анау нәмә бөтә ауылға алсайып иҫереп йөрөй" тиҙәр, йәғни "Әллә ҡайҙан күҙгә ташланып тора" тигән мәғәнәлә лә әйтелә был һүҙ. Кеше күҙенән йәшеренкерәп тота торған әйбергә лә: "Нишләп был нәмәнде алсайтып ҡуйҙың?" - тиҙәр.

Әсәйем, инәйемдәр хужалыҡ сумкаһын **"ҡуржын"** тиҙәр ине. "Апай, миңә лә шундай матур, үҙеңдеке ише ҡуржын алырһың", тип һөйләшәләр ине.

Беҙҙең яҡта сабыйҙар аяғына баҫып тора башлаһа, **"айтас баҫа"**, "айтас тора" тиҙәр. "Хәҙер атларға самалай, айтас тора", - тип һөйөнәләр. Ә Мәләүез яғында "айтас" һүҙе икенсе мәғәнәгә эйә. Әйткән һүҙендә тормаған, аҡылы тотороҡһоҙ, килделе-киттеле кешене шулай атайҙар.

Тағы ла **"тәкәнтәй"** тигән һүҙ бар. Ул ҡатын-ҡыҙ холоҡло, ваҡсыл, күп һөйләүсе ир-атҡа ҡарата әйтелә. Килеп сыҡҡан тамыры ла билдәле: тәкә + кәнтәй.

Йылайыр районында **"бәтлек"** тигән һүҙҙе хужабикә апай йыш әйтә ине. Мәғәнәһе "үтә этлеклегә" тап килә. "Бейем торғаны бәтлек. Урап үт," - тиер ине ул апай. "Бә" (икеләтә тигәнде аңлата) һәм "этлек" һүҙҙәренән яһалған.

Ә бына был һүҙҙе ағайымдан ишеттем. Бер ваҡыт: "Ҡартатайым бик **пуфтар** кеше ине," - тип һөйләне. Һорашҡас, "пуфтар" һүҙе теүәл, аныҡ, бөхтә тигән мәғәнә йөрөтөүен белдем.

Уйлай китһәң, бик матур мәғәнәле һүҙҙәр икән былар. Ҡыҙғаныс, был һүҙҙәр хәҙер һөйләштә бик ҡулланылмай.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА**

✓ *Революцияға тиклемге лә, совет осорондағы ла, хәҙерге ҡануниәт тә милли белем биреүҙе лә, туған телдә өйрәнеүҙе лә тыймай. Шуға күрә, уҡытыусыларға һәм мәктәп директорҙарына атай-әсәйҙәр менән ныҡлы эш алып барырға кәрәк.*



КӨНАУАЗ



# БЫУЫНДАР БӘЙЛӘНЕШЕ...

## әсә теле аша

**Беҙҙә элек-электән башҡорт мәктәбен мәҙрәсәләргә генә бәйләгән ҡараш йәшәп килә. Әммә ғәмәлдә башҡорт милли донъяуи мәктәбе 19-сы быуаттың икенсе яртыһында уҡ була. Хатта Земство вәкилдәре 1867 йылда Ырымбур губернаһының Иманғол ауылында асылған беренсе башҡорт мәктәбен Рәсәйҙең көнсығышындағы иң боронғо рус-башҡорт мәктәбе тип теркәп ҡалдырған.**

Ни өсөн был фактҡа иғтибар йүнәлтәм, сөнки башҡорт мәктәбенең барлыҡҡа килеүе - ул кемдеңдер фантазияһы, уйҙырма модель түгел, ә ижтимағи-тарихи үҫеш һәҙөмтәһе. Сөнки мәғариф - ул оҙайлы процесс һәм ул белем, мәғлүмәт, мәғрифәт кенә түгел, ә шәхестең, уның рухи-әхлаҡи потенциалының формалашыуы. Барыбыҙ ҙа туған тел, милли мәҙәниәт аша быуындар бәйләнеше барлыҡҡа килгәнен беләү, сөнки тамырҙарыбыҙ рухиәтебеҙҙе һуғарып тора. Тарихыбыҙ - боронғолоҡ ҡына түгел, ә бөгөнгө баҙар мөнәсәбәттәренә, үҫешкә яраҡлаштырып файҙаланырға мөмкин булған ҙур ҡеүәт ул. Шулай ҙа әленән-әле, башҡорт телен уҡытыуҙы тыялар, тиғән һүҙҙәр ишетелә. Ғәмәлдә, РФ Конституцияһының 26-сы статьяһындағы 1-2-се пункттар һәр кемдең үҙенең милләтен билдәләү һәм күрһәтеү хоҡуғын, берәү ҙә икенсе милләт тип мәжбүр ителәлмау, һәр кемгә туған тел менән файҙаланыу, аралашыу, тәрбиә биреү, уҡытыу һәм ижад итеү телен ирекле һайлау хоҡуғын бирә. "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль Законды төп мәлдәре лә ошо положениенан сығып эшләнгән һәм ул белем биреү мөнәсәбәттәрен тыймай, киреһенсә, дәртләндерә генә.

Шулай уҡ уҡыусыларҙың туған телдә белем алыу ғына түгел, имтихан биреү хоҡуғы ла гарантияланған. "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль Закондың "Йомғаҡлау аттестацияһы" статьяһында уҡыусыларҙың туған телдән йомғаҡлау имтиханы тапшырыу хоҡуғы билдәләнә. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙа ла бер ниндәй тыйыуҙар юҡ. РФ Конституцияһы милли берәмектәргә үҙ дәүләт телдәрен иғлан итеүҙе гарантиялай, "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль Законында Рәсәй Федерацияһында дәүләт теле булған рус теле менән бер рәттән, субъекттар үҙҙәренең дәүләт телен уҡыта алыуы тураһында билдәләнә.

Бынан тыш, Федераль Законда белем биреү мөнәсәбәттәрендә ҡатнашыусы булып атай-әсәйҙәр тороуы билдәләнә. Ә беҙҙә ни өсөндөр улар бары тик балиғ булмағандарҙың законлы вәкилдәре генә тип йөрөтөлә. Эйе, улар законлы вәкилдәре лә, шул уҡ ваҡытта белем биреү процесында әүҙем ҡатнашыусы, белем биреү усағын, белем биреү телен һайлаусы ла. Шуға күрә уҡыусылар менән генә түгел, атай-әсәйҙәр менән әүҙем эшләргә кәрәк. Бөгөн ауылдарҙа мәктәп - берҙән-бер тиғендәй социаль-мәҙәни объект булып ҡалып бара. Оптималләштереү сәбәбе менән күп урындарҙа балаларҙы йөрөтөп уҡыталар һәм милли мәктәп ҡатнаш мәктәпкә әйләнә. Әммә "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законға ярашлы, мәктәптәрҙең учредитель тәртибендә ойошторолоуы яҙылған. Йәғни, уны кемдәндер теләге буйынса ғына үҙгәртеү мөмкин түгел. Әгәр документта белем усағы башҡорт гимназияһы тип яҙылып, теркәү үткән икән, ул бер нисек тә ҡатнаш булып китә алмай. Дөйөмләштереп әйткәндә, революцияға тиклемге лә, совет осорондағы ла, хәҙерге ҡануниәт тә милли белем биреүҙе лә, туған телдә өйрәнеүҙе лә тыймай. Шуға күрә, уҡытыусыларға һәм мәктәп директорҙарына атай-әсәйҙәр менән ныҡлы эш алып барырға кәрәк.

**Лена СӘЛӘЙМӘНОВА,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**

**Донъяның ҡайһы тарафында йәшәһәң дә, туған телең һәм тамырҙарыңды онотмау - һәр кемдең изге бурысылыр. Ә был маҡсатҡа нисек тоғро ҡалырға? М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтының өлкән уҡытыусыһы, Мәскәү ҡалаһындағы балалар һәм атай-әсәйҙәр өсөн башҡорт теле дәрестәрен ойоштороусы яҡташыбыҙ Ләйсән Йәҙгәр ҡыҙы ӘХМӘҘУЛЛИНА менән әңгәмәләшкәндә тап ошо һорауға яуап эҙләнек.**

**▸ Мәскәүҙә балалар һәм өлкәндәр өсөн башҡорт теленән белем бирә башлауығыҙға байтаҡ ҡына ваҡыт үткән, был эшкә тотонорға нимә этәрҙе?**

- Эйе, беҙ илебеҙ баш ҡалаһында йәшәгән милләттәштәребеҙ һәм уларҙың балалары өсөн туған тел дәрестәрен Мәскәү башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә 2017 йылда башлап ойоштороҙоҡ. Ошо йылдар эсендә ябай түңәрәктән "Башҡорт этномәҙәни клубы"на әүерелдек һәм туған тел дәрестәренән тыш, башҡорт мәҙәни донъяһына бәйле башҡа төрлө курстар ҙа ойоштораһыбыҙ. Ә иң мөһиме, ситтә йәшәгән һәм мохтажлыҡ кисергән яҡташтарыбыҙ өсөн башҡорт мөхите булып торабыҙ. Был үҙ мохтажлығыбыҙҙан тыуған проект, сөнки балаларыбыҙ Мәскәүҙә тыуҙы һәм 3 йәшкә тиклем ғаиләлә башҡортса ғына аралашып үҫтеләр. Ә артабан эҙләп ҡарап та, уларға кәрәкле ошо мөхитте тапмағас, тотоҡ та уны үҙебеҙ ойоштороорға булдыҡ: дәрестәр үткәрергә урын таптыҡ, таныш башҡорт атай-әсәйҙәренә мөрәжәғәт итеп, тәүге уҡыусыларыбыҙҙы йыйҙыҡ.

Әлбиттә, беренсе йылда башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр һаны самалы ине, әммә бөгөн зарланмайбыҙ: төркөмдәрҙә йөмғеһе 40-ҡа яҡын бала шөғөлләнә, өлкәндәр ҙә теләп килә. Балаларҙы мәктәпкә тиклемге һәм мәктәп йәшендәге төркөмдәргә бүлгәнбеҙ, тағы ла онлайн рәүештә өйрәнеүселәр бар. Һуңғыһында Мәскәү генә түгел, Санкт-Петербург, Ярославль һәм башҡа ҡалаларҙан да шөғөлләнеүселәр бар. Дәрестәрҙе ата-әсәләр өсөн дә уңайлы ваҡытҡа ҡуйырға тырышабыҙ һәм шуға күптәр ғаиләләре менән йөрөүҙе хуп күрә. Мәсәлән, атай-әсәй өлкәндәр төркөмөнә, балалары кескәйҙәр һәм мәктәп йәшендәгеләр төркөмөнә бер үк ваҡытҡа уҡырға килә ала. Уларға белемде биш профессиональ педагог бирә.

Тағы шуны ла телгә алып үтергә кәрәк: былтыр ирем Салауат Әхмәҙуллин өлкәндәргә иҫке төрки теле серҙәрен дә асты. Дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, заманса форматта үткәрергә һәм балаларҙы башҡорт теленә генә түгел, мәҙәниәтҡә, тарихҡа һәм мөхиткә ылыҡтырырға тырышабыҙ. Улар бейеү, йыр, һүрәт төшөрөү, ҡумыҙҙа һәм ҡулләшмәгән, белмәгән бала ла ултырырға мөмкин. Ләкин уларҙы бер үк темпта өйрәтергә кәрәк. Шуға, уртаҡлыҡтар табырға тырышабыҙ. Оксфорд-Кембридж белем биреү системаһы, Монтессори системалары элементтарын ҡулланабыҙ, төрлө методтар һәм форматтар - барыһы ла телде теләп өйрәнһендәр өсөн эшләнелә. Мәсәлән, "йәбешә - йәбешмәй" тигән ҡылым темаһын алайыҡ. Бала хәтерендә ҡалдырһын өсөн шунда уҡ ошо хәрәкәтте яһап күрһәтергә була: магнит торбаға йәбешә, тимәк, торба тимерҙән эшләнә һәм дәрестә тимерҙе эҙләтеп тә алаһың. Йырҙарҙы ла күп өйрәтәбеҙ, сөнки кеше бөтә һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлап етмәһә лә, өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнә. Уйындарҙы тик башҡортса ғына уйнайбыҙ һәм унда ҡатнашырға теләгән бала ниндәйҙер кәрәкле һүҙҙәрҙе белергә тейеш.



# ТУҒАН ТЕЛ...

## бала менән атай-әсәй араһын яҡынайта

2019 йылда беҙҙең методиканы аңлатыусы китабым донъя күрҙе: унда теория һәм 20 дәрес өлгөһө бирелгән. Был китаптың эш дәфтәре лә бар. Әсбаптар Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ярҙамында бөтә Рәсәй буйлап таратылды. Әле был яңы китапты нәшергә әҙерләнек, ул уйындар һәм күнегеүҙәрҙән торған сағыу ҡулланма буласаҡ.

райҙа уйнау оҫталығын үҙләштерә, башҡорт халыҡ уйындарын уйнай, башҡортса кино ҡарай. Өлкәндәргә милли тематикаға ҡағылмаған, әммә бик тә мөһим арт-терапия, психолог менән осрашыу, флористика буйынса ҡыҫҡа курстар ҙа ойоштораҡбыҙ.

Ике йыл рәттән Башҡортостан Башлығының грантын отоҡ һәм быйыл шул аҡсаға "Комарҡкы" конкурс-фестивален үткәрҙек. Конкурсҡа бейеү, халыҡ йыры, сәхнәләштереү, милли уйын ҡоралдарында уйнау, ауыҙ-тел ижады һәм һүрәт төшөрөү буйынса номинацияларҙа эштәр килде. Мәскәүҙә генә түгел, Башҡортостанда һәм илдең башҡа төбәктәрендә йәшәгән милләттәштәр ҙә бик әүҙем ҡатнашты. Сараны ҙур тантаналы концерт менән тамамлап ҡуйҙыҡ.

**▸ Башҡорт теле буйынса дәреслектәр, кәрәкле материалдар мәсьәләһен әленән-әле күтәреп сығалар, ә өҫтәмә белем биреү өлкәһендә уны нисек хәл итәһегеҙ?**

- Беҙҙә эшләгән уҡытыусылар барыһы ла тейешле белемле һәм тәжрибәле, улар бер беҙҙә генә уҡытмай һәм яңы форматтар менән яҡшы таныштар. Шуға, үҙебеҙ кәрәк тип һанағанса уҡытабыҙ. Дәрестәргә телде төрлө кимәлдә белгән, төрлө йәштәге кешеләр килә. Бер үк төркөмдә теле башҡортса асылғаны ла, туған телен бөтөнләй аңламаған, һөй-

**▸ Үҙегеҙҙең шәхси тәжрибәнән сығып, сит мөхиттә балаға туған телен өйрәтеп үҫтереү серҙәрен асһағыҙ ине.**

- Күптән түгел әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр осрашыуы үткәргәйнем, шунда күптәре "Урамда, кеше араһында нисек туған телеҙҙә һөйләшәһегеҙ?" тигәнерәк һорау бирәләр. Мәскәүҙә был йәһәттән бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ һиҙгәнебеҙ юҡ, урамда булһынмы, башҡа ерҙәме - башҡортса һөйләшеп йөрөйбеҙ. Үҙ-ара тартынмай башҡортса аралашабыҙ, әлбиттә, башҡа берәй милләт кешеһе килеп ҡушылһа, бер-беребеҙҙе аңлар өсөн уртаҡ телгә күсәбеҙ. Балаларҙың аңында башҡортса һөйләшеү ниндәйҙер кәмселек билдәһе, тигән ялған фекер юҡ. Улар ауыҙ тултырып матур итеп башҡортса аралаша, кеше араһында ла ҡыҫҡырып "әсәй-атай" тип өндәшергә, ниҙер һорарға

мөмкиндәр. Тартынып тормайҙар, туған телдәренән оялмайҙар. Быға, бәлки, Мәскәүҙә төрлө милләт вәкилдәренең күп булыуы һәм һәр ҡайһыһы үҙ телендә һөйләшеп йөрөүен күреүҙә булышлыҡ итәлер. Әммә иң мөһиме, балаларҙың теле башҡортса асылды. Улыбыҙ хатта 3 йәшенә тиклем русса аңлаһа ла һөйләшмәне, мин уға тәржемәсе булып йөрөй инем. Һуңынан 1-2 ай эсендә рус телен үҙләштерҙе лә алды. Ә бына ҡыҙыбыҙ 2 йәшенән үк ике телдә лә белеп үҫте, әле ябай балалар баҡсаһына йөрөһә лә, башҡортсаны "тоҙларға" ирек бирмәйбеҙ - өйҙә тик туған телдә генә аралашабыҙ, был мотлаҡ шарт. Әлбиттә, балалар тик өйҙә генә, ата-әсәһе менән генә аралашып тора алмай. Уларҙың ҡыҙыҡһыныуҙары күп, уларға дуҫтар, туғандар ҙа кәрәк, олатай-өләсәһе менән дә һөйләшеп торалар, бынан тыш та ниндәйҙер мөхит, аралашыу түңәрәге кәрәк. Был осраҡта беҙҙең "Башҡорт этномәҙәни клубы" оло ярҙам.

Дөрөҫөн әйткәндә, баланы һөйләшергә өйрәтә башларҙан да алда туған телгә өҫтөнлөк бирергә кәрәк. Ҡыйынлыҡтар, ҡаршылыҡтар тыуып торор, ҡала мөхитендә бит аралашыуҙа, йәнһүрәттәр һәм башҡаһы ла етмәй. Ләкин телде өҫтөн ҡуйһаң, берәй һайлау алдында торғанда баланың теле өсөн яҡшыраҡты һайлайһың, ҡалағын шымартып үткәреп ебәрәһең. Ҡайһы берҙә атай-әсәйҙәр "Балабыҙ беҙҙең менән башҡортса һөйләшмәй ҙә ҡуя, башҡортса һораһаң да русса яуап бирә", тиҙәр. Ә беҙҙә дәрескә йөрөгән балалар минең менән тик башҡортса ғына аралаша, хатта яңы ғына өйрәнә башлағаны ла. Сөнки улар мине башҡорт теле менән бәйләй. Шуға был ассоциация алымын да ҡулланырға мөмкин: кем берәү менән башҡорт теле араһында ассоциация булһа, бала телен вата-емерә, иҫенә төшөрә-төшөрә башҡортса һөйләшәсәк.

Тағы ла бер бәләгә әүерелгән күренеш бар, ул да булһа - башҡортса-русса ҡатыштырып һөйләү. Хәҙер телде боҙмай һөйләшкән ололар ҙа һирәк, йәштәр тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Был ғәҙәткә ингән һәм ихтыярһыҙҙан килеп тыуған күренеш, әммә уны үҙгәртеп, төҙәтеп була. Кешенең мейеһе мәғлүмәтте ниндәй телдә күберәк ала, шул телдә уны тиҙерәк, алдараҡ "сығара". Ябай ғына миҫал: "информация" тигәндә мин көнөнә меңләгән тапҡыр ишетәм, күрәм, ә "мәғлүмәт" һүҙе һирәгерәк ҡулланыла һәм шуға ла аралашҡанда тәү сиратта хәтергә төшкәнен, беренсеһен ҡулланам. Шуға күберәк уҡырға, тыңларға, ҡарарға һәм шул рәүешле үҙенә мөхит булдырырға кәрәк. Был рәүешле үҙенә мөхит булдырыу тураһында күп кенә яҙғаным да бар: башҡортса нимә бар, бөтәһенә лә йәбешеп ятып, ихтыяж барлығын, "беҙ теләйбеҙ - һеҙ эшләгеҙ" тигәнде күрһәтеү мөһим. Юғиһә, ҡайҙа төртөлмә "Ихтыяж юҡ, быны эшләүҙән ни фәтүә?" тигән булып, йәмғиәттә башҡорт телендәге күп нәмәләргә иғтибар булмауға һылтаналар ҙа торалар...

**▸ Теле туған телендә асылған һәм унын аша донъяны танып белгән баланың фекерләү ҡеүәһе яҡшы үҫешә, тигән фекерҙә ғалимдар. Һеҙ быны менән килешәһегеҙме?**

- Был күптән иҫбатланған факт. Ғөмүмән, билингвизм - ике телде лә берҙәй яҡшы белеү һәм ҡулланыу, бөгөн бөтә донъяға таралған күренеш. Ә күптән түгел, XX быуатта ғына, был күренешкә ҡараш бик үк ыңғай булмаған. Тик һуңғы тикшеренеүҙәргә таянып, билингвизмдың баш мейеһенә яҡшы йоғонто яһауы иҫбатланғас ҡына ҡайһы бер Европа илдәрендә ике теллелекте ҡабул итә башлағандар. Билингв - ике телде лә бер рәттән ҡулланған кеше. Берҙән, унын мейеһе һығылмалы була. Унан һуң, донъяға ҡарашы ла киңерәк була. Һәр бер тел - ул айырым донъя, тибеҙ, бала ике донъяны ла күнеленә һалып һөйләшеп йөрөй. Шулай уҡ билингвизим стресҡа ҡаршы тороуҙа ла ярҙам итә, тиҙәр. Былар барыһына ла билдәле, ә бына башҡорт ғаиләһендә тыуған баланың теле русса асылһа һәм ул тик шул телдә генә аралашып үҫкән осраҡта ниндәйҙер үрҙәр яулай аламы? Әлбиттә, был мөмкин булған хәл. Ләкин бында тел менән бергә баланың үҙ мәҙәниәтен, тарихын, мөхитен юғалтыуын күҙ уңынан ысҡындырабыҙ. Ул рус мәҙәниәтен дә үҙләштерә алмай, сөнки ул был милләттән түгел һәм был мөхитте ул тел ярҙамында ғына аңлай, үҙен ниндәйҙер бер араулыҡта ҡалған кеше итеп тоя. Ә туған телен һәм тамырҙарын белгән кеше тормошта бер нисә йыл һайын килгән экзистенциаль көрсөктәрҙе еңелерәк үткәрә, ти ғалимдар.

**▸ Һеҙҙе тәрбиә һәм тел мәсьәләһендә ниндәй һорау борсоуға йәки аптырауға һала?**

- Даими рәүештә ҡалҡып торған бер һорау: "Туған телде кем өйрәтергә тейеш?" Бында феркҙәр айырыла: атай-әсәй, йәмғиәт, хөкүмәт. Әммә был өс "яуап биреүсе" лә үҙ йөкләмәләрен тулыһынса аңлап етмәйме, әллә яуаплылыҡ алырға теләмәйме: һәр береһе баланы туп кеүек тегендә-бында тибә лә тибә. Был бурысты бөтәһе лә бергә атҡарырға тейеш, миненсә. Әммә туған республиканан ситтә йәшәгәндәр, бына беҙҙең осраҡтағы һымаҡ, йәмғиәт йөкләмәһен дә, хөкүмәт йөкләмәһен дә үҙ иңенә алырға мәжбүр. Сөнки беҙ баландың, тимәк, киләсәк быуынындың киләсәгә өсөн атай-әсәйҙән дә яуаплыраҡ инстанция юҡ тигәндә аңлауысыларҙан.

Тағы ла йәмғиәттәге бер күренеш күнелде әйкәп тора, ул күптәрҙең йырып сыҡҡылыҙ проблемаһына ла әүерелде: баланы гаджеттарҙан айыра алмау. Бында ла ата-әсәнән яуаплылыҡты үҙ өҫтәренә алыу талап итела. Сөнки балаға ирек бирһәң, телефон унын уҡытыусыһына һәм хатта ата-әсәһенә әүерелә, ә беҙ ни бары ашатыусыһы ғына булып ҡалабыҙ. Әлбиттә, мыжып, көйһөҙләнеп ултырған йәки үҙенә иғтибар талап иткән, тиктормаҫ баланы транспортта, дауаханала йә өйҙә үҙ эштәрең менән булыу маҡсатында телефон менән арбап ултыртып ҡуйыуы рәхәтерәк. Шулай ҙа унын киләсәген хәстәрләһән, аң кимәленең үҫешкән булыуын, ижади фекерләй белеүен теләһәң - был мәсьәләгә яуаплыраҡ ҡарарға, хатта үҙенде лә ҡулына гел телефон алыуҙан кире күндереү мөһим. Беҙ был йәһәттән бик ҡаты тотабыҙ балаларҙы, улар телефонда бөтөнләй ултырмай, йәнһүрәттәрҙе көнөнә 1 сәғәт тирәһе ҡарайҙар, ә ҡалған ваҡыттарын уйнап, үҙ эштәре менән шөғөлләнеп уҙғара. Ғөмүмән, балаң менән аралашыу әүҙем, маҡсатҡа ярашлы булһа, уға гаджеттар кәрәкмәҫкә лә мөмкин. Балаға иғтибар бүлеү, уны шәхес булараҡ таныу, уртаҡ ҡыҙыҡһыныуҙар барлыҡҡа килтереү, ниндәйҙер ыңғай ғәҙәттәр тәрбиәләү мөһим.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

***Ләйсән Йәҙгәр ҡыҙы менән туған тел һәм балалар тәрбиәһенә ҡағылышлы күп темаларга һөйләштек. Әммә унын: "Туған телен белмәй үҫкән быуын - ул тел өлкәһендә генә түгел, ә атай-әсәйҙәр һәм балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙә лә һалҡынлыҡ, ауырлыҡ тыуҙырыусы күренеш ул", - тигән һүҙҙәре бигерәк тә хәтерҙә ҡалды. Сөнки беҙ был хәлде аҙым һайын тиерлек күҙәтәбеҙ. Туған тел менән бергә бала күңеленә атай-әсәйгә ҡарата ла хөрмәт, изгелек орлоҡтары һалына икәнен онотоп китә шул күптәр. Шулай түгелме ни?***

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**



ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

Ө

# АУЫҘЫҢДЫ ЙЫРАМ,

## йәки Телебеҙ матурлығын һаҡлайыҡ!

**Туған телебеҙҙең һәр төрлө нескәлектәре хаҡында фекерләп, эҙләнә башлаһаң, ҡайсаҡ ҡыҙыҡ ҡына һүҙҙәргә, һүҙбәйләнештәргә барып юлығаһың.**

Бала сағымдан ҡыҫҡа ғына дүрт юллыҡ бер шиғыр иҫемдә ҡалған: "Урамда буран, мин өйҙә торам. Тәҙрә аша тик ауыҙ йырам..." Был шиғыр юлдарын ятлағанда минә һәр саҡ "ауыҙ йырам" тигән һүҙбәйләнеш ирмәк булып тойола торғайны. Унын йылмайып тороуҙы аңлатҡанын барыбыҙ ҙа беләә. Йылмайырға яратыусы кешегә "йырыҡ ауыҙ", "ауыҙы ҡолағына еткән" тип әйткәндәрен дә ишеткәнем бар. Юҡ-барға көлгән берәүгә: "Нимә, бушҡа ауыҙ йыраһың?" - тиҙәр. Ә беҙҙең яҡта "Кәрәгенде бирәм!" тип янауҙы ла ни өсөндөр ҡайһы берҙә: "Ауыҙыңды йырам!" - тип әйтәләр.

Баймаҡ интернат-мәктәбендә уҡығанда синыфыбыҙҙа Солтанморат исемле шаян малай бар ине (мәрхүм инде ул). Уйламағанда, берәй буш ҡына һүҙҙән ҡыҙыҡ таба һала торғайны. Һәр саҡ үҙе лә йылмайыусан булған был малайҙы тәрбиәсе Ишбикә апай еңелсә шелтәләп ала: "Ошо Солтанморат булһа, ауыҙын йырыр ҙа йөрөр инде!.." Ә Солтанморат шунда уҡ: "Кемдең?" - тиер ине (кемдең "ауыҙын йырыр", йәнәһе). Синыф бүлмәһендә ултырған балалар барыһы ла көлөшөргә тотона... Унын ошо һүҙҙәрен иҫләһәм, әле булһа көлкөм килә.

Бына шул йырыҡ ауыҙ хаҡында бер аҙ фәлсәфәләп алырға булдым әле. Анатомия һәм физиология күҙлегенән сығып ҡарағанда, ауыҙ әҙәм балаһының аш эшкәртеү юлындағы иң тәүге ағза. Унын ике төп функцияһы бар: ашап-эсеү һәм һөйләшеү. Ни өсөндөр, башҡа күп кенә ағзаларға ҡарағанда, ауыҙҙы йышыраҡ телгә алабыҙ. Һәр хәлдә, миңә шулай тойола. Һис бер гәйебе булмаған ошо ағзаны бөгзе ваҡыт нимә менән генә сағыштырмай әҙәм балаһы! Ҡайсаҡ уны яҡшы әйбергә лә оҡшатыуға, әммә кешенең ниндәйҙер берәй кәмселеген, насар яғын унын ауыҙына япһарыусылар күберәк...

Бер йән эйәһе лә ашамайынса тора алмай. Ауыҙҙың ашау функцияһы һәр йәнлеккә, ҡошҡа, балыҡ, бөжәктәргә лә ҡағылышлы. Халҡыбыҙҙа уны аш эшкәртеү ағзаһы булараҡ телгә алған әйтемдәр бар. "Хәлдәр нисек", тиһәң, бөгзе берәү "Ашауға ҡарап", тип яуап бирә. "Төшөмлә" урында эшләүсе берәйһе хаҡында: "Кемдең ҡулында - шунын ауыҙында", - тигәндәрен элегерәк ишеткеләй торғайным. Был әйтем Советтар Союзының һуңғы осорҙары һәр төрлө тауар, айырыуса, аҙыҡ-түлек дефициты мәлендә, башлыса, һатыусы, товаровед, база мөдирҙәренә ҡарата йышыраҡ ҡулланылды. Хәҙер уны "хәләл ҡул көсөн йәлләмәгән кеше ашарға таба ала", тип аңларға тырышыу ҙа дөрөҫ булыр.

Саманан тыш күп ашарға яратҡан кеше тураһында: "Ауыҙы арандай булып, ашауҙан башҡаны белмәй ул", - тип тә әйтәләр (аран - ҡышын малды көндеҙ ябып ҡуя торған асыҡ, киң ялан кәртә). "Күҙең ауыртһа - ҡулыңды, эсең ауыртһа - ауыҙыңды тый" (күп ашама, йәнәһе) тигән әйтем дә бар. Күңелһеҙ берәй хәлгә тарыған берәүҙе эҫе нәмә ашап, "ауыҙы бешкән" кеше менән сағыштыралар. Ураҙа мәлендә, ҡояш байығандан һуң ашай башлауҙы (ифтар) беҙҙең яҡта "ауыҙ асыу" ҙа тиҙәр.

Ә инде ауыҙҙың һөйләшеү функцияһын алып ҡарағанда, быны Аллаһ Тәғәлә фәҡәт әҙәм балаһына ғына биргән. Ауыҙыбыҙҙың ошо эше беҙҙең аҡылыбыҙҙан сыҡҡан уй-фекерҙәрҙе башҡаларға тапшырыуҙан ғына ғибәрәт. Белеүебеҙсә, ауыҙҙа бер ниндәй мәғлүмәт тә барлыҡҡа килмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, берәүҙән насар хәбәр ишеткәс тә: "Кит, ауыҙыңды... ел алһын!" йә иһә "Ауыҙың ҡутарылып, нимә һөйләйһең?" тип әйтеү ғәҙәткә ингән. Күп һөйләргә яратҡан бөгзе берәү хаҡында һүҙ сыҡҡанда (унын ауыҙы хатта ифрат матур булыуына ла ҡарамаҫтан) "ауыҙы һәлберәп", "ауыҙы ҡумталай булып" тип тә ҡушып ебәрәләр. "Унын ауыҙы бер бешерем" тигәндәрен дә ишеткеләгәнем бар.

Берәйһе саманан артығыраҡ "ләпелдәй" башлаһа: "Ауыҙыңды сөйгә эл!" - тип тыя бөгзеләр. Урыҫ телле бер килен үҙенең дүрт йәшлек "бытылдаҡ" ҡыҙына: "Закрой рот на замок!" - тип екергәс, теге баланың: "У меня замка нет!" - тип иламһырағаны хаҡында һөйләгәйне бер яҡыным.

(Дауамы 10-сы биттә).

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ



# БАЛАҢ ОНОТОП ҠУЙМАҺЫН...

**Яҡташыбыҙ шағир Шамил Анаҡтың шундай фәһемле һүҙҙәре бар: "Тел - халыҡтың йән һулышы, йәшәйеш ысулы". Үҙебеҙҙең туған телебеҙ - башҡорт теле тураһында минең дә бер кәлимә әйтер һүҙем бар.**

Һәр балаға әсә телен бишек йырын көйләп, уның әсәһе, атаһы өйрәтә. Әгәр ҙә бала әсә телен өйрәнмәй икән - ул зәгиф. Алтылағы - алтмышта, тигән мәҡәл бар. Алты йәшкә тиклем балаға мотлаҡ башҡорт мөхите тыуҙырыу мөһим. Милли мөхит - ул иң беренсе ғаилә мөхите. Ғаиләлә башҡортса һөйләшһәң, бала ла шул телде үҙләштерә һәм һөйләшә башлай. Телде аралашып ҡына өйрәнеп була. Ғаиләлә башҡортса һөйләшер өсөн балала эске мотивация тыуҙырырға кәрәк, йәғни ошо телдә ул һөйләшергә тейеш, тигән аң һендереү мөһим. Мин үҙем башҡа телдәрҙе өйрәтеүгә һис тә ҡаршы түгелмен, рус телен дә, инглиз телен дә өйрәнһен ул. Быларҙы параллель рәүештә алып барырға мөмкин, сөнки бала бәләкәй саҡта бер нисә телде өйрәнергә һәләтле була.

Туған телде өйрәнеүҙең икенсе этабы - 12 йәш. 12 йәшкә тиклем башҡортса һөйләшһә, ғаиләлә аралашыу мөхите булдырылһа, бала ла туған теленән ситләшмәйәсәк. Милләтенең йырын-моңон, мәҙәниәтен һеңдерәсәк, халҡына ҡарата һөйөү, ихтирам тыуасаҡ.

Ҡыҫҡаһы, һәр башҡорт үҙ балаһын башҡорт итеп тәрбиәләһә, шул етә. Күп тә кәрәкмәй. Башҡорт теле - ул башҡа күп телдәргә, төрлө илдәргә, мәҙәниәттәргә юл асыусы асҡыс. Төркиә, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан һ.б. төрки телле илдәргә барып, иркен аралашып йөрөргә мөмкин.

Атайым менән бер туған Миҙхәт абзыйым нефтсе ине, әле СССР ваҡытында гел Себерҙә йәшәнеләр. Ситтә йәшәһәләр ҙә балаларын башҡортса һөйләшергә өйрәттеләр. Мөхит юҡ тип тормағандар, ғаиләлә мөхит булдырғандар. Абзыйым үҙенә күрә бер алым уйлап тапҡан: балалары уға үҙ телендә өндәшмәһәләр, ул яуап бирмәгән һәм башҡортса һөйләшеүҙе талап иткән. Минең иҫемдә, беҙгә башҡортса хат яҙҙырта торғайны. Миҫалдар күп, ә бына быныһы ҡыҙғаныс. Ситтә йөрөп ҡайтҡан башҡорт ғаиләһендәге бер бәләкәй бала ауыл балалары менән уйнай башлағас, тегеләрҙе аңламаған да: "Ты говори как я, говори по-башкирски как я", - тип әйтә, ти. Тимәк, ул бала үҙенең башҡорт икәнен аңлаған һәм рус телен үҙ теле икән тип ҡабул иткән.

Бала тыуғас та телевизор төбөнә ултыртып ҡуйып, рус телендәге әкиәттәр ҡараткас, әлбиттә, бала шул телде тиҙерәк үҙләштерә һәм русса һөйләшә башлай. Шундай миҫалдар юҡмы ни? Күп улар. Етмәһә, шатланабыҙ, бәләкәй генә булһа ла русса һөйләшә белә, тибеҙ. Хәҙерге йәш атай-әсәйҙәргә ҡарашты бөтөнләй үҙгәртергә кәрәк, балам башҡорт телен белмәй ҡуймаһын, тип ҡурҡырға кәрәк. Телебеҙ юғалып, тарихта ҡасандыр башҡорт халҡының теле лә булған, ул юғалған, тип һөйләргә ҡалмаһа ине.

**Люциә АҘНАҒОЛОВА,**
**Әлшәй районы**
**Ҡармыш ауылы ағинәйе.**

ТЕЛ ТӨБӨ -ХАЗИНА

# АУЫҘЫҢДЫ ЙЫРАМ,

## йәки Телебеҙ матурлығын һаҡлайыҡ!

**(Башы 9-сы биттә).**

Ҡыйыу телмәр тотҡан йә иһә "оҫта" талаша белгән кешенең "ауыҙынан ут сәселә", ә йыуаш, "бешмәгән" икенсе берәү "бәлеш ауыҙ", "ебегән ауыҙ", "мәмәй ауыҙ" йә "асыҡ ауыҙ" булып китә.

Аҙ һүҙлеләргә "ауыҙына һыу уртлаған" тиһәләр, "мәмелдәп", аңлайышһыҙ мығырҙанып һөйләшкән кешегә "ауыҙында бутҡа бешерәһең", тиҙәр. Бәғзе берәү үҙенә оҡшап етмәгән һүҙгә йәһәт кенә ҡаршы яуап таба һала. Ундай кешеләргә ҡарата урыҫта "ауыҙына бармағыңды тыҡма, тешләп алыр", тигән әйтем дә йөрөй. Ә берәй нәмәгә күҙе ҡыҙып ҡарап торған кешенең нишләптер "ауыҙ һыуы ҡойола" башлай...

Насар һүҙле, теленә ни менән һүгенергә яратыусы берәү хаҡында "ауыҙы һаһыҡ" йә иһә "уның ауыҙынан сыҡҡанды эт тә ашамаҫ" тип ҡуялар. Ул ғына ла түгел, былай кешенең ауыҙын хатта ҡайһы берәү аш эшкәртеү трактының иң һуңғы өлөшө менән сағыштырып, " к...т ауыҙ" тип әрләп ебәрә (әлеге лә баяғы "байғош" ауыҙ һаман да ғәйепле һымаҡ була).

Шулай ҙа, ауыҙ тип аталған ошо ағзабыҙ өсөн, һирәк кенә булһа ла, "йылы һүҙ" ҙә табылған мәлдәр булғылай. Мәҫәлән, берәүҙән яҡшы хәбәр сыҡһа, уға: "Ауыҙыңа бал да май", - тиҙәр. Ә инде талашмай, һәр саҡ үҙара татыу йәшәгән ир менән ҡатын тураһында "Улар икеһе бер ауыҙлы, бер һүҙле" йә "Бер-береһенең ауыҙына ғына ҡарап тора улар" тигән яҡшы хәбәр тарала.

Халҡыбыҙ теле ифрат та бай. Мин үҙем дә әле һаман киткән һәм башҡа шундай һүҙбәйләнештәрҙе берәйһенән ишетеп ҡалһам, һәр саҡ хәтерләп ҡалырға, уңайы тура килгәндә, уларҙы ҡулланырға яратам. Ҡасандыр, сит яҡтарҙа оҙайлы хеҙмәт итеү дәүерендә, Башҡортостанға ҡайтып, милләттәштәрем менән "ауыҙ тултырып" башҡортса һөйләшеү минең хыялымда ғына ине. Сираттағы ялдарымда ауылдаштарым, башҡа яҡташтарым менән гәпләшкән арала, уларҙың ошондай һутлы телле булыуына, күпселегенең һүгенмәй һөйләшеүенә иғтибар иттем. Туған телен яҡшы белгән кеше һөйләм төҙөү өсөн теленә ниндәй һүҙҙәрҙе мохтаж түгел, тигән инаныуҙа үҙем. Элегерәк оло кешеләребеҙ, хатта берәй нәмәгә ныҡ асыуланған саҡта ла, "әй, ауыҙыңа төкөрәйем", тип кенә ҡушып ебәрә торғайны. Ғүмер буйы ауыл ерендә йәшәп, үҙҙәренең район диалекттарына ярашлы, тап-таҙа башҡорт телендә аралашҡан яҡташтарыбыҙ телебеҙҙең бысранып, ярлыланып, бөлөп китеүенә бер ҡасан да юл ҡуймаҫ, ин шәә Аллаһ, тигән ышаныслы бар. Ауыл кешеләрен хатта "телебеҙ хазинаһын һаҡлаусылар" тип тә атар инем. Үҙҙәре лә һиҙмәстән, ябай ғына һөйләшеү процесында бер-береһенә, киләсәк быуындарға ошо хазинаны тапшыра килә улар.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һирәкләштереп кенә булһа ла ҡайһы берәүҙәрҙең ауыҙынан оят һүҙҙәр "ыскынып" киткеләй, әлбиттә. Айырыуса, йәшерәктәрҙең онотҡанда бер һүгенеп алыуы хаҡында әйтмәй ҡалыу ғәҙел булмаҫ. Аҙым һайын түгел улар. Башлыса, әрме хеҙмәтендә булып ҡайтҡан ҡайһы бер егеттәребеҙҙең тәүге осор тик урыҫсалап ҡына "һалдырғылағаны" бер кем өсөн дә сер түгел. Ә башҡортса һүгенеү күпкә оятыраҡ һымаҡ! Студент сағымда, атаҡта минең менән бергә торған милләттәш егеттәрҙең күпселеге әрменән әле генә ҡайтҡан ине. "Сей башҡорттар" араһында Вася исемле бер урыҫ малайы ла (Бөрө ҡалаһынан) йәшәне. Ҡайһы берҙә башҡорт егеттәренең ара-тирә әлеге "урыҫ һүҙен" буташтырып ебәреүҙәрен ишетеп ҡала, күрәһең: "Һеҙ үҙ-ара һөйләшкәндә, ни өсөн урыҫса һүгенәһегеҙ?" - тип ҡыҙыҡһына торғайны. "Беҙҙең телдә һүгенеү һүҙе юҡ", - тип кенә яуап бирһәң, ышанып етмәй, сөнки бер шаян егетебеҙ туған телебеҙҙә ҡайһы берәүҙәр ҡулланған "тегеләй-былай" һүҙбәйләнештәрҙе уға өйрәткеләгән булған икән. Милләттәш ҡыҙҙарыбыҙ бүлмәгә килеп инһә, әлеге Вася башҡортсалап, ана шул һүҙҙәрҙең бер-икеһен вата-емерә булһа ла әйтеп, беҙҙе оятҡа ҡалдырған ваҡыттары ла булды...

Бала сағымдан, иң әҙәпле һөйләшкән кешеләр, тип, әлбиттә, үҙебеҙҙең мәктәп уҡытыусыларын һананым, хатта был ағай һәм апайҙарыбыҙ насар һүҙҙәрҙе бөтөнләйгә белмәйҙер, тип тә уйлай торғайным. Шулай уҡ хәрби хеҙмәтем тамамланыр алдынан, тәүге ҡулъяҙмаларымды тотоп, районыбыҙҙың, баш ҡалабыҙҙың гәзит һәм журнал мөхәрририәттәренә ингеләп, унда эшләгән кешеләр менән таныша, аралаша башлағас, уларҙың ғәйәт матур теленә иғтибар иттем. Бер ниндәй ҙә сит һүҙ ҡушылмаған тап-таҙа башҡортса һөйләшеүҙәргә таң ҡалдым! Әрме коллективында оҙаҡ йылдар буйы әлеге "ят һүҙҙәр"ҙе аҙым һайын тигәндәй ишетеп йөрөгәнгәмелер, яҙыусы һәм журналистар мөхитенә барып юлығыуым - тынсыу бүлмәнән саф һауаға сыҡҡан һымаҡ тойолдо. Әҙиптәр генә түгел, башҡа һәр кемебеҙ ҙә үҙебеҙҙең шундай ағымлы, гүзәл ауыҙ-телле милләт вәкилдәре икәнлегебеҙҙе онотмайыҡ, тимәксемен. Ғәйәт бай, матур телебеҙҙең бихисап күп төрлө нескәлектәрен һәр саҡ өйрәнергә ынтылайыҡ һәм уны һаҡлап, быуындарҙан-быуындарға тапшырайыҡ.

Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзитенең туған тел мәсьәләһенә айырыуса иғтибар бүлеүе һөйөнөслө. Махсус тел белгестәренең - яҙыусы һәм журналистарыбыҙҙың гәзит һайын телебеҙгә ҡағылышлы яҙмаларын уҡып ҡына ла башҡорт теленең күп яҡтарын ярайһы ғына тәрән итеп өйрәнеп алырға булалыр, тип уйлайым. Бына ошо һәм башҡа күп кенә проблемаларҙы күтәреүсе гәзитебеҙҙе таныштарымдың әле береһенә, әле икенсеһенә биреп уҡытҡылап торғас, уларҙың бер нисәүһе, ҡыҙығып китеп, хәҙер үҙҙәре лә яҙҙырып ала башланы. Быҡдай гәзитте алдырмаған кеше бик күп ниғмәттәрҙән мәхрүм ул, тип һанайым.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШ!

# ЙӘТИММЕ,

## әллә етемме?

**Халыҡ телмәренә битарафлыҡ арҡаһындамы, байтаҡ һүҙҙәребеҙ әҙәби телгә дөрөҫ булмаған формала инеп киткән.**

Мәҫәлән, "ашъяулыҡ" һүҙе. Ауылдағы өлкәнерәк кешеләрҙең телмәренә иғтибар итһәк, ашъяулыҡ түгел, ә ашаулыҡ тигәнде ишетербеҙ. Был хаҡта билдәле тел белгесе Әкрәм Бейештең "Тел хикмәттәре" тигән китабында ошолай яҙылған: "Ябай халыҡ был һүҙҙе ашаулыҡ тип әйтә. Аш табынына йәйә торған был нәмәнең яулыҡҡа бер ҡатнашы ла юҡ. Яңлышы буйынса ла, мәғәнәһе буйынса ла ул көтөүлек, сәсеүлек тигән һүҙҙәргә оҡшаған һәм ашһыу ҡуйып ашар өсөн тәғәйенләнгән ябыуҡы, аш урынын аңлата. Уны яулыҡҡа әйләндермәй, үҙ асылына ҡайтарып, ашаулыҡ тип яҙған яҡшы".

Әлбиттә, әҙәби телдә ниmәнелер үҙгәртеү мәшәҡәтле эш. Һәм был осраҡта, минеңсә, Әкрәм ағай хаҡ булған хәлдә лә, хафаланыу кәрәкмәйҙер ҙә, сөнки мәғәнә боҙолмай. Ашъяулыҡмы, ашаулыҡмы, ул барыбер аш өҫтәленә ябылған яулыҡ. Әйткәндәй, яулыҡ үҙе лә бит ябыулыҡ тигәндән барлыҡҡа килгән.

Әкрәм Бейеш "етем" тигән һүҙҙе лә, боҙолған форма, тип яҙып ҡалдырған. "...Бәлки, ҡайһылыр яҡта уны шулай тип әйтеү ҙә барҙыр, ләкин башҡорт халҡының күпселеге "йәтим" ти, һәм ул ғәрәп телендә лә - йәтим. Һүҙҙе был етем тигән яҙылышы ниндәйҙер билдәһеҙ сәбәп менән тәү башлап Ғ. Дәүләтшиндың 1930 йылғы орфографик һүҙлегенә инә. Шунан күсереп, уны Ҡ. Әхмәр 1952 йылғы орфографик һүҙлеккә ала, шуның менән әҙәби вариант итеп нығытып ҡуя. Ләкин барыбер кеше йәтим тип һөйләй, етем тигән яҙылышты ят күрә... Шуға ла ғәрәп телендәге һәм күпселек башҡорттар һөйләшендәге йәтим тигән вариантты әҙәби яҙма телгә индерергә кәрәк" . Тел белгесенең был фекере менән тулыһынса килешеү кәрәк, минеңсә. Сөнки этимологик яҡтан тикшергәндә лә "йәтим"дең "ят" һәм "имә" һүҙҙәренән яһалғаны ап-асыҡ күренеп тора. Имсәкте ят бала имә - ятимә. Телдә йәшәп килгән йәтимә, йәтимәк варианттары ла быға дәлил, минеңсә.

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# АУЫЛ ТУРИЗМЫ...

## тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе таныта

**Сентябрҙә Бөтә донъя туризм көнө билдәләнгәйне. Тәбиғәтте, оҙайлы походтарҙы, төнгө усаҡ тирәләй дуҫтар менән теҙелеп ултырып әңгәмәләр ҡороуҙы яратҡан кеше булараҡ, был датаны иғтибарһыҙ үткәреп ебәрә алмайым. Үҙем матур тәьҫораттар артынан ҡыуыусы турист булараҡ, тәбиғәт ҡосағында барыһының да күңеленә хуш килерлек ял ойоштора белеүселәргә ихтирамым айырыуса ҙур. Йыл әйләнәһенә әллә күпме кешене ҡаршы алып, уларҙың ялын юғары кимәлдә ойоштороп, "туризм" тигән төшөнсәнең бөтә нескәлектәрен белгән кешене табыуы ауыр булманы әңгәмә өсөн. Шулай итеп, бөгөнгө әңгәмәсем - Салауат районында, йәмле Йүрүҙән йылғаһы буйында тирмәләр ҡороп, туристарҙы һәр саҡ асыҡ йөҙ менән ҡаршы алыусы - Илфат Рифат улы ИСМӘҒИЛЕВ. "Шайтан-көҙәй" тирмәләр кемпингы хужаһы үҙенең эшмәкәрлеге, туризм өлкәһендә эшләүҙең үҙенсәлектәре хаҡында бәйән итте.**



**Илфат, республикала туризм төрлө яҡлап үсешкән. Ул тауҙарға йөрөтөү, тарихи-этнографик походтар, йылға буйлап ағып төшөү, актив һәм пассив туризм, ғөмүмән, йәнең теләгәнен һайларға була. Ә һинең туристик эшмәкәрлегеңдең үҙенсәлеге - тирмәләр кемпингы. Ни өсөн нәҡ ошондай туризм? Был өлкәләгә тәүге аҙымдарың ниндәй булды?**

- Электән тарих, йола һәм атай-олатайҙарҙың көнитмеше менән ҡыҙыҡһындым. Ошо ҡыҙыҡһыныуым тирмәләр эшләй башлауға килтерҙе. Сифатлы тирмәне эшләү еңел түгел, сөнки уның үҙенә генә хас технологияһы, эшләү рәүеше бар. Бар күңелемде һалып эшләгән тирмәләремде ҡуртымға бирҙем, һатып алыусылар ҙа булды.

Беҙҙең төбәк туризм киң үсешкән яҡ, шуға күрә ошо йүнәлештә эшләү теләге лә һәр саҡ күңелемдә йәшәне. 2016 йылда тәүге тапҡыр ике йүнәлеште лә - тирмәләр эшләүҙе һәм туризмды - берләштереп, йылға ярына ике тирмәмде ҡороп, ҡуртымға ике катамаран тәҡдим итеп, тәүге ҡунаҡтарымды ҡабул иттем. Улар Нефтекама ҡалаһынан килгән өс ғаилә ине. Беренсе туристарҙың ялын ойоштороу ваҡытындағы тулҡынланыуым әле булһа хәтерҙә. Ҙур яуаплылыҡ тойоп эш иттем, сөнки кешелә тыуған беренсе тәьҫорат уның хәтерендә мәңгегә ҡаласаҡ. Әгәр ҙә мин ҡунаҡтарымда тағы ла беҙгә ял итергә килеү теләген уята алмайым икән, тимәк, туризм өлкәһендә эшләүемдең файҙаһы ҙур түгел. Беҙҙә булып ҡайтҡан һәр кемдең тағы ла ял итергә килергә атлығып тороуына булышлыҡ итеү тәүбурысым. Ошо осраҡта ғына эшем алға барасаҡ, тирмәләрем буш тормаясаҡ.

**Биш миҙгел эсендә тағы ла ниндәй эштәрҙе әүҙемләштереүгә өлгәштең?**

- Тәүге миҙгелдәге уңышлы башланғысым икенсе йылына 15 сутый ерҙе ҡуртымға алып, "Шайтан-көҙәй" тирмәләр кемпингы асырға этәргес көс булды. Кемпинг Көньяҡ Уралдың иҫ киткес тәбиғәте ҡосағында - Йүрүҙән йылғаһы эргәһендәге Иҙрис ауылында урынлашҡан. Шулай уҡ 2018 йылда Йүрүҙән ярында "9-сы тирмән" исемле туристик туҡталҡа (стоянка) астым. Ҡышын туҡталҡа эшмәкәрлеген ябып торабыҙ, тирмәләр кемпингында иһә 3 ҡышҡы тирмә эшләүен дауам итә. Улар мейес менән йылытыла, туристарҙың уңайлы ял итеүен күҙ уңында тотоп, мунса ла эшләп ебәрҙем. Кемпинг ҡунаҡтары өсөн тауҙан сана, саңғы, тюбинг менән шыуыу трассалары бар.

Ошо ваҡыт эсендә кемпинг һәм туҡталҡа эшмәкәрлеге менән бер рәттән, катамаран, велосипед һәм башҡа әүҙем ял итеүҙә кәрәк-яраҡты ҡуртымға биреү, йылғала ағып төшөүҙе, мәмерйәләр буйлап сәйәхәт ойоштороуҙы йәйгә һалдым. Шулай уҡ тирмәләр етештереп һатыуҙы ла әүҙемләштерҙем. Тағы ла "Янгантау" геопаркы менән хеҙмәттәшлек итә башлауымды ла эшмәкәрлегемдең ыңғай этәргесе тип ҡабул итәм. 2018 йылдан алып шулай уҡ урындағы халыҡ менән әүҙем эшләйем, әйҙәгә уларҙан аҙыҡ-түлек һатып алам, шулай уҡ һыбайлы сәйәхәттәр өсөн аттарын ҡуртымға бирәләр. Ике яҡ өсөн дә файҙалы хеҙмәттәшлек, тип уйлайым, сөнки беҙ ҡунаҡтарыбыҙға экологик яҡтан таҙа аш-һыу тәҡдим итеү мөмкинлеге алһаҡ, урындағы халыҡҡа аҡса эшләү юлы асыла. Мәҫәлән, Иҙрис ауылы халҡынан мейестә бешкән икмәкте һәм һөттө 50-шәр һумға, эремсектең ярты килоһын 60 һумға, майҙың килоһын 400 һумға, 10 тиҫтә йомортҡаны 60 һумға һатып алып ҡулланабыҙ. Шулай уҡ ауыл халҡы туристарға үҙе етештергән аҙыҡ-түлекте, йәшелсә-емеште, йылға балығын тура һатыу мөмкинлегенә лә эйә.

Шулай башҡорт мәҙәниәтенә, тарихына иғтибар арта, туристар урындағы оҫталарҙың әйберҙәрен әүҙем һатып ала. Ғөмүмән, туристарҙың күбеһе ер-һыу атамалары, ошо ерҙәрҙә булып уҙған тарихи ваҡиғалар, урындағы халыҡтың йәшәйеше, уның шөғөлдәре менән ҡыҙыҡһына, шуға күрә ошо йүнәлештә әүҙем эшләү ҙә үҙ файҙаһын бирә. Һыуҙан ағып төшкәндә йәки саңғы менән мәмерйәләргә сәйәхәт ваҡытында тарихҡа иғтибар бүләм һәм кешеләрҙең ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңлағанын аңғарам. Башҡортостанда алып барылған һәр туристик эшмәкәрлек урындағы тарихҡа, мәҙәниәткә, ер-һыу атамаларына, халыҡҡа ҙур иғтибар бүлергә тейеш.

**Ҡунаҡтар килгәнен көтөп кенә ятмайһығыҙ, ә төрлө саралар ойоштороп, кемпингты ял итеүҙең әүҙем нөктәһенә әйләндереүегеҙ ҙә күптәргә билдәле.**

- Дөрөҫ билдәләнегеҙ, кемпингтың ваҡиғалы туристик (событийный туризм) үҙәк булараҡ эшләүе лә мине нығ ҡыҙыҡһындыра. Шулай, өс йыл рәттән кемпинг базаһында "Салауат саңғыһы" тип аталған спорт сараһы уҙҙы. Унда йөҙәрләгән кеше ҡатнашыуы сараның халыҡ араһында киң танылыу алыуы һәм кәрәклеге тураһында һөйләй. Шулай уҡ пандемия башланғанға тиклем беҙ йөҙәрләгән кеше ҡатнашыуында "Idris craft fair" һөнәрселек фестивале һәм "Мәмәй фест. Бауырһаҡ" исемле кулинар конкурс үткәрҙек.

Тағы ла беҙҙең кемпингта ҙур һорау менән ҡулланылған хеҙмәт - балсыҡтан төрлө әйберҙәр эшләү оҫталығына өйрәтеү. Балсыҡ менән эш итеү, уға төрлө форма биреү, махсус түңәрәкте әйләндереү балаларға ла, ололарға ла оҡшай. Улар үҙҙәренә балсыҡтан уйынсыҡ эшләй, кулдары оҫталар көршөк әүәләй, шулай уҡ төрлө хайуан һындарын эшләүселәр ҙә күп. Үҙенең ҡул көсө түгелгән әйберҙе кеше ҡәҙерләп һаҡлай, ә улар күңелендә ошо хәтирәләр менән бергә беҙҙең кемпинг тураһында ла матур иҫтәлектәр һаҡлана.

**Туризмды үҫтереү, ошо өлкәлә белгестәр әҙерләү тураһында күп һөйләнелә. Ә ысынында иһә туризм менән шөғөлләнеүселәргә үҙ оҫталығын үҫтерергә булышлыҡ иткән, белемен камиллаштырырға ярҙам булырҙай саралар үткәреләме?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, туризмға ҡағылышлы конференция, вебинар, уҡыуҙар йыш үткәрелә. Шулай уҡ туризм өлкәһендә эшләүселәрҙе тонуста тоторға булышлыҡ иткән конкурстар һаны ла бихисап. Мәҫәлән, мин "Аграр туристик эшҡыуарлыкты ойоштороу", "ЮНЕСКО геопарктарының глобаль селтәре" һәм башҡа курстарҙа уҡыным, "Туристик сувенир" Асыҡ республика, "Иң яҡшы туристик туҡталҡа" һәм башҡа күп төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, еңеүгә өлгәштем, төрлө дәрәжә дипломдар яуланым. Ошондай уҡыуҙар, конкурстар, марафон һәм башҡа төрлө саралар туризм өлкәһендә эшләүсе һәр кемгә ҙур ярҙам булып тора, эшен әүҙемләштерергә булышлыҡ итә. Бындай саралар һәр кемгә йомшаҡ яғын күрергә һәм уны бөтөрөү өҫтөндә эшләргә этәрә, үҙенең уңыштары менән бүлешергә, башҡаларҙың эш алымдарын күрергә мөмкинлек аса. Үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәү эште алға алып китергә ҡәртә булырға мөмкин, ә башҡалар менән әүҙем ҡатнашыу, эш серҙәре менән бүлешеү ике яҡ өсөн дә файҙалы булыуына күп тапҡыр инандым. Әгәр ҙә башҡа коллегаларым менән тығыҙ бәйләнештә эшләмәһәм, бөтә яңылыҡтарға асыҡ булмаһам, туризм өлкәһендә 2020 йылда "Иң яҡшы эшҡыуар" һәм ошо уҡ йылда "Башҡортостан туриндустрияһы лидерҙары" премияһының "Һыуҙа ағып төшөү" номинацияһында лауреат исемдәрен яулау ауырға тура килер ине.

**Уңышлы эшҡыуарлыҡ алып барыу өсөн ниндәй сифаттарға эйә булыу кәрәк?**

- Ялҡау кеше эшҡыуарлыҡтың бер төрөндә лә алға китә алмай. Үҙ эшеңде асыу, уны үҫтереү, күптөрлөлөк араһында нәҡ һинең булмышыңа тура килгән шөғөлдө табыу ғына аҙ. Эшҡыуарлыҡ дәүләт эшендәге һымаҡ сәғәт иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем эшләүҙе күҙ уңында тотмай. Әгәр ҙә эшең ярты йылдан ябылмаһын тиһәң, көнө-төнө, бөтә уй-фиғелең менән ошо эшмәкәрлек тип янырға кәрәк. Эшҡыуарҙың ялы юҡ, тиергә лә була, сөнки аҙ ғына йомшаҡлыҡ күрһәтһәң, әллә күпме ваҡыт бүлеп юлға һалған бөтә ынтылыштарың юҡҡа сығырға ла мөмкин. Туризм өлкәһендә эшләүселәр өсөн бөтә халыҡ ял иткән миҙгел - йәй, оҙайлы ялдар, байрамдар ваҡыты иң ҡыҙыу эш осоро.

Аҡса һанай белеү - эшҡыуарға иң кәрәкле һыҙаттарҙың береһе. Ҡулға килгән аҡсаны тәләфләмәйенсә, уны кәрәкле йүнәлештә ҡулланып, арттырыу һәр кемдең хәленән килмәй. Бының өсөн дә таҫыллыҡ, оҫталыҡ кәрәк. Берәү 100 мең һумды әйләнешкә индереп, 200 мең һум эшләһә, икенсе кеше күпмелер ваҡыттан һуң килем алыу ғына түгел, хатта бурыслы булып ҡалырға ла мөмкин.

Пандемия беҙҙең өлкәгә лә үҙгәрештәр индерҙе. Әгәр ҙә эшмәкәрлегебеҙ туҡталып ҡалмаһын, ә тағы ла әүҙемләшһен, килем килтерһен тиһәк, туристарҙы йәлеп итерҙәй яңы туристик продукттар, уларҙың һаулығына хәүеф янамаҫлыҡ итеп ял ойоштора белергә тейешбеҙ. Заман талаптарына яуап биреп, хатта ул талаптарҙы алдан күрә белеп, тиҙ арала тормошҡа ашырып эш иткәндә генә эшҡыуарлыҡ диңгеҙенең көслө тулҡындарында батмайынса, алға атларға була.

Турист - талапсан халыҡ, уның нимә теләгәнен күрә белергә һәм нәҡ уның күңеленә генә ятышлы ял ойоштора алыу һәр ваҡытта ла беҙҙең һымаҡ эшҡыуарҙарҙың иң көслө сифаты булып ҡаласаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Туризм өлкәһендә эшҡыуарлыҡ алып барыуҙың ни ауырлығы бар, тиер кемдер. Килгән кешене ашатып-эсереп, тегене-быны күрһәтеп, уңайлы урынға йоҡларға һалаһың да - вәссәләм, тип йөпләр был эштең бөтә нескәлеген аңлап етмәгән икенсеһе. Ләкин уларҙың береһе лә турист халҡының иҫ киткес талапсан һәм һайлансыҡ булыуына иғтибар итмәҫ. Сәйәхәт, поход яратыусылар - яңы хис-тойғолар артынан ҡыуыусылар, әгәр ҙә улар тәҡдим ителгән ялдан ҡәнәғәтлек тапмаһа, был урынға башҡаса килмәйәсәк. Шуға күрә һәр туристың күңеленә юл асып, унда мәңге төпләнеп ҡалырҙай ял ойоштора алыусы эшҡыуар ғына уңышлы эшмәкәрлеккә ышана ала. Бөгөнгө әңгәмәсем нәҡ шундай эшҡыуарҙарҙың береһе лә инде.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Үҙенсәлекле этнографик материалдар, көнкүреш әйберҙәре, төрлө аш-һыу кәрәк-яраҡтары, ҡайып сигеү өлгөләре - былар барыһы ла Ҡошсо ырыуының тарихи үҙенсәлеге.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТАҒЫ БЕР СИР...

■ Һөнәри ауырыуҙар исемлегенә тағы бер диагноз өҫтәлгән. Америка ғалимдары селфи-терһәк тигән яңы термин уйлап тапҡан. Был сиргә үҙенүҙе фотоға төшөрөргә яратыусылар дусар була, имеш. Нью-Йоркта урынлашҡан медицина үҙәге белгестәре билдәләүенсә, был саҡта терһәк быуыны зарар күрә. Йәғни, бер үк хәрәкәтте күп ҡабатлағандан, терһәк шешә, етмәһә, селфи яратыусыларҙың ҡулы тәбиғи булмағанса бөгөлөргә мәжбүр була. Шуға ла бар нәмәлә лә сама кәрәк, ти ғалимдар. Бик булмаһа, фото төшөргәндә бер ҡул менән генә түгел, ә уларҙы сиратлау дөрөҫөрәк. Күптән түгел ғалимдар тағы бер гипотеза яңғыраҡайны. Фотоны күп төшөү биттә һырҙар барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә, сөнки тире даими рәүештә смартфондарҙан бүленгән электромагнит радиацияһы тәьҫиренә бирелергә мәжбүр.

■ Юғары интеллектҡа эйә ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятмай, ти Буффало университеты ғалимдары. Эксперимент ваҡытында 105 ҡатын-ҡыҙ менән ир-егет математика менән инглиз теленән тест эшләгән. Һуңынан күсле зат ҡатын-ҡыҙҙы баһалаған, быныҡ алдынан тест һөҙөмтәләре белдерелгән. Ир-егеттәр аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланыуын белдергән, әммә үҙ-ара аралаша башлағас та, уларға ҡыҙыһыныуын юғалтҡан. Улар был аҡыллы гүзәл заттар менән ҡабаттан осрашырға теләмәгән. Белгестәр быны ир-аттың аҡыллы ҡатын-ҡыҙ эргәһендә үҙенең көс-ҡеүәтен юғалтыуы менән аңлата.

■ Артыҡ ауырлыҡтан ҡотолоу, тән ауырлығын нормала тотоу өсөн әллә ни ҡатмарлы спорт төрҙәре менән шөғөлләнеү кәрәкмәй, ти Лондондың иҡтисад мәктәбе ғилимдары. Уларҙың әйтеүенсә, даими рәүештә көнөнә 30 минут йәйәү йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең тән массаһы әүҙем күңегеүҙәр яһау менән шөғөлләнеүселәргә ҡарағанда еңелерәк булған. Йәйәү йөрөгәндә ауыр эштә эшләүселәр ҡулланған көскә тиң энергия тотонола. 2025 йылға өлкән йәштәге халыҡтың дүрттән өс өлөшө һимереү менән яфаланасаҡ, шуға ла физик әүҙемлеккә аҙнаһына 150 минут бүлегеҙ, тип кәңәш итә ғалимдар. Шуға ла исмаһам эштән йәйәү ҡайтығыҙ, тигән уй һалабыҙ һеҙҙең күңелдәрегеҙгә беҙ ҙә.

■ Ҡытай ғалимдары шәхси гигиена әйберҙәре сәләмәтлеккә ҙур зыян килтерә, тип белдерә. Пекин университеты 300 ҡатын-ҡыҙҙы тикшергән. Уларҙың анализдарында табиптар ҡайһы бер фталаттарҙың күләме ҙур булыуын асыҡлаған. Ындай фталаттар шампунда, һабында, шулай уҡ аҙыҡ-түлектең ҡаптары составында бар. Фталаттар артыҡ ауырлыҡ йыйыуға ла булышлыҡ итә, ти ғалимдар. Шуға ла көн һайын һабынлап йыуынмау хәйерлерәк. Шулай уҡ ябай аш содаһы йыуыныу әйберҙәрен алыштыра ала.

■ Шәкәрҙең зыянлы ризыҡ икәнен барыһы ла белә. Шәкәр ашағандан һуң ҙур күләмдә энергия бүленә, аҙ хәрәкәтләнгән кешеләр уны ҡулланып та бөтә алмай. Әммә һимеҙлек - шәкәрҙең берҙән-бер бәләһе түгел. Уны артыҡ ҡулланыу хатта психик тайпылыштарға алып килеүе бар. Кеше көнөнә 9 балғалаҡтан артыҡ шәкәр ашаһа, ҡанда холестерин күбәйә, был иһә йөрәк ауырыуҙарына килтерә. Кәнфит, печенье, татлы һыуҙар ҡанда шәкәр күләмен арттыра. Был гел генә ҡабатланһа, шәкәр диабеты сиренә юлығыу хәүефе бар. Шәкәр глюкоза һәм фруктозанан тора. Глюкоза организм өсөн кәрәк, әммә бында ла сама белеү мөһим, ул артыҡ булып китһә, май ҡатламдары барлыҡҡа килә. Фруктоза менән эш ҡатмарлыраҡ. Ул организмға әллә ни файҙа килтермәй, әммә уның зыяны ҙурыраҡ. Фруктоза бауырҙа үҙләштерелә һәм унда майға әйләнә. Май бауырҙа йыйылып, бауыр дистрофияһына килтерә. Алкоголь менән артыҡ мауығыу ҙа ошондай уҡ һөҙөмтәләргә алып килә. Һуңғы 50 йылда донъяла шәкәр ҡулланыу өс тапҡырға артҡан.

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# ҠОШСОЛАР...

## күңелдәренән ҡош осорҙо



**Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам, Бар эшемдең сыҡтым осона. Шуға күрә бөгөн таңдан алып Күкрәгемдән ҡоштар осорам, - Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ошо шиғри юлдары "Ҡошсо ырыуы йыйыны" I төбәк-ара съезының ғилми-ғәмәли конференцияһы мәлендә үк күңелгә уйылғайны. Улар оло ҡорға күптән әҙерләнде, ойоштороу, башҡа ҙур һәм ваҡ мәшәҡәттәрҙе барланы. Ниһайәт, 28 октябрҙә Мәсетле районы ырыуҙаштарын бергә йыйҙы - унда төбәк-ара Ҡошсо ырыуы съезы үтте.**

Көнсығыштың тарихи мәғлүмәттәре буйынса, ҡошсолар Батый хан ғәскәре составына кереп, монголдарҙың Европа илдәренә: Волга Болғарына, Ҡыпсаҡ далаһына, рус кенәзлектәренә, Польшаға, Венгрияға көнбайыш походында ҡатнаша. Монголдарҙың баҫып алыуының әүҙем осоро тамамланғас, улар Батыйҙың кесе туғаны Шибан улусы составына инделелә һәм унда айырым өҫтөнлөклө статусҡа эйә була. XIV-XV быуаттарҙа ҡошсолар башҡорт халҡы составына инә, ә бер өлөшө Джучи улусындағы хаким халыҡ булған "үзбәктәр" составында ҡала. Башҡортлашҡас, ҡошсоларҙың өҫтөнлөгө бөтөрөлә, сөнки башҡорттарҙа барлыҡ кландар ҙа тигеҙ статуслы була.

Бөгөн Ҡошсо ырыуы башҡорттарының күпселеге хәҙерге Свердловск өлкәһенең көньяҡ-көнбайыш өлөшөндә - Красноуфимск округының Биш ауыл, Рахманғол, Бәйәктамаҡ, Ҡуян, Үрге Бәйәк; Түбәнге Серге районының Аҡҡул, Өфө-Шигер, Үрмәкәй; Әртә ҡала округының Бикән, Бәхмәт, Әжеғол, Әртә-Шигер; Әшит ҡала округының Ғәйнә; Башҡортостандың Балаҡатай районының Айҙаҡай, Аҡҡын (бөткән ауыл), Ауышты (бөткән ауыл), Ҡурғаш, Һандалаш; Ҡыйғы районының Юныс; Мәсетле районының Абдулла, Айып, Борғатья, Йонос, Кесе Ҡыҙылбай, Ҡорғат, Ҡотош, Ләмәҙтамаҡ, Мәләкәҫ, Оло Ҡыҙылбай, Салйығот, Тайыш, Тимербай, Тимерәк, Төплөкүл (бөткән ауыл), Һабанаҡ, Һөләймән, Әбдрәхим, Әжекәй ауылдары биләмәһендә йәшәй.

Ҡошсо ырыуынан күп арҙаҡлы шәхестәр сығыуы бер кемгә лә сер түгел, шуға ла бында ойошторолған Дан аллеяһы айырым иғтибар үҙәгендә булды. 18 йыл БАССР Юғары Советы Президиумына етәкселек иткән Фәйзрахман Зәғәфүрәнов, "Бейек Татр" партизан отряды командиры, Чехословакияның почетлы гражданы, педагог, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Вафа Әхмәҙуллин, билдәле ғалим-төркиәтсе, филология фәндәре докторы, профессор Нәжибә Мәҡсүтова, донъяның виртуоз ҡумыҙсылары Роберт Заһретдинов менән Миңлеғәфүр Зәйнетдинов һәм башҡалар - ҡошсоларҙың ғорурлығы.

Сараға килеүселәрҙе Ләмәҙтамаҡ ауылы эргәһендәге тауға "Ҡошсо ырыуы" тигән башҡортса яҙыу ҡаршы алды. Ул Мәсетле районы башҡорттары ҡоролтайы аҡһаҡалы Әхмәтнур Хафизов инициативаһы менән тормошҡа ашырылған. "Һәр кеше үҙенең тамырҙарын, сығышын белергә тейеш, - ти ул. - Тарихын белмәгәндең киләсәге юҡ! Ҡошсо ырыуы вәкилдәре быны яҡшы аңлай. Һис һүҙһеҙ, тарихын һәм ырыуын белгән кеше киләсәктә лә халҡы яҙмышына битараф булмаясаҡ".

Башҡорт тарихы йылы сиктәрендә ойошторолған сарала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡупов, тарих фәндәре кандидаттары Салауат Хәмиҙуллин, Нурислам Ҡалмантаев, Искәндәр Сәйетбатталов, Флүр Дуҫмөхәмәтов, башҡа рәсми ҡунаҡтар, йәмәғәтселәр, район халҡы ҡатнашты. Ҡунаҡтарҙы районның мәҙәниәт йорто фойеһында ағинәйҙәр тергеҙгән милли кәсепселектең төрлө тармағын сағылдырған бай йөкмәткеле күргәҙмә ҡаршыланы. Үҙенсәлекле этнографик материалдар, көнкүреш әйберҙәре, төрлө аш-һыу кәрәк-яраҡтары, ҡайып сигеү өлгөләре - былар барыһы ла Ҡошсо ырыуының тарихи үҙенсәлеге.

Сараның пленар өлөшөндә тарихсылар һәм тыуған яҡты өйрәнеүселәр докладтар менән сығыш яһаны, улар башҡорт ырыуҙары тарихына, проблемаларына туҡталды. "Башҡорттар элек-электән үҙҙәрен борсоған мәсьәләләр буйынса ҡарарҙарҙы күмәк йыйылып, кәңәшләшеп сығарған, - тине Ғәлим Яҡупов. - Былдай саралар халыҡтың тупланыуына, рухи йәһәттән көсәйеүенә булышлыҡ итә. Хәҙерге глобалләшеү шарттарында

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ТЕТРӘНЕҮҘӘР БУЛМАҺА...

## тиҙерәк үлер инекме?



**Был донъяла тик һиненсә генә булмай. Һәр яңы көн ниндәйҙер үҙгәрештәр алып килә, электән хәл ителмәгән проблемаларға яңылары өҫтәлә тора. Һәр кемдең тормошонда була торған киҫкен хәлдәр, юғалтыуҙар, башҡа ауырлыҡтар кеше психикаһында көсөргәнешлек барлыҡҡа килтереп, тәрән һәм оҙайлы кисерештәр тыуҙыра. Фәндә әҙәм балаһының ошо халәтен стресс тип атайҙар.**

### Зыянлымы, әллә файҙалымы?

Глобаль стресс сәбәптәре итеп экология торошоноң аяуһыҙ насарайыуын, ҙур ҡалаларҙа йәшәүселәрҙең саманан тыш көсөргәнешле мөхиттә көн итеүен, эш һөҙөмтәләре өсөн яуаплылыҡтың ҙур булып, етәкселек яғынан кәмһетелеү йәиһә тирә-яҡтағыларҙың көнсөл һәм уҫал ҡараштарын тойоп йәшәү рәүешен һәм башҡа ошондай ауыр йоғонто яһаусы хәл-күренештәрҙе күрһәтеп үтергә була.

Стрестың кешегә зарарлы тәьҫире тураһында күп һөйләйҙәр, уның тән һәм нервы сирҙәренә сәбәп булыуы тураһында ишетмәгәндәр һирәктер. Туҡтауһыҙ стресс кисергән кешенең йә үтә агрессив, йә депрессияға бирелеүсән булып китеүе мөмкин. Стрестан тиҙ генә сыға алмай яфаланғандар йонсоу һәм тиҙ арыусан була. Һуңғы йылдарҙа табиптар байтаҡ ҡына кешенең "хроник йонсоу синдромы" тип аталған сиргә дусар булыуы тураһында ла яҙып сыҡты.

Әммә стресс бер үк ваҡытта кеше өсөн файҙалы ла: әгәр организмды йәшәйештә осраған ҡаршылыҡтарҙы үтеп сығыр өсөн кәрәк булған көсөргәнеш кисереүгә көйләй алмаһаҡ, беҙ бик күп маҡсаттарыбыҙға бер ҡасан да өлгәшә алмаҫ инек. Стресс арҡаһында кеше тиҙ үҙгәреп тороусы мөхиткә яраҡлаша ала, был кеше организмына тәбиғәттән һалынған көйләү механизмы. Стрестар организмды сыныҡтырмаһа, беҙ күптән үлеп бөткән булыр инек. Стресс механизмдарын ғилми яҡтан өйрәнеүгә күп көс сарыф иткән Канада табибы Ганс Сельеның фекерҙәре фәһемле. Беҙ стрестан ҡасып ҡотола алмайбыҙ, әммә уны файҙалана алабыҙ, тигән ул. Бының өсөн уның асылын, тәбиғи тәғәйенләнешен һәйбәт белеп, үҙеңдең стресс менән килешеп йәшәү фәлсәфәһен булдырырға кәрәк икән.

үҙебеҙҙе милләт булараҡ һаҡлап ҡалыу өсөн йыйын йолаһын тергеҙеү мөһим". Артабан Ғәлим Миңлеғәле улы бер төркөм милләттәшебеҙҙе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Рәхмәт хаттары, Маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләне. Ә инде ике кешегә: Мәсетле тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры, район ағинәйҙәр ҡоро рәйесе Нәзирә Әхкәмоваға һәм атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Кабырсак" халыҡ фольклор коллективы етәксеһе Рәсимә Әхмәтйәноваға башҡорт халҡының мәҙәниәтен, телен, йолаларын һаҡлау һәм үҫтереүгә тос өлөш индергәндәре





өсөн "Ал да нур сәс халҡыңа" миҙалын тапшырҙы.

Мәсетле районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Марат Әхмәтшин әйтеүенсә, был оло һәм мәртәбәле йыйынға төплө әҙерләнгәндәр: ойоштороу комитеты ағзаларының кәңәшмәләре, республикалағы һәм күрше өлкәләрҙәге Ҡошсо ырыуы вәкилдәре менән осрашыуҙар, фәнни-ғәмәли конференциялар, конкурстар һәм флешмобтар ойошторолған; фәнни-ғәмәли конференцияла яңғыраған докладтарҙан, карталар һәм фотоматериалдарҙан, башҡорт ырыуҙарының көнүҙәк проблемаларына арналған материалдарҙан торған йыйынтыҡ донъя күргән. "Мәсетлеләрҙә үҙ ырыуҙарын өйрәнеү теләге ҙур, һәм улар үҙ шәжәрәләрен әҙерләүгә етди ҡараны. Ҡошсо ырыуы йыйыны кеүек осрашыуҙар беҙҙе тағы ла нығыраҡ берләштерә, артабан үҫешергә мөмкинлек бирә, яңы маҡсаттар ҡуйыла", - тине Марат Әхмәтшин.

Мәсетле районы хакимиәте башлығы Әнис Әсәҙуллин яҡташтарының тыуған яҡ тарихын һәм республиканың мәҙәни мирасын һаҡлау эшенә тос өлөш индереүен билдәләне. "Һәр кеше үҙенең ҡайһы ырыу вәкиле икәнлеген яҡшы белергә тейеш. Был сара мәсетлеләрҙең ата-бабалары рухына тоғро ҡалыуын, нәҫел ебен өйрәнеп, шәжәрәһенә ҙур иғтибар бүлеүен, балалары үҙ тамырҙарын белһен һәм киләһе быуынға тапшырһын өсөн тырышлыҡ һалыуын күрһәтә", - тине ул.

Билдәләнеүенсә, Красноуфимск районының Һыҙғы ауылында башҡорттарҙың тарихын өйрәнеү буйынса ҙур эш алып барыла. Ғәйшә Айсина 12 йылдан ашыу музей асыу теләге менән янып йөрөй, күләмле тикшеренеү эштәре алып бара, экспонаттар йыя, ҡайып сигеү менән шөғөлләнә. Ул был изге эштә яңғыҙ түгел - балалары матди ярҙам күрһәтә, тыуған ауылдарының яҡшы эштәрен һәм йолаларын дауам итеүҙә башҡаларға өлгө булып тора. Ғәйшә Айсинаның экспонаттары араһында бишек, ҡолға, ағас көҙгөләр, һандыҡтар, карауаттар, милли кейем, ҡыҫҡаһы, йөҙгә яҡын боронғо әйбер бар.

Сверловск өлкәһенең Красноуфимск ҡала округы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Виталий Ихъяев сараға бик етди ҡарауҙарын һәм ентекле әҙерлек эше алып барыуҙарын билдерҙе. "Мәҫәлән, Рахманғол һәм Бишкә ауылдары халҡы менән осрашыу бик йәнле уҙҙы, тине ул. - Бында Ҡошсо ырыуы тарихы, ҡошсоларҙың Красноуфимск районы һәм Башҡортостан Республикаһы аҙмышында әһәмиәтле роль уйнауы хаҡында сығыш яһаныҡ. Шулай уҡ конференция ойоштороҡ. Минең тамырҙарым Оло Аҡа, Әжекәй һәм Һабанаҡ ауылдарына барып тоташа, шуның өсөн дә халҡыбыҙ берҙәм һәм бергә булырға тейеш. Киләсәктә үҙ тамырҙарыбыҙҙы онотмау, милли ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлау өсөн этноүҙәктәр ойоштороп, мәҙәни үҫешкә ярҙам күрһәтергә кәрәк".

Киләсәгенде күргең килһә - балаларҙы лайыҡлы тәрбиәлә, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Ошо хәҡиҡәтте күҙ уңында тотоп, оло ҡор менән бер рәттән Оло Ыҡтамаҡ балалар китапханаһында "Аҡбуҙат" журналы милләттең киләсәге - йәш ҡошсолар менән осрашты. Иҫке Мишәр, Яуыш, Оло Ыҡтамаҡ мәктәптәренән йыйылған 1-4-се класс уҡыусылары алдында баҫмаһың баш мөхәррире Лариса Абдуллина сығыш яһаны. Баҫманың художество мөхәррире Майя Ҡәйүмова менән бергә уҡыусылар ырыу ағасын һәм ҡошон һүрәткә төшөрҙө. 4-се класс уҡыусыһы Арина Йомаҙилова үҙен оҫта рәссам итеп танытты һәм, әлбиттә, уның эше еңеүсе булды. Ә Гөлназ Зәбихуллина, Эвелина Мөбәрәкшина, Эльмир Йыһаншин, Зарина Такиева, Елена Мусина, Илүзә Сабирова лауреат исемен яуланы. "Урал батыр" йәнһүрәтен дә балалар ҡыҙыҡһынып ҡараны. "Район мәктәптәрендә башҡорт теле туған тел һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнелә. Балалар Башҡортостан тарихы, шәхестәр буйынса һорауҙарға ихлас яуап бирҙе. Шәжәрәһен өйрәнеүселәр ҙә бар. Ырыуҙың батыры Салауат Юлаевтың яуҙашы - Ишмән Итҡолов тураһында "Аҡбуҙат" журналының октябрь һанында ошо район шәхесе, С. Юлаев премияһы лауреаты Ринат Камалдың мәҡәләһе баҫылды. Балаларҙың милли шәхестәре рухында, өлгөһөндә үҫеүе бик мөһим", - тип уй-фекерҙәре менән бүлешә Лариса Хашим ҡыҙы.

Оло ҡорҙа мөһим ҡарарҙар менән бер рәттән, ырыу гербы, гимны ҡабул ителде.

**Бөтөн донъя башҡорттары Башҡарма комитеты материалдарын файҙаланып, Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

"Стрестың төрлөһө була, - тип аңлата Корсаков исемендәге клиниканың психология һәм психиатрия кафедраһы профессоры Нина Тювина. - Киҫкен стресс тип аталғаны үтә тәьҫирле эмоциональ ситуация, мәҫәлән, яҡын кешеңдең үлеме, ҡурҡыныс тәбиғәт стихияһы, яман уйлы әҙәмдәрҙең ҡурҡытыуы кеүек хәл-ваҡиғалар һөҙөмтәһендә кисерелә. Хроник стресс - бик оҙаҡ дауам иткән негатив ситуация һөҙөмтәһе: эштә килеп тыуған проблемалар, шәхси тормоштағы ауырлыҡтар, даими рәүештә үҙ-үҙең менән ҡәнәғәтһеҙләнеү тойғоһо кисереү һ.б." Киҫкен стресс ваҡытында үҙенсәлекле психофизиологик реакция барлыҡҡа килә, ул беҙҙең эске көс-ҡеүәтебеҙҙе туплап, организмды яңы ситуацияға ярашлаштырыуға йүнәлтелгән. Хроник стресс ваҡытында кризислы хәл-ваҡиғалар булмаһа ла, кире тәьҫир итеүсе кисерештәрҙең оҙайлы ваҡытта ҡабатланып тороуы психик көсөргәнеште арттыра бара.

### Стресс сәбәбе - үҙебеҙҙә

Һәр кеше айырым шәхес кенә түгел, бер үк ваҡытта йәмғиәт ағзаһы ла. Уның үҙ ихтыяждарын мөмкин тиклем яҡшыраҡ ҡәнәғәтләндереп, бәхетле тормошта йәшәгеһе килә. Әммә кеше бөтә ғүмере буйына йәмғиәт талап иткәндә лә мотлаҡ үтәргә бурыслы. Мәҫәлән, ул билдәле бер һөнәр эйәһе булараҡ, үҙ эшен юғары кимәлдә башҡарып, профессиональ яҡтан үҫеүен туҡтатырға тейеш түгел. Күптәр бер өйрәнгәненә күнегеп китеп, элеккесә эшләүен дауам итә, үҙгәрештәрҙе үҙһенмәй, үҙен үҙгәртергә лә ашҡынып тормай. Кешенең шәхси ихтыяждары башҡалар талап иткән менән тура килмәҫкә лә мөмкин: ул үҙ-үҙе менән ҡәнәғәт бит, унан тағы нимә таптырып йөҙәтәләр һуң? Шәхси баһа менән башҡа кешеләрҙең баһаһы араһында ла йыш ҡына ҙур айырма барлыҡҡа килә. Былар кеше психикаһында сағылыш тапмай ҡалмай: кире пландағы билдәле бер кисерештәр, үҙ тормошоңдан, эшеңдән ҡәнәғәт булмау кеүек сифаттар систематик рәүештә стресҡа нигеҙ һала.

Бында кешенең эшендәге һәм шәхси тормошондағы яуаплылығының арткандан-арта барыуы ла әҙһеҙ үтмәй. Беҙҙә бала саҡтан уҡ бәхетең үҙ ҡулыңда, тип, өйрәтәләр. Шуға ла һәр кем ҙурыраҡ уңыш-ҡаҙаныштарға өлгәшеп, баһалы һәм абруйлы шәхес булырға хыяллана. Ғаилә мөхитендә лә шул уҡ ихтыяждар, шул уҡ юғары талаптар: өйгә мулыраҡ табыш менән ҡайтыусы яҡшы ир, хәстәрлекле һәм назлы ҡатын, барыһын да ҡайғыртып торған ата-әсә, һәр саҡта ла изгелекле һәм ярҙамсыл туған булып ҡалырға кәрәк бит. Ә кеше тормошо һәр саҡта ла бер тигеҙ һәм талғын ғына аҡҡан йылғала йөҙөп барыусы кәмә түгел шул, уның бер заман ҡомға терәлеүе лә бар. Ә беҙ һаман да, үҫмер ваҡытыбыҙҙағы кеүек, нимәләр өмөт итәбеҙ, хатта ниндәйҙер мөғжизә көтәбеҙ. Ә һин бәхет тип иҫәпләгәнең урап уҙһа? Өмөттәре селпәрәмә килгәндәрҙең, үҙҙәре көткән баһаларға өлгәшә алмағандарҙың, тора-бара бик ауыр тойғоларға бирелеп, булмаған ғәйепте кешенән булмаһа, үҙенән эҙләй башлауы ла бик мөмкин. Кешелектең суицид тигән шәхси сәбәпле, әммә асылы менән йәмғиәти булған ҡурҡыныс сире лә ошонан баш алмаймы икән?

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Проблеманы нисек хәл итергә?

Әле һүҙ барасаҡ процедура һеҙгә өлөшләтә таныш. Уның этаптары хәтерегеҙҙә яҡшы һаҡланған икәнлегенә тағы бер тапҡыр инаныу өсөн уны өс тапҡыр уҡып сығығыҙ.

Теләһә ниндәй проблеманы хәл итеү мөмкинлеге биргән күнекмә:

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.
- Асыҡ итеп бер нисә тыныс картинаны күҙ алдына килтерегеҙ.
- Көсөргәнештән арыныу өсөн ундан бергә тиклем кирегә һанағыҙ.
- Һеҙ хәл итергә теләгән проблемалы хәлде ҡараңғы, тоноҡ төҫтәрҙә тип күҙ алдына килтерегеҙ.
- Хәлдең яҡшырғанын төрлө асыҡ төҫтәрҙә күҙаллағыҙ.
- Үҙегеҙгә "Мин үҙ аңымда" тип ҡабатлап, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ. Хәл итеү образлыһын тап бына ошо булыуын һәм уның тормошҡа ашыуын тойоғоҙ.
- Хәҙер китапты ситкә алып ҡуйығыҙ һәм күнекмәне өс тапҡыр ҡабатлағыҙ.

Проблеманы хәл итергә ярҙамлашыу тойғоғоҙ ыңғай йүнәлеш алыр. Ул башҡа проблемаларҙы хәл итеүгә лә булышлыҡ итер. Был йүнәлештә ни тиклем күберәк эшләһәгеҙ, һөҙөмтәһе лә лайыҡлыраҡ булыр.

Бында арауыҡ ҡамасауламай - Ер шарының икенсе осонда булған проблеманы ла хәл итергә мөмкин. Шулай уҡ проблеманың масштабы ла роль уйнамай - ул бер кешегә лә, тотош илгә лә ҡағылыуы ихтимал. Ваҡыт та бында мөһим түгел - проблема мәңгелек булып тойолһа ла, уның Берлин стенаһы ҡолаған кеүек, тиҙ генә юғалыуы ла бар.

Хыялдың иҫ киткес көсө тураһында гәзиттәр ҙә, матур итеп биҙәлгән журналдар ҙа яҙмай, әммә ул ғүмер буйы йәшәй. Миҫалға уйлап табыусыларҙың, рәссамдарҙың, архитекторҙарҙың ижадын алырға була.

Ҡасандыр ниндәйҙер дизайнер хыялында күрмәһә, һеҙ ултырған ултырғыс та эшләнмәҫ ине. Башта ул уны уйлап таба, аҙаҡ һыҙымын һыҙа, ағас оҫталары шуға ҡарап ултырғыс эшләй. Модельер башта "күрмәһә", һеҙ кейеп йөрөгән кейемдәр ҙә булмаҫ ине. Ул хыялында тыуҙырғандан һуң ғына тәүге өлгөләр барлыҡҡа килә һ.б.

Хыялдағы образдар тотош цивилизацияларҙы тыуҙыра. Үҙ халҡы тарихы тураһындағы грек мифтарының сығанағы - фантазия. Шуны уҡ грек сәнғәте тураһында ла әйтергә мөмкин. Панопул кеүек кешеләр ижадтың һәм матурлыҡтың яңы стандарттарын тыуҙырыр тере хыял һәләтенә эйә булған. Сократтың ижади тере аҡылы философияла революция яһай һәм рухи сығанаҡтарға ҡайтыуҙың сәбәбе булып тора.

Сократ принциптарына оҡшарға тырышыу һөҙөмтәле булмай. Уларҙы Полигнот фрескалары итеп сәнғәткә индереү ҙә емеш килтермәй. Әйтергә кәрәк, хыялға хәрәкәт ҡушылып, оҡшатыуға юл асҡас, донъяла грек йоғонтоһо юҡҡа сыға башлай.

Хыял - ул Илаһтың ижади потенциалын файҙаланыу. Уның менән бәйләнеште һаҡлау - тормошҡа илһам асҡысы.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# АНДЫҘ



**Андыҙ июнь-сентябрь айҙарында һары сәскә ата, ә емеше август-октябрь тирәһендә өлгөрә. Ул дымлы туғайҙарҙа, йылға, күл ярҙарында, урман ситендә үҫә. Был шифалы үлән республикабыҙҙың күпселек райондарында осрай. Тик Урал аръяғында һирәк күҙәтелә.**

Дауалау өсөн андыҙҙың тамыры һәм тамырһабағы ҡулланыла. Уларҙың составында алкалоидтар, сапониндар, инулин шәкәре, эфир майы, С, Е витаминдары һ.б. биологик актив матдәләр бар. Андыҙҙың һабағын көҙгөһөн йәки яҙҙың тәүге айҙарында ҡаҙып алырға була. Ҡаҙып алғас, тамыр һәм тамырһабағы тупраҡтан таҙартыла, ағым һыуҙа йыуыла. Эре тамыр һәм тамырһабаҡ киптерер алдынан ярып киҫкеләнә. Киптереү өсөн ҡоро, күләгәле урын һайлана. Кипкән тамыр һәм тамырһабаҡ дөрөҫ һаҡлағанда өс йылға тиклем шифаһын юғалтмай. Андыҙ тамыры һәм тамырһабағынан әҙерләнгән ҡайнатманы тын алыу юлдары, үпкә, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан, диабеттан, үт ҡыуығы шешеүҙән, бәүел ҡыуығының цистит сиренән, дөйөм шешенеүҙән, экзема, кесерткән биҙгәге, дерматит кеүек тире ауырыуҙарынан, өҙлөкһөҙ сиҡаншеш сығып йонсотҡанда ҡулланырға кәңәш ителә. Дауаны әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған тамыр һәм тамырһабаҡты 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, 10-15 минут ҡайнатырға кәрәк. Уны көнөнә 3-4 тапҡыр, ас ҡарынға, 2-3 ҡалаҡ эсергә.

Андыҙ дауаһы көслө. Шуға күрә врач билдәләүе буйынса дауаланыу мотлаҡ.

# АРТЫШ



**Йыл буйы йәшел төҫөн юғалтмаған был бәләкәй ылыҫлы ағас үҫемлектең русса атамаһы - можжевельник обыкновенный. Артыш ҡомло һәм ташлы тупраҡта, ҡарағай һәм ҡарағай ҡатнаш урмандарҙа үҫергә ярата. Республикабыҙҙың Белорет, Бөрйән, Архангел, Ғафури, Дүртөйлө һ.б. ҡайһы бер райондарында йыш осрай.**

Дауалау өсөн артыштың, ғәҙәттә, емеше ҡулланыла. Уның составында гликозид, эфир майҙары, камфора, терпинолен, фитонцидтар, витаминдар (бигерәк тә С витамины күп) һ.б. биологик актив матдәләр бар. Артыш емешен өлгөргәс, сентябрь айында йыялар һәм ҡояш төшмәгән урында киптерәләр. Кипкән емеште һаҡлау ғәҙәттәгесә, ул өс йылға тиклем шифаһын юғалтмай.

Артыш емешенән әҙерләнгән төнәтмәне йөрәк ауырыуынан шешенгәндә, үт ҡыуығы һәм үт юлдары сирҙәренән, диабеттан, бөйөрҙә таш барлыҡҡа килгәндә, ҡан баҫымы күтәрелгәндә ҡулланырға кәңәш ителә. Төнәтмәне әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ кипкән артыш емешен 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтө ябыҡ килеш йылы урында 1-1,5 сәғәт тоторға кәрәк. Шифаны көнөнә өс тапҡыр, ас ҡарынға, 1 ҡалаҡ эсергә. Артыш емешенән ҡайнатма ла әҙерләргә мөмкин: 1 ҡалаҡ емешен 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, 20 минут ҡайнатып алырға. Был дауа ла өҫтә һанап сыҡҡан ауырыуҙарҙан төнәтмә кеүек ҡабул ителә.

Артыш ҡайнатмаһын аяҡ-ҡул һыҙлағанда ванна яһау өсөн ҡулланырға була. Емешенән алынған майҙы һыҙлаған ергә йоҡлар алдынан ыуырға тәҡдим ителә.

Башҡорт халыҡ медицинаһында артыш емешенән әҙерләнгән төнәтмәне төндә бәүеле тотмаған кешегә эсергәндәр, ә артыш ылыҫын гигиеник маҡсатта файҙаланғандар. Өйҙәге насар еҫте бөтөрөү өсөн (шулай уҡ ғаиләлә берәйһе ҡаты сирләгәндән һуң) артыш ботағын элер булғандар.

Артыш дауалары көслө. Емешенән әҙерләнгән дарыуҙы бөйөрҙәрҙең нефрит һәм нефрозонефрит кеүек етди ауырыу булғанда, йөклө һәм имеҙгән ҡатындарға, бәләкәй балаларға эсерергә ярамай. Дауаланыу мотлаҡ врач билдәләүе буйынса үтергә тейеш.

# БАЛАН



**Уңған хужабикәләр был мәлгә балан емешен күптән йыйып әҙерләп ҡуйғандарҙыр. Дауалау өсөн уның ҡайыры һәм емеше ҡулланыла. Ҡайырыһын апрель-май айҙарында әҙерләһәң, емешен тап әлеге осорҙа эшкәртеп алыу яҡшы. Балан емеше тәүҙә һулытыла, аҙаҡ янып бөткән мейестә (температура 50-55 градустан артмаһын) киптерелә. Кипкән дауаларҙы ҡоро урында һаҡларға.**

Баландың емешен, уның һутын ҡан баҫымы юғары булғанда ҡабул итеү шифалы. Емешенән әҙерләнгән төнәтмәне нервылар ҡаҡшағанда, өҫкө тын алыу юлдары шешкәндә, бөйөр сирҙәренән шешенгәндә, эс киткәндә ҡулланырға кәңәш ителә. Төнәтмәне 1 балғалаҡ киптереп ваҡланған балан емешен 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтө ябыҡ килеш йылы урында 40-50 минут тотоп әҙерләйҙәр. Уны көнөнә 2-3 тапҡыр, ашар алдынан 1-2 ҡалаҡ эсергә.

# ҠАРА МИЛӘШ



**Ҡара миләштең тыуған яғы - Төньяҡ Америка. Ул ашарға яраҡлы емеше өсөн һәм декоратив маҡсатта үҫтерелә, емештәре август-сентябрҙә өлгөрә. Дауаланыуҙа нәҡ емештәре ҡулланыла.**

Уның составында А, С, В, Е, Р, РР витаминдары, алма кислотаһы, микроэлементтар һ.б. биологик актив матдәләр бар. Ҡара миләш емешен ашау гипертония ауырыуының тәүге осоронда, боғаҡ сире, атеросклероз булғанда, ашҡаҙандың эҫелеге түбәнәйгәндә, ҡан тамырҙары (бигерәк тә капиллярҙар) өсөн файҙалы. Дауаланыу маҡсатында ҡара миләш емешен көнөнә өс тапҡыр, ашар алдынан, 1/2 стакан ҡулланырға кәңәш ителә.

Ошо ауырыуҙарҙан яңы алынған емештең һутын да файҙаланырға мөмкин: көнөнә өс тапҡыр, ашар алдынан, 1-2 ҡалаҡ эсергә. Дарыуханаларҙа Р витамины таблеткалары һатыла. Уны ҡара миләш емешенән әҙерләйҙәр. Ул ҡан тамырҙары сирле булғанда файҙалы.

Ҡара миләште һәр кемгә ҡулланырға ярамай. Ашҡаҙандың эҫелеге күтәрелеү менән үтеүсе гастрит йәки ашҡаҙан һәм бөйән эсәгенең сей яра (язва) ауырыуы булғанда ҡара миләш емеше менән дауаланырға кәңәш ителмәй.

# МИЛӘШ



**Миләш, йәки республиканың ҡайһы райондарында "мышар" ҙа тип йөрөтөлгән был ағас Башҡортостанда киң таралған. Дауалау өсөн миләштең емеше ҡулланыла. Миләш емеше ҡырау төшкәс йыйыла һәм мейестә киптерелә.**

Уның составында төрлө биологик актив матдәләр: каротин, С, Р, В, РР витаминдары, алма, сорбин кислоталары, шәкәр, гликозид, флавоноидтар һ.б. бар. Кеше ябыҡҡанда, аҙ ҡанлылыҡ, ашҡаҙандың эҫелеге түбәнәйгәндә, бөйөр, үт ҡыуығы шешкәндә, подагра ауырыуы булғанда, берәй эске ағзанан (ашҡаҙандан, аналыҡтан һ.б.) ҡан килгәндә, бөйөрҙәрҙә таш барлыҡҡа килгәндә миләш емешенең һутын эсеү файҙалы. Был сирҙәрҙән түбәндәгесә кипкән миләш емешенән әҙерләнгән төнәтмә файҙалы: 2 ҡалаҡ ваҡланған емеште 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтө ябыҡ килеш йылы урында 30-40 минут тоторға. Дауаны көнөнә өс тапҡыр, ас ҡарынға, ярты стакан эсергә. Емеште сәй һымаҡ бешереп тә ҡабул итергә мөмкин.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре" китабынан.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 ноябрь "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама. 12+
**10 ноябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**11 ноябрь "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+
**12 ноябрь "Ғәфү ит мине"** (И. Герман), мелодрама. 12+
**13 ноябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+
**14 ноябрь "Әҙләнем, бәғрем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**11 ноябрь Премьера! "Арба"** (Зөһрә һәм Таңсулпан Бураҡаевалар), әкиәт. 11.00, 13.00 6+
**12 ноябрь "Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева), музыкаль риүәйәт. 12+
**13 ноябрь "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 12.00 0+
**"Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 18.00 16+
**14 ноябрь "Аладдин"** (И. Казакова). 12.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11 ноябрь "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), спектакль-синестезия. 6+
**13 ноябрь "Коза дереза"** (М. Супонин). 11.00, 13.00 0+
**"Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 16.00 0+
**14 ноябрь "Три поросенка"** (С. Михалков). 11.00, 13.00 0+
**"Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**11 ноябрь Органсы Владимир Королевскийҙың** концерты. 6+
**13 ноябрь "Ижади экватор"** ҡурайсы Азат Биксуриндың концерты. 18.00 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**12 ноябрь "Һатам! Иремде һатам!"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 12+
**13 ноябрь Премьера! "Быуаттарҙы быуаттарға ялғап..."** бейеү театры тамашаһы. 18.00 6+
**14 ноябрь "Три богатыря и Соловей-разбойник"** (А. Зарипов), әкиәт. 12.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**10 ноябрь "Море. Остров. Клад"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар тарихы. 11.00 6+
**"№13"** (Р. Куни), комедия. 16+
**11 ноябрь "Золотой цыпленок"** (В. Орлов), әкиәт. 10.00 0+
**"Конец игры"** (З. Сөләймәнов), йәштәр өсөн социаль драма. 14.00 12+
**12 ноябрь "Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+
**13 ноябрь "Золушка"** (Д. Голубецкий), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**9 ноябрь "Әүлиә"** (Л. Яҡшыбаева). 12+
**10 ноябрь "Әүлиә"** (Л. Яҡшыбаева). 12+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ноябрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (3) дүшәмбе | 7:05 | 8:35 | 13:30 | 15:53 | 17:23 | 18:53 |
| 9 (4) шишәмбе | 7:07 | 8:37 | 13:30 | 15:51 | 17:21 | 18:51 |
| 10 (5) шаршамбы | 7:09 | 8:39 | 13:30 | 15:49 | 17:19 | 18:49 |
| 11 (6) кесе йома | 7:11 | 8:41 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |
| 12 (7) йома | 7:13 | 8:43 | 13:30 | 15:46 | 17:16 | 18:46 |
| 13 (8) шәмбе | 7:15 | 8:45 | 13:30 | 15:44 | 17:14 | 18:44 |
| 14 (9) йәкшәмбе | 7:17 | 8:47 | 13:30 | 15:43 | 17:13 | 18:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ ЯҘЫУСЫЛАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**44-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Лашка. Беләҙек. Әйт. Бәлеш. Карма. Ырғаҡ. Тышау. Борщ. Шартан. Тиреҫ. Ҡар. Әнисә. Сөй. Тибр. Тирмә. Муҡса. Бүре. Ут. Трал. Мөрйә. Ғәбәҙиә. Йәмғәт.

**Вертикаль буйынса:** Тултырма. Бишбармаҡ. Урыҫ. Тау. Бәке. Турғай. Ширшы. Лилиә. Ҡорот. Риғәйә. Трактор. Уба. Үл. Пи. Аккра. Куб. Әйтем. Олон. Щорс. Ат. Әрәмә.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# БАЛАЛАР ҘА...



**Коронавирустың өсөнсө тулҡыны яңы дельта-штамм һәм билдәләре үҙгәреүе менән генә түгел, ә балаларҙың да ауырыуы менән айырыла.**

Әгәр ул быға тиклем һиҙелмәй генә үтһә, хәҙер хатта реанимацияға һәм үпкәне яһалма елләтеүгә тиклем барып етә. Мәғлүм булыуынса, уның менән яңы тыуған сабыйҙан алып 18 йәшкә тиклемгеләр ҙә сирләй. Өфөнөң Республика клиник инфекция дауаханаһында рәҫланған COVID-19 диагнозы менән әле 66 бала дауалана. Улар Башҡортостандың төрлө райондарынан килтерелгән. "Инфекция һәр кемдә төрлөсә үтә, - ти Республика клиник инфекция дауаханаһы мөдире Әлиә Ҡотдосова. - Ауырыуҙың нисек уҙыуын билдәләп булмай. Үҙен сәләмәт тойғандар ҙа, шәкәр диабеты, беренсе, икенсе иммунодефицит, ДЦП, өҫкө тын алыу юлдары сирҙәре кеүек хроник ауырыуҙары булғандар ҙа килә. Уларға етди иғтибар бирелә, әммә хроник сирләләрҙең бөтәһе лә реанимация бүлегендә ятмай. Ауырыу һәр кемдә төрлөсә үтергә мөмкин. Температура нық күтәрелһә, пневмония барлыҡҡа килһә, кислород ярҙамы талап ителә. Райондарҙың береһенән бер айлыҡ сабый үпкәне яһалма елләтеү системаһында килтерелде. Ғаиләлә бөтәһе лә коронавирус менән ауырыған булған. Әммә әсәһе балаһында киҫкен-респиратор вирусы инфекцияһы билдәләрен күрһә лә, уға әһәмиәт бирмәй. Бала тын ала алмай башлағас ҡына дауаханаға мөрәжәғәт итәләр. Ике көндән уны реанимобилдә килтерҙеләр, ковид рәҫланды. Шуға күрә ата-әсәләрҙән баланың һаулығындағы үҙгәрешкә етди иғтибар талап ителә. Коронавирустың төүге билдәләре: температура, танау тоноу, конъюнктивит, ҡоҫоу, эс китеү. Ғаиләләге бөтә оло кешеләргә вакцинация үтеү мотлаҡ. Бынан тыш, коронавирус кизеү миҙгеле алдынан киҫкен респиратор инфекция менән берләшә. Был осраҡта ла балаһы ла, үҙендә лә тик вакцина менән һаҡларға мөмкин. Гриптан прививканы мәктәп йәшендә үк һалдырырға була".

Шуныһы хафаландыра: әлегә инфекцияның әҙемтәһе ниндәй булыры билдәле түгел. Медиктар әйтеүенсә, COVID-19 менән ауырыған балаларҙа урта һәм ваҡ артериялар зыян күреүе ихтимал. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәте буйынса әлеге ваҡытта республиканың инфекция госпиталдәрендә рәҫланған коронавирус инфекцияһы менән 114 бала, өйҙә амбулатория шарттарында 1574 бала дауалана.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# ИМӘН СӘТЛӘҮЕГЕ

**Имән сәтләүеген өлгөрөүенә ҡарап, ҡышҡылыҡҡа октябрь йә ноябрь айҙарында әҙерләйҙәр. Төүге һыуыҡтар төшкәнсе. Ул бик тиҙ боҙола, шуға йыйғас та киптерергә кәрәк. Кипкән сәтләүектәрҙең дымлылыҡ кимәле 11 процентан да артыҡ булмаҫҡа тейеш.**

Имән сәтләүектәре менән дауаланыу серҙәрен борондан белгәндәр. Ғалимдар ҙа уның файҙалы булыуын тикшереңеүҙәр аша дәлилләгән: хатта бәләкәй генә орлокта ла аҡһым, углевод, танин, шәкәр, майҙар, дуплау матдәләре, крахмал күп. Быларҙы урман йәнлектәре лә яҡшы белә, юҡҡа ғына ҡабан, болан, айыу туйғансы ашарға, күгәрсен, суҡ турғай, фазандар етәрлек йыйнап ҡалырға ашыҡмайҙыр. Хатта ялан сысҡандары ла уны иғтибарһыҙ ҡалдырмай.

Был шифаны йыл әйләнәһенә ҡулланырға ниәтләнһәгеҙ, белгестәр уны киптереп алырға кәңәш итә. Имән сәтләүеген тәүҙә өй башында йәки башы ябыулы урында киптерәләр, шунан духовкала. Тик шунан һуң ғына сәтләүектең тышын орлоҡ ҡабығы менән бергә һыҙырып алырға мөмкин.

Имән сәтләүектәренең төп "коралы" - кверцетин флавонолы. Был матдә бик күп шифалы сифаттарға эйә, шулар араһында шешенеүҙе баҫыу, спазмалы синдром, яраларҙы бөтәйтеү. Бынан тыш, уның бәүел ҡыуҙырыу һәм антиоксидант йоғонтоһо ла бар. Әлбиттә, йәнлектәр өсөн файҙалы булған флавонол кешегә зарарлы, шулай ҙа сәтләүекте башта ебетеп, аҙағынан яҡшы ғына итеп ҡыҙҙырғанда, ағыуы тулыһынса юҡҡа сыға. Әммә дөрөҫ ҡыҙҙырыу кәрәк, көйҙөрмәү мөһим. Әҙер дауа ҡара төҫ урынына бер аҙ ҡыҙғылт төҫкә инергә тейеш. Шунан уны онтаҡлап, кәһүә өсөн төп ингредиент итеп ҡулланалар. Был эсемлеккә теләк буйынса һөт, шәкәр, бал ҡушып эсергә була. Имән сәтләүеге онон икмәк, бутҡа бешергәндә лә ҡулланырға мөмкин.

Славяндар ҙа имән сәтләүегенең файҙаһын яҡшы белгән. Улар энурез, төрлө бәүел-енес ауырыуҙары булғанда, колит һәм теш һыҙлағанда ла ҡулланыуҙары тураһында мәғлүмәттәр бар. Халыҡ медицинаһы белгестәре ашҡаҙан эшмәкәрлеге боҙолған осраҡта түбәндәгесә дауаланырға кәңәш итә: 1 балғалаҡ он итеп тартылған сәтләүеккә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуыһансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Тәүлегенә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Дауаланыу осоро теүәл бер ай дауам итә, шунан туҡтап торорға һәм кәрәк булғанда тағы бер тапҡыр ҡабатларға була. Ошо рәүешле үк әҙерләнгән төнәтмә һалҡын миҙгелдә йүтәл, бронхит, йөрәк сирҙәре киҫкенләшеүе мәнән яфаланыусылар өсөн дә файҙалы.

Бөсөрҙән дауа әҙерләү өсөн бер тигеҙ өлөштә алынған имән япрағы, сәтләүеге һәм ҡайырыһын ваҡлап ҡушырға. 1 ҡалаҡ әҙерләмәгә 1 стакан ҡыҙыл виноград шарабы ҡойорға, 10 минут талғын утта ҡайнатып һөҙөргә. Төнәтмәнән бөсөргә компрестар яһарға.

Диабет булғанда киптерелгән сәтләүектәрҙе тартырға һәм көнөнә 3 тапҡыр ризыҡланырҙан алда 1-әр балғалаҡ ашарға.

Имән сәтләүеген ҡулланырҙан алда табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ.

АФАРИН!

# ЙОНДОҘҘАР СӘХНӘЛӘ ҠАБЫНА



**Йондоҙло йыһан һоҡландырамы һеҙҙе? Уның тауышын ишеткәнегеҙ бармы? Уйламайынса тиҙ яуап бирергә ыраҡтандар, юҡ, тиер. Ашыҡмағыҙ. Тормош ығы-зығыһынан арынып бағығыҙ һеҙ күккә. Тыңлағыҙ. Иң һәйбәт музыка - тынлыҡ, тиһәләр ҙә, бар уның үҙ көйө, үҙ моңо. Күңел ҡылдарында тирбәлгән моңдо ул уй етмәҫ мәңгелеккә һәр кем үҙенсә яҙа ала. Бер кем дә ҡамасауламай...**

Ҡала шау-шыуынан арыған ҡолаҡтарға ял биреп, моң ағыла. Бәй, был бит йондоҙло йыһан киңлеге! Беҙ ерҙән күҙәткән космос түгел, мәңгелек үҙенең сикһеҙ даръяһына йома. Ана бит, планеталар пароды үҙе һинә ҡаршы килә. Шым ғына ошо илаһилыҡта ос та ос! Рәхәт! Уйҙарҙан бер аҙ арындырып, шаршау асыла, концерт залында ултырыуың иҫкә төшә. Баҡтиһәң, йондоҙҙар үҙҙәре сәхнәгә төшкән бит. Сәхнә төбөндәге виртуаль донъяла тауҙарҙы шайләргә була. Таҡыя башлы ҡурайҙар күҙгә салына. Ана-ана, ҡурай таждарында бер-бер артлы йондоҙҙар ҡабына. Оҙағыраҡ дауам итһә ине ошо сихри мәл, тигән уй килә башҡа. Быны күрергә кәрәк, бындай кисерешт яҙып аңлатып булмай. Шулай башланып китә Сибай концерт-театр берекмәһенең 28-се иҗад миҙгелен асыу концерты.

Баштан уҡ әйтәм, прологтағы кисерештәр тамаша бөткәнсе (концерт ике өлөштән тора) дауам итә. Элек ҡарап өйрәнгән стереотипы концерттарҙан айырмалы, бер ниндәй ығы-зығыһыҙ, моң тулҡынында тирбәлгәндәй хис итәһең үҙеңде. Концерттың беренсе өлөшө тулыһынса мюзикл жанрында оркестрҙың тере тауышына солғанып бара. Был яңылыҡ, моғайын, бер Урал арьяғы өсөн генә шундай тәүге тамаша түгелдер. Мюзиклдың композиторы Рәмил Туйсиндың ҡаһарманлығы тип ҡабул итер кәрәктер был ынтылышты. Осто бөркөт, тиек! Ныҡныһын ҡанаттары. Фольклор менән академизмдың бергә үрелеүен көтөп алынған күренеш, тип ҡабул итәйек.

Алып барыусылар артистарҙың исем-шәрифен, лайыҡтарын әйтеп тормайынса, сюжет хәрәкәтен дауам иттерә. Урал батыр (Фларит Бирғәлин) менән Һомай (Зәриә Ырысмөхәмәтова) образдары төп сюжет һыҙығынан ситләштермәй, тамашаны бер бөтөн итеп күҙалларға мөмкинлек бирә. Әйткәндәй, концерт сценарийын Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты Миләүшә Ҡаһарманова яҙған (уның һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы ла ишетәсәкбеҙ был тамашала). Сюжет үҫеше үҙе үк йондоҙҙар хәрәкәте менән ҡуша үрелгән. Телә́й икәнһең, йыһан гиҙ, йә булмаһа, космос тураһында бәләмендә арттыр. Бигерәк тә концерттың беренсе өлөшөндә "Урал батыр" эпосы менән йондоҙлоҡтарҙың исемдәре тап килеүенә хайран ҡалаһың. Ваҡытында мәшһүр ғалимыбыҙ Салауат Ғәлләмов эпостың йәше 4000 йыл булыуын ғилми дәлилдәргә таянып иҫбатлаһа, философия фәндәре кандидаты Зәкирйән Әминев "Боронғо башҡорттарҙың космогоник ҡараштары" исемле хеҙмәтендә эпостың йөкмәткеһе йондоҙлоҡтарҙы күҙ уныңда тотоп иҗад ителеүен ышандырырлыҡ итеп яҙып сыҡҡайны. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ғилмият ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә бындай дәлилдәрҙе. Ә бына дәүләт кимәлендәге филармонияның халҡыбыҙҙың рухи асылына мөрәжәғәт итеүе ҡыуаныслы. Әҙерләнеш тамашаһы өсөн бындай ынтылыш, бәлки, ҡапылғара аңлашылып та етмәҫ, әммә ҡасан да булһа тәүге аҙым яһалырға тейеш бит. Бер ҡайҙа ла аҡҡа ҡара менән, мәҙәни үҙәктәр тамашаһы артынан эйәрергә тейеш, тип яҙылмаған да баһа. "Урал батыр" эпосы ла тап ошо төбәктә яҙып алынған бит. Тап ошо ерлек сәхнәһендә ҡанат ҡағыуына һис тә аптырарға түгел.

Тағы ла, концертта иң ҡыуандырғаны - оркестр соҡоронон буш булмауы. Беренсе өлөштә музыкаль яҡтан профессиональ музыканттар биҙәне. Яңы төҫ, яңы һулыш тамашаға йәм бирҙе, киләсәккә өмөт өҫтәне. Әйткәндәй, тамашаһы өсөн әле таныш булмаған йәштәрҙе сәхнәлә күреү быға тағы бер дәлил булды. Уларҙы айырып билдәләп үтеү яҙыҡ булмаҫ. Филармонияның республикала йәш буйынса иң кеселәр булыуын нәҡ улар билдәләй. Бына улар: Нух Ҡотоев - йырсы, Нурия Аласова - бейеүсе, Илдар Рәхимғолов - йырсы, Алина Вәхитова - йырсы, Арслан Сәлимов - музыкант, Гөлназ Ишбулатова - бейеүсе, Сергей Филиппов - музыкант, Юлиә Иҫәндәүләтова - драма артисы, Радмир Иҫәнғолов - тауыш операторы, музыкант, Юлия Садовская - музыкант, Ильяс Азбеков - музыкант, Гөлкәй Хәсәнова - драма артисы. Сәхнә тултырып баҫып торған йәштәргә ҡарап, Сибай концерт-театр берекмәһенең киләсәге өмөтлө тип ышанысլы әйтеп була. Йәштәр тигәндән, Алина Вахитованың Миләүшә Ҡаһарманова һүҙҙәренә көйөн Рәмил Туйсин яҙған "Етегән йондоҙ" йырын башҡарыуы ла, яңылыҡ булды. Коллективҡа йәштәр килеүе, ысынлап та, яңы һулыш алыу менән бәрәбәр шул.

"Йондоҙҙар атылғанда", тип аталған тамашаны дөйөмләштереп, "Йондоҙҙар ҡабынғанда", тип атарға булыр ине. Иң мөһиме, халыҡ аңланы тамашаның йөкмәткеһен, концерты ойоштороусылар маҡсатына ирешт.

Уңышлы кешеләр тураһында бәхетле йондоҙ аҫтында тыуған, тиҙәр. Ә нинә, бәхетле кешеләр өҫтөндә бәхетле йондоҙҙар ҡабыныуы мөмкин түгелме ни? Ни булһа ла, был тамашаға йондоҙҙар ҙа ҡыуанғандыр, тигән өмөттә ҡалайыҡ. Күктәге йондоҙҙар ҙа, Сибай сәхнәһендә ҡабынып, сәхнә йондоҙона әйләнеп, башҡа сәхнәләргә сығыш яһағандар ҙа...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР

# КӨЛДӨРӘЛӘР!

**"StandUp башҡортса!"проекты республика районлары буйлап гастроль тур иглан итә. Бындай башҡортса тур беренсегә үткәрелә.**

Иң яҡшы ете StandUp комик юморҙың яңы форматы менән таныштырасаҡ. Уларҙың барыһы ла - төрлө КВН лигаларында уңышлы сығыш яһаған тәжрибәле юмористар, Өфөлә башҡорт телендә "Хәйерле StandUp кис" һәм "Прожарка" юмористик майҙансыҡтарҙы ойоштороусылар. Концерт сиктәрендә һәр тораҡ пункттан телгән кеше яңы форматта көсөн һынай ала. Үҙенең ҡыҙыҡлы юморы булғандар аҙаҡ баш ҡалаға "Хәйерле StandUp кис" сараһына саҡырыласаҡ.

Проекты ойоштороусыларҙың береһе Марсель Мөхәмәтйәнов "Башинформ"ға районға сығыу тамашаһы юморҙың яңы төрө менән таныштырып ҡына ҡалмаясаҡ, ә һәләтле йәштәрҙең үҙҙәрен күрһәтеүгә булышлыҡ итәсәк, тине.

Командалар Кушнаренко, Бишбүләк, Йәрмәкәй, Бүздәк райондарында, Туймазы, Бәләбәй, Октябрьский ҡалаларында сығыш яһаясаҡ. Уларҙың үткәрелеү даталары vk.com/subashkortsa төркөмөндә күҙәтеп барырға мөмкин. Гастроль тур тамамланғас, Өфөлә йомғаҡлау концерты буласаҡ.

Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова билдәләүенсә, проект йәштәрҙең иҗади потенциалын үҫтерергә, үҫмерҙәрҙең ялын ойошторорға ярҙам итәсәк. Сарала БР Башлығының юғары әҙерлек тураһында указы положениеларына ярашлы сикләүҙәр үтәләсәк.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮРШЕҢ БАЙ БУЛҺЫН -

## бирмәһә лә, һоранып йөрөмәҫ

Ағайым өйө - аҡ йәйләү, энем өйө - өң төбө.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешеләр мәңге йәшәргә түгел, бер ҡасан да үлмәҫкә теләй.

**(Станислав Лем).**

Арзан урындарҙа ултырыусылар, ҡулдарығыҙҙы сабып алҡышлағыҙ. Ҡалғандарға ынйылары менән шытырлап ултырыу ҙа рөхсәт ителә.

**(Джон Леннон).**

Йәшәү зарарлы. Шуға кешеләр үлә.

**(Станислав Ежи Лец).**

Бәлки, иң күп эшләгәндәр иң күп хыялланаларҙыр.

**(Стиве Ликок).**

Ҡарағыҙ әле миңә. Ике йөҙлө булһам, ошо йөҙөмдө йөрөтөр инемме икән?

**(Авраам Линкольн).**

Башҡаларҙы үҙгәртергә теләгән кеше, әгәр ҙә иң тәүҙә үҙен үҙгәртмәһә, бушҡа тырыша.

**(Игнатий Лойола).**

Миненсә, сәйәсмән һуңғы көнөнә хәтлем халыҡтың уны яратмауына ышана алмай.

**(Юрий Лужков).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Нобунага исемле бөйөк япон һуғышсыһы дошманын ҡыйратырға теләгән, ләкин дошмандары ун тапҡырға күберәк булған. Ул еңеүенә ысын күңелдән ышанһа ла, һуғышсылары быға икеләнгән.**

**Юлда барғанда Нобунага изге бер урында туҡтаған һәм кешеләренә шулай тигән:**

**- Хәҙер мин тәңкә ташлаясаҡмын. Әгәр ҙә бөркөт төшһә - беҙ еңәсәкбеҙ, решка төшһә - еңеләсәкбеҙ.**

**Шулай итеп, Нобунага тәңкә ташлаған һәм бөркөт өҫкә төшкән. Һуңыраҡ уның һалдаттары шул тиклем яҡшы, батырҙарса һуғышҡан, һәм яуҙа еңеп сыҡҡан.**

**- Киләсәкте бер кем дә үҙгәртә алмай, нисек булырға тейеш, шулай була инде ул, - тигән еңеүҙән һуң Нобунаганың ярҙамсыһы, был уңышты яҙмышҡа япһарырға теләп.**

**- Шулай шул, - тигән Нобунага, ике яғында ла бөркөт төшөрөлгән тәңкәгә күрһәтеп".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башкортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
29 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3250
Заказ - 1311